ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

15-21 август (урағай) 2025

№32 (1176)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡунаҡсыллыҡ майҙаны**



3

**Милләтең исемендә һәм...**

йөҙөндә сағыламы?



5-6

**Ир яҡшыһы - ил ҡото,**

йәки Ир-егетлек асылы хаҡында



8-9

**Барыбыҙ ҙа бер көтөүҙән бит беҙ -**

һыйырҙарҙан артыҡ түгелбеҙ...



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Бөйөк аҡыллы кешеләр ошо өс бәләнең ҡорбаны була: ул йә иртә донъя ҡуя, йә хәйерселектә йәшәй, йә үҙенән һуң тоҡом ҡалдырмай. (Боронғо һинд мәҡәле).***

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ АҪАЛАРЫ...

## яңы торлаҡ комплексын биҙәйәсәк



**Баш ҡаланың Затон биҫтәһендә башҡорт орнаменты стилендәге фасадтары булған яңы торлаҡ комплексы барлыҡҡа киләсәк. Халыҡтар Дуҫлығы проспектындағы йорттарҙы традицион башҡорт балаҫы аҫалары биҙәйәсәк.**

Милли орнаменттар ҡулланыу идеяһы - заманса биналарға урындағы колорит биреү маҡсатында тормошҡа ашырыла, тинеләр төҙөүсе компанияла. "Проектта төбәктең традициялары һәм мәҙәни коды заманса ҡала киңлегенә үрелеп барыр һәм өлгө булыр тип көтәбеҙ", - тип аңлатма бирҙе "Самолет" девелоперы вәкиле.

Өфө архитектураһында орнамент күптән ҡулланыла. Мәҫәлән, Конгресс-холл фасады масштаблы башҡорт орнаменты менән биҙәлгән, ә эргәләге фонтан комплексы ҡурай сәскәләре рәүешендә эшләнгән. Өфө үҙәгендәге Hilton Garden Inn һәм Hampton by Hilton ҡунаҡханалары фасадтары ла башҡорт декорына хас орнаменттар һәм биҙәктәр менән биҙәлгән. Милли мотивтар менән рәссамдар ҙа илһамлана, һуңғы йылдарҙа уларҙың муралдары йыш ҡына бина стеналарында күренә. 2023 йылда рәссам Scheme күп ҡатлы йорттоң фасадында заманса интерпретацияла орнамент менән "ӨФӨ" 3D-мурал ижад итә. 2024 йылда Сергей Акрамов Карл Маркс урамында Башҡортостандың эндемик үҫемлектәренән флористик биҙәкле "Эндемик" муралын тәҡдим итә.

Торлаҡ комплексы Халыҡтар дуҫлығы проспектында урынлашасаҡ һәм гектарҙан ашыу майҙанды биләйәсәк. Торлаҡтан тыш, комплекс биләмәһендә мәктәп һәм балалар баҡсаһы төҙөләсәк. Шулай уҡ биш саҡрым оҙонлоҡтағы велосипед-йәйәүлеләр юлы һуҙыласаҡ - ул "Өфө муйынсағы" проектының дауамы буласаҡ. Ә Халыҡтар дуҫлығы проспекты аша компания ер өҫтө йәйәүлеләр үткәүеле төҙөйәсәк.

Шуны ла билдәләп үтергә кәрәк, һуңғы ваҡытта Затон биҫтәһе матурлана бара, бөгөн ул Өфөнөң иң динамик үҫешкән райондарының береһе. Власть уны комплекслы үҫтереү менән шөғөлләнә: юлдарҙы ремонтлай, иҫке торлаҡты һүтә. 2026 йылда бында үҙәктән велосипед юлы һуҙыласаҡ - был хаҡта яҙ көнө мэр Ратмир Мәүлиев һөйләне. Бынан тыш, Башинформ хәбәр иткәнсә, Сергей Михалев, Михаил Зайцев урамдары һәм Халыҡтар дуҫлығы проспекты сиктәрендә еңел атлетика манежы һәм олимпия резервы училищеһы менән ҙур спорт комплексын төҙөү планлаштырыла.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МАТЕМАТИКТАР УҠЫЯСАҠ!

**Өфөлә 360 уҡыусыға һәм 250 йоҡо урынына иҫәпләнгән республика математика лицей-интернаты төҙөлөшөнә рәсми старт бирелде. Тантаналы сарала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**



Сара башланыр алдынан республиканың төҙөлөш һәм архитектура министры вазифаһын башҡарыусы Артем Ковшов төҙөлөштөң дөйөм майҙаны 22 мең квадрат метрҙан ашыу тәшкил итеүе хаҡында һөйләне. Алты ҡатлы бинала заманса уҡыу корпустары, спорт зонаһы, ашхана, китапхана була. Лицейҙы 2027 йылдың аҙағында - 2028 йылдың башында сафҡа индереү планлаштырыла. Күләмле белем биреү проекты "Йәштәр һәм балалар" федераль милли проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла. Мәктәп Менделеев урамындағы "Өфө Экспо" күргәҙмә комплексы эргәһендә төҙөлә. Унда 6-11-се класс уҡыусылары уҡыясаҡ.

- Был мәктәп кенә түгел, ә мәктәптә белем алыуҙың иң юғары нөктәһе. Лицейға тотош республиканан һәләтле балаларҙы йыйырға теләйбеҙ. Был фәнни кадрҙар, талантлы сығарылыш уҡыусылары әҙерләү урыны булырға тейеш. Рәсәй Президенты ярҙам күрһәтмәһә, мәктәпте төҙөү мөмкин булмаҫ ине. Беҙ уға мөрәжәғәт иттек, Президент беҙҙең тәҡдимде тормошҡа ашырырға ҡушты, шуға күрә беҙ уны төҙөргә әҙер. Әйткәндәй, беҙҙең сығарылыш уҡыусыларының 40 проценты Берҙәм дәүләт имтиханында профилле математиканы һайлай. Был илдә иң яҡшы күрһәткес булып тора. Төҙөүселәрҙән сифатлы эш көтәбеҙ, - тип билдәләне Радий Хәбиров.

12+

✓ *1 сентябрҙән туған телдәрҙе өйрәнеү өсөн сәғәттәр һаны үҙгәрмәй. Шул уҡ ваҡытта 1-се класта дәрестәр үткәреү формаһы үҙгәрә. 1 сәғәт беренсе класс уҡыусылары өсөн иң ҡулай булған дәрестән тыш формаға күсерелә.*



ҠЫҪҠАСА

# ТӨҘӨҮСЕ ХЕҘМӘТЕ БАҺАЛЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика төҙөүселәрен һөнәри байрам менән ҡотланы.** Уның билдәләүенсә, Башҡортостан төҙөлөш комплексы ҡаҙаныштары менән топ-роҡло рәүештә алдынғы ун төбәк иҫәбенә инә, Волга буйы федераль округында икенсе урынды биләй. Былтыр беҙҙең төҙөүселәр 3 миллион 350 мең квадрат метр төҙөнө, быйыл миллион квадрат метрҙан ашыу сафҡа индерҙе. Һуңғы алты йылда республикала йәмғеһе 53 мең уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәптәр, 27 меңдән ашыу урынлыҡ балалар баҡсалары, 5 мең урынлыҡ дауаханалар, сменаһына 9 мең кешене ҡабул итеүгә иҫәпләнгән поликлиникалар һәм башҡа объекттар төҙөлдө. Төҙөүселәрҙең тырышлығы йөҙҙәрсә мең ғаиләнең тормошон үҙгәртте, тине республика етәксеһе. Һуңғы биш йылда 728 мең ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртты. Республикала торлаҡ менән тәьмин ителеш бер кешегә 30 квадрат метрҙан ашыуыраҡ тура килә, был иһә Рәсәй күрһәткестәренән юғарыраҡ.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, хәҙер Рәсәйҙең сик буйындағы төбәктәрендә яраланған Башҡортостан яугирҙары реабилитация үтергә хоҡуҡлы.** Атап әйткәндә, Башҡортостанда даими йәшәгән һәм Донецк Халыҡ Республикаһы, Луганск Халыҡ Республикаһы, Херсон, Запорожье өлкәләре, Украина биләмәләрендә Махсус хәрби операцияла ҡатнашыуға бәйле, шулай уҡ Рәсәйҙең МХО барған райондарға яҡын урынлашҡан субъекттары территорияларында ҡоралл провокация барышында имгәнгән (контузия, йәрәхәт, яраланған йәки сирләгән) МХО яугирҙары сертификаттар менән тәьмин ителә. Хәбәр иткәнебеҙсә, Башҡортостанда 2024 йылдан өлкән инвалидтарға, шул иҫәптән МХО-ла ҡатнашыусыларға социаль, медицина һәм профессиональ реабилитацияға бушлай сертификаттар бирелә. Бындай сертификаттың күләме - 52,5 мең һум. Өфөлә, "Йәшел сауҡалыҡ" шифаханаһында МХО-ла ҡатнашыусылар өсөн реабилитация үҙәге эшләй.

✓ **Башҡортостанда сираттағы республика Башлығы гранттары конкурсына йомғаҡ яһалды. Конкурсҡа 346 ғариза тапшырылған, коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙың 30 социаль әһәмиәтле проекты еңеүсе булған.** Республика етәксеһе Радий Хәбиров билдәләүенсә, коммерцияға ҡарамаған 9 ойошма беренсе тапҡыр грант алған, ә ике финалсы бығa тиклем бер тапҡыр ҙа фонд конкурсында ҡатнашмаған. "Ғаиләгә, әсәлеккә, атайлыҡҡа һәм балалыҡҡа ярҙам итеү", "Граждандарҙың айырым категорияларын социаль хеҙмәтләндереү, социаль ярҙам күрһәтеү һәм яҡлау", "Һаулыҡ һаҡлау, сәләмәт йәшәү рәүешен, физкультураны һәм спортты пропагандалау", "Тарихи хәтерҙе һаҡлау", "Фән һәм мәғариф", "Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, унайлы йәшәү мөхитен булдырыу, йәнлектәрҙе яҡлау" конкурстың популяр йүнәлештәре булып тора. Еңеүселәрҙең күбеһе Өфөнән, Стәрлетамаҡтан, Нефтекаманан, Баймаҡ, Белорет һәм Иглин районларынан.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ЙӘШТӘР ҮҘЕБЕҘҘӘ ҠАЛА!

**Сығарылыш уҡыусыларының күпселеге Башҡортостан вуздарын һайлай. Дөйөм алғанда, быйыл абитуриенттар Башҡортостан вуздарына уҡырға инеү өсөн 206 584 ғариза тапшырған. Был иһә былтырғыға ҡарағанда дүрттән бер өлөшкә күберәк, тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығы.**

"Был беҙҙең өсөн бик мөһим күрһәткес булып тора. Өфөнөң юғары уҡыу йорттары йәштәребеҙҙе нығыраҡ йәлеп итә. Быны мин юғары уҡыу йорттары етәкселегe һәм коллективтары, республиканың идара итеү командаһы, алдынғы предприятиеларыбыҙ күп көс һалған системалы эштең һөҙөмтәһе тип иҫәпләйем", - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

Башҡортостандың дүрт вузы "Өҫтөнлөк 2030" программаһында ҡатнашты, тип иҫкә төшөрҙө Радий Фәрит улы. Бынан тыш, "Йәштәр һәм балалар" милли проекты сиктәрендә Өфөлә илдә иң яҡшы кампустарҙың береһе төҙөлә. Быларҙың барыһы ла йәштәр үҙебеҙҙә ҡалһын һәм белем алһын, сит төбәктәрҙең һәләтле йәштәре республикабыҙға уҡырға килһен өсөн эшләнә.

"Әле 10,6 мең кеше беренсе курсҡа ҡабул ителгән, үтип өҫтәне Радий Хәбиров.- Быйыл бөтәһе 15 523 бюджет урыны бар".

Билдәле булыуынса, МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаиләләренә айырыуса иғтибар бүленә. 69 яугир һәм хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең 545 балаһы юғары уҡыу йорттарына уҡырға ингән. Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең күбеһе Башҡорт дәүләт аграр университетын һайлаған, ә бына Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары йышыраҡ Өфө фән һәм технологиялар университетын һайлай.

# БЕР СӘҒӘТ КЕНӘ ТҮГЕЛ...

**РФ Мәғариф министрлығы бөтә ил мәктәптәрендә туған телдәрҙе (Рәсәй халыҡтары телдәрен) өйрәнеүҙе һаҡлап ҡаласаҡ, тип хәбәр итте министрлыҡ етәксеһе Сергей Кравцов.**

Бынан алда Татарстандың мәғариф һәм фән министрлығы Рәсәй мәғариф министрлығына башланғыс мәктәптә туған телдәрҙе өйрәнеү буйынса уҡыу сәғәттәрен 2025 йылдың 1 сентябренән аҙнаһына ике сәғәттән бер сәғәткә тиклем ҡыҫҡартыуҙы бөтөрөүҙе һорап мөрәжәғәт иткәйне. "Туған тел - мәҙәни мираҫтың мөһим өлөшө, уларҙы өйрәнеү мөмкинлеге булырға тейеш. Беҙ белем биреү процесы сиктәрендә тел төрлөлөгөн һаҡлау һәм яҡлау кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алабыҙ", - тине Кравцов.

1 сентябрҙән туған телдәрҙе өйрәнеү өсөн сәғәттәр һаны үҙгәрмәй. Шул уҡ ваҡытта 1-се класта дәрестәр үткәреү формаһы үҙгәрә. 1 сәғәт Роспотребнадзор талабы буйынса беренсе класс уҡыусылары өсөн иң ҡулай булған дәрестән тыш формаға күсерелә. Тейешле тәҡдимдәр РФ субъекттарына ебәрелгән. Министрлыҡта билдәләүҙәренсә, ведомство туған телдәрҙе (РФ халыҡтары телдәрен) өйрәнеүгә ярҙам итеү системаһын, уҡыу материалдарын әҙерләүҙе һәм педагогтарҙың квалификацияһын күтәреүҙе индереп, артабан да үҫтерергә ниәтләй.

# БЕРЕНСЕ БУЛЫУ ӨСӨН...

**Радий Хәбиров Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең вуз-ара студенттар кампусының Геном үҙәгендә "Беренселәр хәрәкәте" менән үҙ-ара эш итеү буйынса Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Координация советы ултырышын үткәрҙе. Ойошманың девизы: "Рәсәй менән бергә булыу, хәрәкәттә булыу, беренсе булыу".**



"Бөгөн республика властары алдында ике төп бурыс тора, - тип билдәләне Радий Фәрит улы. - Заманалар еңел түгел, беҙ дуҫтарса мөнәсәбәттә булмаған Көнбайышҡа ҡаршы яңғыҙ көрәшәбеҙ. Шуға күрә МХО-ға, яугирҙарыбыҙға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам - тәү сираттағы бурысыбыҙ. Икенсе бурыс - республика үсешен тәьмин итеү, торлаҡ, юлдар, поликлиникалар, физкультура-һауыҡтырыу комплекстары һәм башҡа объекттар төҙөү. Һеҙ иһә яҡшы уҡырға бурыслы, һәр кем үҙ эше менән шөғөлләнергә тейеш", - тип билдәләне Радий Хәбиров. Уның һүҙҙәренсә, Өфөлә вуз-ара студенттар кампусының икенсе сираты төҙөлә. Уны 2027 йылдың аҙағында тапшырырға планлаштыралар. Беренсе сират эшләй, унда ғилми лабораториялар һәм студент коворкингтары урынлашҡан. Республикала "Беренселәр хәрәкәте" 2023 йылдың февралендә генә ойошторолһа ла, 300 меңдән ашыу йәштәрҙе берләштерә. "Беренселәр хәрәкәте" грант конкурсында алдынғы урындарҙы яулай. Быйыл 40 еңеүсе 53 миллион һумдан ашыу аҡса отҡан. 3600-ҙән ашыу ҡатнашыусы проекттарҙың һәм конкурстарҙың федераль этаптарына үтһә, уларҙың 87-һе - еңеүсе.

# КӨН ТӘРТИБЕНДӘ - ХӘСТӘРЛЕК

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Пермдә Волга буйы федераль округы советы кәңәшмәһендә ҡатнашты. Уны Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров үткәрҙе.**

Игорь Комаров көн тәртибенә ҡуйылған мәсьәлә буйынса, йәғни МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам, йәштәрҙе эшкә йәлеп итеү тураһында сығыш яһаны. "Округ төбәктәрендә МХО-ла ҡатнашыусыларға 200 күләмле ярҙам сараһы эшләй, - тине ул. - Округтың бөтә төбәктәрендә лә федераль "Геройҙар ваҡыты"на оҡшаш төбәк белем биреү программалары эшләй башланы. Финалсылар билдәләнгән дә инде - 1 088 кеше ҡатнаша, уларҙың 645-е

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Рәсәйҙә спорт объекттары һаны буйынса өс лидер иҫәбенә инде. БР Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров билдәләүенсә, һуңғы алты йылда спорт менән даими шөғөлләнеүсе республика халҡының һаны 35 процентҡа тиерлек артҡан һәм 2 миллион кеше тәшкил иткән. Спорт инфраструктураһы ярайһы уҡ яңыртыла. Ошо йылдар эсендә физик культураны һәм спортты финанслауға яҡынса 35 миллиард һум йүнәлтелгән. 1 мең 400 объект төҙөлгән. Уларҙың һаны буйынса республика илдә өсөнсө урынды биләй.

✓9 августа Стәрлетамаҡтағы Башҡортостан сода компанияһының Каустик предприятиеһында технологик инцидент булды. Ҡорамалдарҙы капиталь ремонт эштәренә әҙерләгән мәлдә газ үткәргес торбала герметизация боҙолоп шартлаған. Барлығы 41 кеше зыян күргән, уларҙың 32-һе дауаханаға һалынған, туғыҙ кеше тейешле медицина ярҙамы алғас та өйҙәренә ҡайтарылған. Бер кеше реанимацияла донъя ҡуйған. Хоҡуҡ һаҡлау органдары ваҡиға буйынса ентекле тикшереү үткәрә.

✓Республика Хөкүмәте Премьер-министр Андрей Назаров белдереүенсә, Стәрлетамаҡтың "Каустик" предприятиеһында шартлау һөҙөмтәһендә зыян күргән эшселәргә өс миллион һумға тиклем компенсация түләнә. "Зыян күреүселәрҙе артабан реабилитациялау буйынса тейешле саралар күрелде, бөтәһенә лә матди ярҙам күрһәтелде. Хәл республика етәксеһенең даими контролендә тотола. Производствола хәл тотороҡланды, бының өсөн хеҙмәт коллективына рәхмәт әйтергә кәрәк", - тип билдәләне Премьер-министр.

✓Радий Хәбиров Салауат ҡалаһы башлығы Марат Заһиҙуллин менән осрашты. Осрашыуҙа МХО-ла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына ярҙам итеү, муниципалитеттың социаль-иҡтисади хәле тикшерелде. Марат Заһиҙуллин республика етәксеһенә ҡаланың үҫеше, шул иҫәптән инвестиция проекттарын тормошҡа ашырыу, социаль объекттар төҙөү һәм уларҙы ремонтлау, йәмәғәт биләмәләрен төҙөкләндереү, юл селтәрен яңыртыу хаҡында һөйләне һәм Башҡортостан етәкселегенең ҡалаға күрһәткән иғтибары өсөн рәхмәт әйтте.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин дәүләт наградаларын тапшырыу тураһында указға ҡул ҡуйған. Бүләкләнеүселәр исемлегендә яҡташыбыҙ ҙа бар. Мәҫәлән, юғары квалификациялы белгестәр әҙерләүҙәге ҡаҙаныштары, ғилми-педагогик эшмәкәрлеге һәм күп йыллыҡ намыҫлы хеҙмәте өсөн Башҡорт дәүләт аграр университеты кафедраһы профессоры Рүзил Авзаловҡа "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған юғары мәктәп хеҙмәткәре" тигән маҡтаулы исем бирелде.

көндөҙгө уҡыу үтә, 443 хәрби хеҙмәткәр резервҡа индерелгән. Күпселек субъекттарҙа белем биреү модулдәре башланған. Округта МХО-ла ҡатнашыусылар сәйәси тормошта ла әүҙем ҡатнаша. Мәҫәлән, 2024 йылда 60 махсус операция ветераны төрлө кимәлдәге закондар сығарыу һәм вәкиллекле органдарға һайланған".

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең сығышында Махсус операцияла ҡатнашыусыларҙы яраҡлаштырыуҙың ыңғай тәжрибәләре хаҡында һөйләне. Һәм МХО ветерандарының шәхси сифаттары һәм тәжрибәһе республикаға бик кәрәк булыуы тураһында ла әйтеп үтте: "Хеҙмәттән һуң егеттәр дәүләт һәм муниципаль идара итеү өлкәһенә килә. Уларҙың өсөүһе әле ауыл советтары етәкләй, 50 -һе муниципаль депутат итеп һайланған, - тип хәбәр итте Радий Хәбиров. - Ошо йүнәлеште үҫтереү өсөн "Геройҙар ваҡыты" федераль проектын дауам итеп, "Башҡортостан геройҙары" кадрҙар программаһын башланыҡ. Ғаризалар һаны буйынса беҙҙең төбәк илдә беренсе урын алды, был проектҡа ышаныс һәм уның кәрәклеге хаҡында һөйләй. Проекттың 70 финалсыһы беҙҙең идара итеү командаһынан остаздар етәкселегендә уҡыуҙы дауам итә".

## ҠУНАҠСЫЛЛЫҠ МАЙҘАНЫ

**Стәрлетамаҡта V "Сауҙагәр 2.0" ҡунаҡсыллыҡ фестивале майҙансығында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров креатив (ижади) индустрияларҙы үҫтереү буйынса республика советының күсмә ултырышын үткәрҙе.**




- Бөгөн беҙ Советтың икенсе ултырышын үткәрәбеҙ. Уның бурысы - креатив индустриялар өлкәһендәге эштең төп йүнәлештәрен билдәләү, - тине республика Башлығы. - Тәүге осрашыуҙан алып беҙ, беренсенән, "Башҡортостан Республикаһында креатив индустрияларҙы үҫтереү тураһында" закон, шулай уҡ иҡтисадтың был өлкәһен көйләүсе норматив-хоҡуҡи акттар ҡабул иттек. Бындай проекттарға ярҙам итеү системаһын булдырабыҙ. Эшҡыуарҙар менән һөҙөмтәле эш итеү өсөн төбәктә ҡатнашыусыларға аныҡ критерийҙар менән ижади индустриялар реестрын төҙөй башланыҡ...

Ултырыштың көн тәртибенең төп темаһы булып ижади иҡтисадты үҫтереүҙә йәштәрҙең ролен арттырыу һәм уның ҡатнашлығында заманса ҡала мөхитен булдырыу тора. Был хаҡта Рәсәйҙең халыҡ артисы, Дон дәүләт техник университетының Креатив индустриялар институты директоры Анита Цой етәкләберәк һөйләне. Ул мәктәп уҡыусыларын һәм студенттарҙы был өлкәлә яңы проекттарҙы әҙерләүгә һәм идара итеүгә йәлеп итеү кәрәклеге билдәләне.

Стәрлетамаҡта ижади индустрияларҙың үҫеше тураһында ҡала хакимиәте башлығы Эмиль Шәймәрҙәнов әйтеп үтте. Ул "Сауҙагәр 2.0" ҡунаҡсыллыҡ фестивале - перспективалы художестволы ниәт һәм креатив иҡтисад идеяларына яҡын символикалы ваҡиға, тип билдәләне. Ижади индустрияларға арналған телевизион проекттың башланыуы тураһында "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының генераль директоры Рөстәм Зәрәфетдинов хәбәр итте. "Башҡортостан юлдаш телеканалындағы "Креатив код" программаһы республика Башлығы ҡушыуы буйынса ойошторолдо һәм ул ижади берләшмәнең башланғыстарын алға ебәреүгә булышлыҡ итәсәк", - тине ул. Ултырыш аҙағында төбәк етәксеһе, советҡа агзалыҡ иҡтисадтың ижади секторын әүҙем үҫтереүҙә күҙ уңында тота, тип билдәләне. Унда ҡатнашыусылар, асылда, республикала ижади индустрияларҙың амбассадоры булырға тейеш. Был маҡсатҡа тармаҡтағы ҡаҙаныштар өсөн йыл һайын премиялар тапшырыу тантанаһы булышлыҡ итәсәк. Тәүге тапҡыр сараны 2025 йыл аҙағында үткәреү планлаштырыла.

## ГАЗЛЫ ЙОРТТАР АРТА

**Башҡортостанда йыл аҙағына тиклем тағы 33 ҡасабаға газ үткәрелә. Әле 39 ҡасаба-ара газ үткәргес файҙаланыуға тапшырылған. Йылдың икенсе яртыһында Башҡортостанда тағы 33 тораҡ пунктты газға тоташтырыу күҙаллана. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһе барышында "Газпром межрегионгаз Өфө" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры Альберт Лоҡманов белдерҙе.**

"Башҡортостанда торлаҡ фондының 87,3 проценты селтәрле газ менән тәьмин ителгән, - ти Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Әлеге күрһәткес башҡа төбәктәргә ҡарағанда юғарыраҡ, әммә республикаға үҫешергә кәрәк. Атап әйткәндә, республика "Газпром" предприятиелары менән уртаҡ проекттарҙы бойомға ашыра. Улар - беҙҙең ышаныслы партнерҙар, бергәләп республикала тормошто яҡшыраҡ һәм уңайлыраҡ итергә тырышабыҙ. Уртаҡ проекттарҙы һәм программаларҙы бойомға ашырыуҙы дауам итәбеҙ, темптарҙы кәметмәйбеҙ".

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 2021-2025 йылдарҙа газ менән тәьмин итеүҙе һәм газ үткәреүҙе үҫтереү программаһы сиктәрендә 44 ҡасаба-ара газ үткәргес төҙөлгән (494,6 километр). Ошо уҡ осорҙа 78 тораҡ пунктта 2572 йорт газға тоташтырылған. Федераль газификация программаһы ғәмәлгә ашырыла. 2021 йылдан башлап республикала 72 328 ғариза бирелгән, шуларҙың 59,5 мене үтәлгән. Башҡортостанда халыҡтың айырым категориялары өсөн газ үткәреүгә сертификаттар тапшырыла, бағса ширҡәттәренә газ һуҙыу программаһы эшләй.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров баҡса ширҡәттәренә лә газ үткәргестәргә тоташыу һәм арзан ағыулыҡ алыу мөмкинлеген бирергә кәрәклеген иҫкә төшөрҙө. Республиканың 20 районында 423 коммерцияға ҡарамаған баҡсасылыҡ ширҡәтендәге 15 мең йортҡа газ үткәрергә мөмкин. Шулай уҡ социаль газ үткәреү буйынса эш алып барыла. Бөгөнгө көнгә 76 мең ғариза бирелгән, шуларҙың 82 проценты үтәлгән (61,3 мең йорт).

*ҠЫҪҠАСА*

## ИНТЕРНЕТ КӘРӘКҺӘ...

**Башҡортостанда йәшәүселәрҙе ауылдарға интернет үткәреү өсөн тауыш бирергә саҡыралар. 2026 йылда "интернетлаштырыу" өсөн ауылдарҙы һайларға ваҡыт етте.** "Һанлы тигеҙһеҙлекте бөтөрөү 2.0" проекты сиктәрендә Башҡортостанда 100-ҙән алып 1000-гә тиклем кеше йәшәгән 1286 ҡасабала интернет үткәрергә мөмкин. Уларҙы тауыш биреү юлы менән һайлайҙар. Август аҙағында һәм сентябрҙә сираттағы этап була. Программа эшләй башлағандан Башҡортостан әүҙем тауыш биреү буйынса беренсе урынды биләне, тип иҫкә төшөрҙөләр республика дәүләт идараһының Һанлы үҫеш министрлығында. Проект сиктәрендә 292 тораҡ пунктта 4G (LTE) база станциялары барлыҡҡа килгән. 2025 йылдың беренсе яртыһында 26 станция асылған, йыл аҙағына тағы ла 61 ҡасабала база станцияларын урынлаштырыу планлаштырыла. Улар 2023 һәм 2024 йылдарҙа тауыш биреүҙә һайлап алынған.

✓ **Рәсәйҙә закон сығарыусылар ипотека буйынса төбәк ставкалары индерергә тәҡдим итә.** Билдәләнеүенсә, социаль ғәҙеллек принцибы буйынса процент ставкалары бөтәһе өсөн дә бер төрлө булырға тейеш түгел. Дәүләт Думаһында белдереүҙәренсә, Рәсәй Президенты был тәҡдимде хуплаған, әлеге ваҡытта ошо мәсьәлә Хөкүмәттә тикшерелә. Бынан алдараҡ демографик сәйәсәт буйынса "Хөкүмәт сәғәте"ндә Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин йәшәгән төбәккә һәм ғаиләләге балалар һанына ҡарап айырылып торған ипотека ставкаһын индерергә тәҡдим иткәйне. Әлеге ваҡытта ипотека кредиттары буйынса ставка "тигеҙ" һәм төбәктәрҙәге граждандарҙың килемен иҫәпкә алмай. "Яҡын арала ипотека буйынса процент ставкаһының дифференциаль кимәлгә сығырбыҙ тип уйлайым: Мәскәүҙә ул бер төрлө, ә Һарытауҙа Һарытау өлкәһендәге уртаса эш хаҡына тиң булырға тейеш (унда хеҙмәт хаҡы Мәскәү өлкәһенән 2,5 тапҡырға түбәнерәк). Шул саҡта социаль ғәҙеллек булыр", - тип билдәләне Дәүләт Думаһы рәйесе.

✓ **2026 йылда минималь эш хаҡы күләме 20,7 процентҡа артып, 27 093 һум тәшкил итергә тейеш. Был хаҡта Рәсәйҙең хеҙмәт министрлығы сайтына һылтанма менән Башҡортостандың хеҙмәт министры Ленара Иванова үҙенең телеграм-каналында хәбәр итте.** "Урал коэффициентын иҫәпкә алып, 31 156, 95 һум. Бюджетты формалаштырғанда был һан бөтәһе өсөн дә бик мөһим", - тип билдәләне министр. 2026 йылда МРОТ-ты 20,7 процентҡа арттырыу тураһында закон проекты Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы сайтында баҫылған. Хөкүмәт йыл һайын федераль ҡануниәт нормаларын иҫәпкә алып минималь эш хаҡы күләмен билдәләй. Уның буйынса минималь хеҙмәт хаҡы күләме былтырғы уртаса эш хаҡының 48 процентынан кәм булмаҫҡа тейеш. Әле МРОТ 22 440 һум тәшкил итә һәм илдә 4,6 миллион кешегә ҡағыла. Башҡортостанда иһә минималь хеҙмәт хаҡы район коэффициенты (15 процент) менән бергә 25 806 һум, тип хәбәр иткәйне "Башинформ". 2000 йылдан башлап МРОТ 26 тапҡыр арттырылды.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Рәсәй Геройы Никита Петров тыуған яғы - Хәйбулла районында яҡташтары менән осрашҡан. Был хаҡта район башлығы Рөстәм Шәрипов үҙенең сәхифәһендә хәбәр итә. "Һуңғы бер нисә йыл эсендә тыуған районына тәүгә ҡайтып, Никита беҙҙең менән осрашырға ваҡыт тапты. Үҙе тураһында һәм ҡаҙаныштары хаҡында һөйләүҙе бөтөнләй яратмай. Улар тураһында күп һанлы хәрби наградалары һөйләй. Никита Александрович йөҙөндә беҙ бөгөн Махсус хәрби операция зонаһында лайыҡлы хеҙмәт иткән һәр кемгә рәхмәт белдерәбеҙ", - тип яҙған Рөстәм Динислам улы.

✓Башҡортостан Башлығы үҙенең указы менән республика Башлығы хакимиәте етәксеһе вазифаһын башҡарыу бурысын етәксе урынбаҫары Искәндәр Әхмәтвәлиевҡа йөкмәтте. Ул 2019 йылдан Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәте етәксеһе урынбаҫары вазифаһында эшләне.

✓Башҡортостанда"Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы дауам итә. Был аҙнала медиктарҙың мобиль бригадалары Нуриман, Ҡыйғы, Ҡариҙел, Көйөргәҙе, Бишбүләк, Йылайыр, Миәкә, Хәйбулла райондарының алыҫ ауылдарында йәшәүселәрҙе ҡараясаҡ. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин һүҙҙәренсә, 21 апрелдән табиптар 254 тораҡ пунктта 133 меңдән ашыу тикшереү, 30 меңгә яҡын рентген-тикшереү үткәргән. Бллгестәр был ваҡыт эсендә онкология, диабет, туберкулез һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары буйынса 3290 шик асыҡлаған. Пациенттар өҫтәмә тикшереүгә ебәрелгән.

✓Баймаҡ ҡалаһы хакимиәте башлығы Радмир Иҫәнбаев вазифаһын ҡалдырҙы. Бөгөндән уның контракты ғәмәлдән сыҡты. Был хаҡта ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә яҙҙы. Эштән китеүенең сәбәптәре тураһында хәбәр ителмәй. "Байтаҡ эштәр башҡарылған һәм таҙа намыҫ менән эстафетаны артабан тапшырырға мөмкин булған ваҡытта вазифамды ҡалдырам", тип билдәләне Иҫәнбаев. Элекке мэр "Баймаҡ. Үҙгәрештәр еле" үҙәк майҙанын яңыртыу, ихаталарҙы төҙөкләндереү, Салауат Юлаев исемендәге ял һәм мәҙәниәт паркын реконструкциялау кеүек әһәмиәтле проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙары тураһында әйтеп үтте.

✓Бүздәк районында "Бәлешфест-2025" фестивале уҙҙы. Республика Башлығы һәм Хөкүмәте ярҙамында бойомға ашырылған проекттың төп маҡсаты - Башҡортостан халыҡтарының милли аш-һыуҙарын һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү. "Бәлешфест-2025" милли аш-һыу фестиваленең символы - 250 килограмм ауырлыҡтағы ҙур итле бәлеш. Тәмле ризыҡты Ҡаран ауыл советы хужабикәләре махсус сығарылған мейестә диаметры ике метрлыҡ табала бешергән. Иң беренсе булып бәлеште Махсус хәрби операция геройҙары һәм уларҙың ғаилә ағзалары тәмләп ҡараны.

✓ *Дәүләт Думаһы киләһе йылдың 1 мартынан Торлаҡ кодексына "ағымдағы ремонтҡа түләү" тигән өҫтәмәне коммуналь түләүҙәр квитанцияһына өҫтәү тураһында үҙгәреш индерергә ниәтләй.*



"КИСКЕ ӨФӨ" ПРОЕКТЫ

# УЛАР БАШҠОРТ МӘКТӘБЕНДӘ УҠЫНЫ!

**Ауылдарыбыҙҙың һәм ҡалаларыбыҙҙың башҡорт мәктәптәрендә белем алып, үҙ тормошонда, эшмәкәрлегендә, ижадында бейектәрҙән-бейек үрҙәр яулаған, республикабыҙҙа һәм Рәсәй кимәлендә киң танылыу тапҡан бик күп арҙаҡлы шәхестәребеҙ бар. Бөгөн балалар, йәштәр улар хаҡында бигүк хәбәрҙәр түгел. Башҡорт мәктәбендә фәндәрҙе башҡортса өйрәнеп тә бик юғары маҡсаттарға, вазифаларға өлгәшеп була икәнен белһендәр әйҙә.**

## МӘЖИТОВ ҒӘЛИ ӘХМӘТ УЛЫ

Ул - Бөйөк Ватан Һуғышында ҡатнашыусы, летчик, гвардия подполковнигы, Советтар Союзы Геройы. 1912 йылдың 14 сентябрендә Йәрмәкәй районының Яңы Шах ауылында (ҡыр-йылан ырыуы башҡорттары йәшәй. **- Ред.**) 11 балалы ғаиләлә донъяға килгән. 1933 йылда армияға алына. 1936 - 1939 йылдарҙа Ҡаҙан хәрби пехота, Ырымбур осоусылар училищеларында уҡый. 1939 йылда Көнбайыш Украинала совет ғәскәрҙәренең махсус хәрби походында, 1939 - 1940 йылдарҙа совет-фин, 1941 йылдың июненән Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша.

Осоусы-штурман яҡташыбыҙҙың хәрби юлы Финляндия күгендә совет-фин һуғышы осоронда башлана. 1941 йылдың июлендә уны Көньяк-көнбайыш фронттың 24-се авиадивизияһындағы 98-се авиаполкка күсерәләр. Мәскәү янындағы һуғыштарҙа Ғәли Мәжитовтың ҡанатлы машинаһы тәүлегенә биш-алты тапҡыр күккә күтәрелә. Боровск ҡалаһы эргәһендә танк колоннаһын тар-мар итеүҙә ҡатнаша. Мәжитовтың экипажы бер осошта ғына өс танкты, байтаҡ ҡына фашист һалдатын сафтан сығара. Уның самолеты дошман утынан тишкеләнеп бөтә. Атыусы ла, радист та һәләк була, ул үҙе генә иҫән ҡала.

Ғәли Мәжитов Көнбайыш Украинаны азат итеүҙә ҡатнаша, Мәскәү, Сталинград, Бухарест, Берлин ҡалалары күктәрендә дошманға ут яуҙыра. 282 хәрби осош яһай. Шуларҙың 60-ы - көндөҙ, ҡалғандары - төндә. Ул 25 мәртәбә Германия территорияһыһында хәрби-сәнәғәт объекттарын бомбаға тота.

Һуғыштың һуңғы көндәренә ҡәҙәр Ғәли Мәжитов полк, дивизия штурманы, хәрби берләшмәнең өлкән штурманы вазифаларын үтәй. Мәжитовтың экипажы фронт авиацияһы составында Ленинград, Тамань ярымутрауы, Курск дуғаһы, Ҡырым өсөн барған ҡаты бәрелештәрҙә ҡатнаша, ҙур батырлыҡтар күрһәтә. Командованиеның бойороҡтарын теүәл үтәгәне өсөн Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була. Дошмандың Ржевск төркөмөн тар-мар итеү барышындағы уңыштары өсөн Ғәли Мәжитовҡа икенсе тапҡыр Ҡыҙыл Байраҡ ордены тапшырыла. Ҡурҡыу белмәҫ, ҡыйыу осоусы-штурман тере легендаға әүерелә. Хәрби командование Мәжитовтың ҡатмарлы шарттарҙа ла бурысты еренә еткереп үтәйәсәгенә шикләнмәй, шуға ла уға Германияның әһәмиәтле объекттарын утҡа тотоуҙы ышанып тапшыралар. Ҡурҡыу белмәҫ, тәүәккәл яҡташыбыҙ был хәрби заданиеларҙы ла уңышлы үтәй. 1944 йылдың 19 августында илебеҙҙең ваҡытлы матбуғат баҫмаларында Ғәли Әхмәт улы Мәжитовҡа Советтар Союзы Геройы исемен биреү тураһында СССР Юғары Советының Указы баҫылып сыға.

Ул 1948 - 1954 йылдарҙа Балашов авиация мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. Һуңынан отставкалағы подполковник Ялта ҡалаһына юллана. Оҙаҡ йылдар буйына ҡала етәкселегендә, автомәктәптә начальник урынбаҫары булып эшләй.

Наградалары: "Алтын Йондоҙ" миҙалы, Ленин ордены, ике Ҡыҙыл Байраҡ, Александр Невский, I дәрәжә Ватан һуғышы, ике Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары, "Хәрби хеҙмәттәре өсөн", "Сталинград оборонаһы өсөн" һәм башҡа хәрби миҙалдар. Ялта ҡалаһында беҙҙең батыр яҡташыбыҙ йәшәгән йорт стенаһына таҡтаташ ҡуйылған.

БЫНАҒАЙЫШ!

# ТИШЕК ҠЫЙЫҠ, ТУҘҒАН ТОРБАЛАР...

**Ошо көндәрҙә генә әле торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәргә 1 июлдән байтаҡҡа арттырылған түләүҙәр квитанцияһын ҡулға алып, өнһөҙ ҡалдыҡ. Бер яҡтан уйлап ҡарағанда, бында бер ниндәй ҙә көтөлмәгән яңылыҡ та юҡ һымаҡ: тарифтар йыл да яңыра, арта тора, тик шулай ҙа был "йола"ның ныҡ ҡына кеҫәгә һуғыуына һис өйрәнеп булмай.**



Эшләп йөрөүсе халыҡ өсөн, бәлки, был түләүҙәр әллә ни һиҙелерлек сығым да түгелдер. Ни тиһәң дә, "Башстат" мәғлүмәттәре буйынса республикала уртаса айлыҡ эш хаҡы 70 меңдән артҡан һәм ул былтырғы күрһәткестәрҙән 11-12 процентҡа юғарыраҡ икән. Тик ғәҙеллек хаҡына шуны билдәләү ҙә кәрәк: был күрһәткес, эшсән халыҡтың барыһы ла бер тигеҙ эш хаҡы ала, тигән һүҙ түгел. Тимәк, яңы тарифтар күбеһенсә аҙ эш хаҡына тир түгеүселәр менән нигеҙҙә өлкән быуын иңенә тос ҡына йөк булып ята. Ошо йылдың 1 ғинуарынан эшләмәгән пенсионерҙарға тәғәйен 9,5 процент индексация ла әлеге тарифтарҙы ҡапларлыҡ кимәл булманы, сөнки БР Тарифтар буйынса дәүләт комитеты 1 июлдән коммуналь түләүҙәрҙе арттырыу кимәлен 14,5 процент тип раҫлаған күрһәткестең рөхсәт ителгән 2,1 процентҡа тирбәлеү ихтималы иҫәпкә алынып, Башҡортостан Башлығының былтырғы 13 ғинуар ҡарары менән быйыл 1 июлдән республика буйынса тарифтар уртаса 16,7 процентҡа ҡиммәтләнде.

Дөрөҫ, Тарифтар буйынса БР Дәүләт комитеты рәйесе Наил Шәрәфетдинов "Башинформ"ға әңгәмәһендә әйтеүенсә, был республика халҡының бөтәһе өсөн дә бер тигеҙ түләү һөҙөмтәһен билдәләүсе күрһәткес түгел, ә кешеләрҙең коммуналь хеҙмәттәрҙән файҙаланыу күләменә һәм тәртибенә бәйле. Мәҫәлән, һыу һәм яғыулыҡ ресурстарын һаҡсыл ҡулланыу, махсус иҫәп приборҙары ҡуйҙырыу, унан ҡала субсидия алыу, тейешле ташламалар менән файҙаланыу ҙа коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙе бер аҙ булһа ла кәметергә булышлыҡ итәсәк саралар икәнен беләбеҙ. Тик шулай ҙа был юлы һүҙ икенсе юҫыҡтараҡ ине: баяғы коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү ҡағыҙына өҫтәп яҙыласаҡ тағы бер хеҙмәт күрһәтеү хаҡында.

Ни сыға, шул депутаттарҙан сыға, тигәндәй, Дәүләт Думаһы киләһе йылдың 1 мартынан Торлаҡ кодексына "ағымдағы ремонтҡа түләү" тигән өҫтәмәне коммуналь түләүҙәр квитанцияһына өҫтәү тураһында үҙгәреш индерергә ниәтләй. Был хәбәр торлаҡ хужаларын борсоуға һалды: ошоға бәйле коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡ тағы ла артасаҡмы? Был башланғыстың авторҙары булған депутаттар әйтеүенсә, торлаҡҡа ағымдағы һәм башҡа ваҡ ремонт эштәре квитанциялағы әлеге "торлаҡты ҡарау (содержание)" пунктында "йәшеренгән". Асылда иһә, торлаҡ хужалары ҡасан һәм ниндәй ремонт эштәре башҡарылған һәм уның өсөн күпме сығымдар тотонолғанын белмәй ҙә, күрмәй ҙә. Күрмәй, сөнки, мәҫәлән, беҙҙең йортта төҙөлгәндән алып 25 йыл буйына бер генә тапҡыр ҙа ағымдағы ремонт эштәре үткәрелгәне юҡ, ә капиталь ремонт хаҡында бөтөнләй һүҙ алып барылмай. Дөрөҫ булһа, беҙҙең йорт советы рәйесе әйтеүенсә, ул 2030 йылға ҡаралған. Дөрөҫ, быйылғы көслө ҡойма ямғырҙарҙан һуң иң юғарығы 7-сенән алып 4-се ҡатҡа тиклем түбәнән һыу ағыуы, бер нисә фатирҙы зыянлауынан һуң ҡыйыҡ майҙанының "20 кв м өлөшөндә" (идарасы компанияның мастеры һүҙҙәренән) ниндәйҙер ремонт эштәре башҡарылды, ләкин беҙ белмәйбеҙ: бының өсөн идарасы компания күпме аҡса тотондо, ниндәй материалдар һатып алынды, был хаҡта ниндәй отчет төҙөлдө һ.б.

Депутаттар фекеренсә, "ремонт эштәре" өҫтәмәһен айырып яҙыу бына ошондай һәм башҡа төрлө һорауҙарға асыҡлыҡ индерәсәк, имеш. Ә йорт хужалары, квитанциялағы айырым статья өсөн өҫтәмә түләү һалынасаҡ, тип борсола. Үҙҙәренең комментарийҙарында фатир хужалары тағы бер пунктҡа аҡса түләп тә, ысынында эштәрҙең торошо үҙгәреп китеренә өмөт бағламауҙарын белдерә. Өҫтәүенә, торлаҡ ойошмалары берләшмәһе рәйесе Константин Крохин, әгәр был төҙәтмә индерелә ҡалһа, коммуналь түләүҙәр артасаҡ, тип утҡа кәрәсин һибә. Дөрөҫ, ул үҙ фекерен, төҙөлөш материалдарына хаҡтарҙың туҡтауһыҙ арта барыуына һылтанып, ышандырырлыҡ итеп нигеҙләй. Ә Дәүләт Думаһының төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ буйынса комитеты рәйесенең урынбаҫары Владимир Кошелев әйтеүенсә, был сара, киреһенсә, күп ҡатлы йорт хужалары мәнфәғәтен яҡлаясаҡ. Идарасы компаниялар башҡаса ремонт эштәре өсөн аҡсаны ҡыҫа йә булмаһа, финанс ҡытлығына һылтанып, ремонт эштәренән тайпыла алмаясаҡ, ти ул. Был фекерҙә лә дөрөҫлөк бар кеүек, ләкин ғәмәлдә идарасы компанияларҙың ремонтҡа тотонолған сығымдарын иҫәпләүҙә элеккесә үк асыҡлыҡ булмаясаҡ, фатир хужалары коммуналь хеҙмәттең был "арифметика"һының осона сыға алмаясаҡ, тип шик белдерә экспերттар.

Ошо урында ирекһеҙҙән һорау килеп тыуа: йылдан-йыл арта барған капиталь ремонт өсөн ай һайын иғәнә түләп, ағымдағы ремонт өсөн йәнә ай һайын өҫтәмә түләп, күпме ваҡыт беҙ тишек ҡыйыҡлы, туҙып бөткән канализациялы, буяуҙары ҡубып, цементы ҡойолоп торған йорттарҙа ыҙа сигеп йәшәргә тейеш икән?..

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда һыуытты һәм ҡойма ямғырҙар яуа. Башгидромет синоптиктары фекеренсә, әлеге ваҡытта республикала һауа торошон төньяҡ һауа массалары һәм ямғырҙар менән аҙ хәрәкәтсән фронталь бүлем билдәләй. "Фобос" үҙәге мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда ямғырҙар 18 августҡа тиклем яуасаҡ. Көндөҙгө һауа температураһы был көндәрҙә +16-нан +23 градусҡа тиклем түбән буласаҡ. 19 августан ямғырҙар туҡтаясаҡ, йәнә ҡояшлы һәм йылы көндәр башланасаҡ.

✓РФ Мәғариф министрлығында 2025-2026 уҡыу йылының сроктарын билдәләнеләр. Яңы уҡыу йылы 2025 йылдың 1 сентябрендә башлана һәм 2026 йылдың 26 майында тамамлана. Шул уҡ ваҡытта көҙгө, ҡышҡы һәм яҙғы каникулдар 7 көндән дә кәм булмаҫҡа тейеш. Беренсе класс уҡыусылары өсөн февралдә бер аҙналыҡ өҫтәмә каникулдар була. Йәйге каникулдар иһә 2026 йылдың 27 майынан 21 августына тиклем. 2025/26 уҡыу йылын тамамлауҙың тәҡдим ителгән даталары Рәсәй субъекттарының белем биреү ойошмаларына ебәрелгән.

✓Мәғариф министрлығы быйылдан уҡыусылар өсөн берҙәм форма индереү тураһындағы мәғлүмәтте кире ҡаҡты. Ата-әсәләрҙең һәм уҡыусыларҙың фекерен иҫәпкә алып, белем усаҡтары үҙҙәре форманың төҫөнә һәм фасонына талаптар ҡуйырға мөмкин, тип белдерҙеләр ведомствола. "Росстандарттың 2024 йылдың 31 августындағы 1155-се бойороғо менән етештереүселәр өсөн милли стандарттың дөйөм техник талаптары билдәләнде. Улар яңы уҡыу йылынан үҙ көсөнә инә. Стандартта Гост талаптарына ярашлы мәктәп формаһын тегеү өсөн параметрҙар яҙылған", - тиелә илдең Мәғариф министрлығы аңлатмаһында.

✓Ишембай районында яңы май һығыу заводы төҙөлә. Инвестор, Өфөнөң "Һомай" май экстракцияһы комплексы, проектҡа 7 миллиард һумға яҡын аҡса һала. Компанияға Ишембайҙа 91 363 квадрат метр майҙан ҡуртымға бирелгән. Инвестиция проектын тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә 330 яңы эш урыны булдырыла. Ярҙам саралары сифатында республика эшкәртеү ҡорамалдарын һатып алыуға сығымдарҙың бер өлөшөн ҡапларға тейеш. Июндә уҙған Петербург халыҡ-ара иҡтисад форумында Башҡортостан Хөкүмәте инвестор менән күләмле инвестиция проектын ғәмәлгә ашырыу тураһында килешеү төҙөнө.

✓Башҡортостанда диңгеҙ флоты ветерандары МХО-ла ҡатнашыусыларға Ульяновск автозаводында етештерелгән машина ебәргән. Ауырғазы районы башлығы Арыҫлан Шәһәретдиновҡа һүҙҙәренсә, УАЗ - хәрби хәрәкәттәр биләмәһендә алыштырғыһыҙ ярҙамсы. Бынан алдараҡ моряктар хәрбиҙәр өсөн 60 мең һумға яҡын аҡса йыйған.

УЙЛЫҒА - УЙ

# МИЛЛӘТЕҢ ИСЕМЕҢДӘ ҺӘМ...

## йөҙөңдә сағыламы?



**Кеше исеменең йәненә тәьҫире, тормошона шауҡымы тураһында төрлө фекерҙәр һәм фараздар ишетелеп тора. Тимәк, йәмғиәттә милләттең киләсәге тураһында борсолоу бар. Был хәл уйландыра һәм ҡыуандыра. Ул турала бик төплө һәм фәһемле итеп "Киске Өфө"лә лә яҙыла килә. Башҡаларҙың фекерҙәрен ишетеп, шәжәрәләрҙәге төрлө быуын исемдәре менән танышып, уйланып, мин дә бер-ике һүҙ әйтергә булдым.**

### Үҙ телендә һөйләшмәһә…

Беҙ ят кеше менән осрашҡанда тәүҙә уның йөҙөнә ҡарап, тәүге мәғлүмәт алабыҙ һәм, автоматик рәүештә (төпкө аң кимәлендә) уға үҙебеҙҙең ҡарашты һиҙемләйбеҙ. Исем-фамилияһын белгәс, ҡайһы халыҡтан икәнен тәҫмөрләйбеҙ, һөйләшкән телен ишетеп, ниндәй милләттән булыуы тураһында һығымта яһайбыҙ һәм шунан һуң ғына аңлы рәүештә уға үҙ мөнәсәбәтебеҙҙе билдәләйбеҙ. Тимәк, кешегә үҙ ҡарашыбыҙ булдырыу, уның менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡороу өсөн уның кем булыуын белеү мотлаҡ, йәғни, йөҙөн күреү, исемен белеү һәм һөйләшкән телен ишетеү зарур.

Йәшерен-батырыны юҡ, кешене милләтенә ҡарап айырыу, баһалау борон да булған, хәҙер ҙә бар. Элегерәк кешенең милләте метрикаһында, паспортында яҙыла ине, бөгөн яҙылмай. Бөгөнгө халыҡтар араһында барған ҡатнаш никахтар һөҙөмтәһендәге ассимиляция арҡаһында йөҙгә ҡарап ҡына милләтте айырыу ҙа икеле. Үҙ телендә һөйләшмәһә, исем-фамилияһынан айырып булмаһа, уның йөҙөнә, ҡиәфәтенә генә ҡарап мөнәсәбәт ҡороу тоғро ла, ғәҙел дә түгелдер, ләкин башҡаса ҡалайтаһың?

Ғәмәлдә исем менән тел ҡала. Исеме үҙ халҡына хас булмаһа, тыуған телен белмәгән кешенең, үҙе әйтмәһә, милләтен дә белеп булмай әле. Ул кеше милләтен ата-әсәһенең кем булыуына ҡарап белә ала, ләкин үҙен милләтенең бер вәкиле итеп таныймы? Икеле, сөнки уны тыумыштан ят исем ҡушып, әсә телендә һөйләшеүҙән мәхрүм итеп, милләтенән яҙҙырғандар... Шәжәрәләрҙә хәҙерге Элина, Карина, Сабина, Регина, Миленаларҙың ҡартәсәй, өләсәйҙәре Әминә, Кәримә, Сәлимә, Рәғизә, Мәзинәләр... Артур, Тимур, Даниларҙың ҡартатайҙары Арыҫлан, Тимерйән, Динислам һ.б. Уларҙың мосолман балалары икәнен әлегә фамилияһы, аталарының исеменән тәҫмөрләп була. Ә, мәҫәлән, Данилдың балалары Артур Данилович йә Милена Даниловна булһа, кем икәнен ҡайҙан беләһең? Шул исем Данилов тигән фамилияға әйләнеп китһә?

(Дауамы 6-сы биттә).

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# АУЛАҠ АЛЯСКА ОСРАШЫУ КӨТӘ



**Был көндәрҙә бөтөн донъя иғтибары АҠШ лидеры Дональд Трамп менән РФ Президенты Владимир Путиндың 15 августа Аляскала үтәсәк осрашыуына йүнәлтелгән. "Ә ни өсөн тап Аляскала?" тигән һорауҙы биреүселәр күп икән. Бының үҙенә күрә символик мәғәнәһе бар, ти сәйәси күҙәтеүселәр. Бер яҡтан, был донъяуи иғтибарҙың Атлантика төбәгенән Тымыҡ океан киңлегенә күсеүенә ишаралаһа, икенсенән, ҡасандыр Рәсәй биләмәһе булған Аляскала - Европанан алыҫтараҡ булыу теләге һиҙемләнә.**

Трамп менән Путиндың осрашыу ниәте билдәле булғас та Аляскаға Украина вәкиленең саҡырылмауы Киевта борсолоу тыуҙырҙы. Ләкин билдәле Беларусь сәйәсмәне Андрей Богодель был йәһәттән үҙ фекере менән уртаҡлашты: "Аляскалағы осрашыуҙа Украина конфликты берҙән-бер тема булып тормаясаҡ. Трамптың Арктика менән ныҡ ҡыҙыҡһыныуы билдәле һәм әлеге ваҡытта был биләмәлә уның өсөн Рәсәй берҙән-бер көнәркәш", - ти хәрби эксперт һәм ошо йүнәлештә үҙ-ара бәйләнештәр мәсьәләһе ҡараласаҡ, ләкин ике яҡлы стратегик масштабтағы ҡыҙыҡһыныуҙар киҫелеше сәбәпле, был хаҡта айырым белдереү яһалмауы ла ихтимал, тип фаразлай. "Рәсәй менән АҠШ - яҡын күршеләр. Улар бер-береһе менән сиктәш, - тип белдерә Рәсәй Президенты ярҙамсыһы Юрий Ушаков.- Аляска менән Арктикала ике илдең иҡтисади ҡыҙыҡһыныуҙары бар, был өлкәлә үҙ-ара файҙалы һәм киң күләм проекттарҙы бойомға ашырыу мәсьәләләре ҡарала".

Эйе, Кремлдә АҠШ менән диалогтың Украина мәсьәләһе менән генә сикләнмәйәсәге хаҡында бер нисә тапҡыр ҡабатлап белдерҙеләр. АҠШ-тың CNN телеканалы хәбәр итеүенсә, Путин менән Трамп саммитына Зеленский саҡырылмаһа ла, Аҡ йорт уның ҡатнашыу мөмкинлеген ҡарай, ләкин был мәсьәлә аҙағынаса килешелмәгән әле. Был хаҡта РФ Президенты Путин, Зеленский менән һөйләшеүҙәрҙең мөмкин булыуы, ә бының өсөн шуға ярашлы шарттарҙың кәрәклеге, ләкин уға өлгәшеүҙең әлегә оҙайлы киләсәк булып тороуын белдерҙе.

Bloomberg фекеренсә, Путин менән һөйләшеүҙәр Аҡ йорт хужаһы өсөн уңышһыҙ тамамланыуы ла ихтимал, сөнки, The New York Times гәзите яҙып сығыуынса, Ҡушма Штаттар Украинаға баҫым яһау юлы менән уны үҙ ерҙәре өлөшөнән баш тартыуға тырышыуы ихтимал, ә Украина президенты Зеленский иһә территорияларҙан баш тартыу мәсьәләһендә үҙенең ныҡлы ҡарарҙа ҡалыуы хаҡында әйтә килә. Хатта, ҡайһы бер аналитиктар шик белдереүенсә, Киевтың тынысл ыҡ килешеүе төҙөүҙе һүҙыу маҡсатында Аляска осрашыуҙары һөҙөмтәһенә ҡарата протест сығыштары ойошторооуы ла ихтимал.

Өҫтәүенә, Рәсәй һәм АҠШ лидерҙарының саммиты ниндәй һөҙөмтә менән тамамланасағына ҡарамаҫтан, НАТО Украинаға ҡорал ебәреүҙе дауам итәсәк, тип вәғәҙәләй уның Генераль секретары Марк Рютте. Шул уҡ ваҡытта ул Аляска саммитында тыныслыҡҡа табан аҙым яһалыр һәм территориялар хаҡында фекер алышыуҙар башланыр тип уйлауын да әйтә. Үҙ сиратында Рәсәй Украинаны ҡорал менән тәьмин итеүҙең туҡтатылмауын конфликтты яйға һалыуҙы тотҡарлау тип билдәләне, бының диалогҡа түгел, ә кире эҙемтәләргә килтерәсәген иҫкәртте һәм НАТО илдәрен конфликтҡа әтәреп, "ут менән уйнау" тип атаны. АҠШ-тың вице-президенты Джей Ди Вэнс әйтеүенсә, Дональд Трамп үҙе лә Аляска һөйләшеүҙәрендә уңышҡа өлләни иҫәп тотмай, шулай ҙа мөмкинлекте һынап ҡарарға уйланы, сөнки был осрашыу хаҡында килешеүгә өлгәшеүҙе "Америка дипломатияһының уңышы" тип атанылар, ти Вэнс.

Евросоюз был көндәрҙә үҙен нисек тота? Европа илдәре лидерҙары Украина һөйләшеүҙәре хаҡында белдереү менән сығыш яһаны. Улар Украина территорияһын хәрби бәйләнештәр һыҙығы буйынса билдәләүҙе кәрәк тип табыуҙарын хәбәр итә. Был белдереү Европаның төп лидерҙары: Британия, Германия, Италия, Польша, Финляндия, Франция президенттары һәм Еврокомиссия башлығы Урсула фон дер Ляйен исеменән баҫылып сыҡты. Мәскәүгә баҫым яһауҙы көсәйтеү маҡсатында Европа лидерҙары тотҡарландырылған Рәсәй активтарын Украинаны тәҙәкләндереүгә тотонорға тәҡдим итә. Бынан тыш, улар Рәсәй - АҠШ саммитында Украина президенты Зеленскийҙың да ҡатнашыуын талап итә һәм уның территориянан баш тартыуы артабан хәүефһеҙлек гарантияһы менән нығытылырға тейешлеген шарт итеп ҡуя.

Ике президент осрашыуының көн тәртибендә, башта әйтеп кителеүенсә, стратегик тотороҡлолоҡтан алып, үҙ-ара сауҙа һәм Арктиканы үҙләштереү мәсьәләләре урын алып тора, тигәйнек. Әйткәндәй, саммит барасаҡ көндәр Аляскала АҠШ-тың Төньяҡ Америка ғәскәрҙәре командованиелары тарафынан ойошторолған "Арктика крайы" хәрби күнекмәләре менән тап киләсәк. Киң мәғлүмәт саралары хәбәр итеүенсә, күнекмәләрҙә АҠШ-тың НАТО буйынса союздаштары ла ҡатнаша һәм уларҙың маневрҙары Рәсәй менән ҡапма-ҡаршылыҡҡа йүнәлтелә. Мәскәү Төньяҡ Атлантика альянсының Арктикалағы хәрәкәттәрен бер нисә тапҡыр тәнҡитләп тә сыҡҡайны һәм шул уҡ ваҡытта был төбәктә АҠШ менән хеҙмәттәшлеккә әҙер булыуын да белдергәйне. Һуңғы ваҡыт бындай хәрби күнекмәләр даими рәүештә үткәрелә башланы. Экс-президент Джо Байден хакимиәте ваҡытында уҡ әле Пентагон үҙенең Арктика стратегияһын яңыртып, Заполярьела АҠШ-тың хәрби хәрәкәттәрен киңәйтеү кәрәклеге хаҡында иғлан итте. Вашингтонға айырыуса Рәсәйҙең Арктикала Ҡытай менән хеҙмәттәшлеге оҡшап етмәй. Ләкин Дональд Трамптың Аҡ йортҡа ҡайтыуы менән Арктикала хеҙмәттәшлек итеү Рәсәй менән АҠШ-тың аралашыу мөмкинлеген тәьмин итәсәк өлкә булараҡ телгә алына башланы. Ошоға бәйле Аляска саммитының мөһимлеген күҙҙә тотоп, эксперттар, ниһайәт, Мәскәү менән Вашингтондың бер-береһе менән һөйләшеү генә түгел, бер-береһен ишетеү һәм аңлау мөмкинлегенә лә эйә буласағын күҙаллай.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✔Баш ҡалала Цюрупа һәм Коммунистик урамдары төҙөкләндерелә. Өфөнөң тарихи үҙәгендә 15 сентябргә тиклем транспорт хәрәкәте сикләнә. Цюрупа урамындағы (30-сы йорттан Коммунистик урамына тиклем) һәм Коммунистик урамындағы (78-се йорттан Цюрупа урамына тиклем) уң яҡ һыҙаттар ябыла. Баш ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, сикләүҙәр биләмәне төҙөкләндереү менән бәйле.

✔Өфөнөң Затон биҫтәһендә Советтар Союзы Геройы Дмитрий Сергеев исемендәге 4-се мәктәп яңыртыла. Ленин районы башлығы Олег Котов һөйләүенсә, федераль һәм муниципаль бюджеттарҙан финанслау һөҙөмтәһендә мәктәптә ҡыйыҡ, тамаша һәм спорт залы, йылытыу һәм электр менән тәьмин итеү системаһы, сантехник ҡоралмалар ремонтланған. Әле ҡойманы яңыртатар һәм биләмәне төҙөкләндерәләр. "Бөгөн капиталь ремонт әүҙем фазала. Яңы уҡыу йылын лайыҡлы ҡаршыларға әҙерләнәбеҙ", - тип яҙа Олег Котов үҙенең социаль селтәрендәге сәхифәһендә.

✔БР Милли музейы 17 августа 14.00 сәғәттә Чернышевский урамы, 88 адресы буйынса урынлашҡан АРТ-квадрат биләмәһенә Самауыр көнөнә арналған сараға саҡыра. Ҡунаҡсыллыҡ һәм ғаилә йылының символлаштырған байрам программаһы ҡыҙыҡлы оҫталыҡ дәрестәре, музейҙың самауырҙар коллекцияһы күргәҙмәһе, традицион башҡорт сәйе эсеү ойошторола.

✔Өфө районы Болғаҡ ауылы янындағы Өршәк йылғаһы аша күперҙе төҙөкләндереү эштәре ике аҙнаға иртәрәк тамамланды, тип хәбәр итте транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова. Яңыртылған күперҙә хәрәкәт асылды. Эштәр 72 көн урынына 58 көн дауам итте. Ремонтты тиҙләтеү өсөн подрядсылар тәүлек әйләнәһенә, ял һәм байрам көндәрендә лә эшләне, тине Минакова. Хәтерегеҙҙә төшөрәбеҙ, 1980 йылда Болғаҡ ауылы эргәһендә, Өфө - Ырымбур федераль трассаһында, төҙөлгән күпер авария хәлендә ине. Һуңғы тапҡыр ул 2014 йылда ремонтланған. Хәҙер күпер аҫтында ремонт башлана, әммә юлда хәрәкәт туҡтатылмай.

✔Йыл башынан Башҡортостанда янғындарҙа 135 кеше һәләк булған. Үлемесле янғындарҙың береһе 29 июлдә Өфөлә сыға. Һөҙөмтәлә 47 йәшлек ҡатын һәләк була, уттан йолоп алынған 69 йәшлек ир һәм 57 йәшлек ҡатын дауаханаға оҙатыла. Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетында хәбәр итеүҙәренсә, янғындарҙың төп сәбәптәре тәмәке тартҡанда ут менән һаҡһыҙ эш итеү, электр ҡоралмаларын дөрөҫ монтажламау һәм файҙаланмау тора.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

БОРОНҒО АМАНАТ

# ТЫЙЫУ ЙОЛАҺЫ

## Тәбиғәтте боҙоуға табу

Ҡанбабалар үҫемлек, тереклек донъяһын изгеләштергән һәм һаҡлаған. А. Инан билдәләүенсә, "урман һәм ағас культы, боронғо дәүерҙәрҙә йәшәгән ырыуҙарҙың урман байлыҡтары, һунарсылыҡ менән көн күреүенә һәм шул айҡанлы фәлсәфәүи ҡараштарына бәйле. Мәҫәлән, Иранда Мәкү ханлығында ҡараҡойондар йәшәгән ауылдарҙың береһе (Софу ауылы) янында изге урман бар. Бындағы ағастарҙы киҫеү түгел, уларға тейеү ҙә - ҙур гонаһ. Урман эсөн ҡорбанға салынған хайуандарҙың һөйәктәре ошонда күмелгән, ҡатындар ағастарға сәскәләр бәйләгән. Урман культына бағышланған байрам өсөн биш көн буйы һарыҡ һөтө йыйылған.

Урман культы башҡа ҡәүемдәрҙә лә мөһим культтарҙың береһе иҫәпләнә. Яҡут һунарсылары туғыҙ йәнле урман рухы булыуына инана. Рухтарҙың иң бөйөгә, хужаһы ла бар. Улар һунарсыларҙы ҡурсалай, бәрәкәт килтерә. Һунарсылыҡ менән көн иткән шор төркиҙәре лә урман рухтарын бик ихтирам итә. Уларҙың инаныуынса, рухтар һунарсының гәйепһеҙ һәм тура һүҙле булыуын теләй. Аусы ауға сығыр көндө енси мөнәсәбәткә инеү тыйыла. Өйҙә ҡалған ғаилә ағзалары ла тәбиғи асылға ярашлы изге эштәр генә ҡыла. Һунарсылар ауҙан ҡайтҡанға тиклем күңел асыу, уйын, көлкө, шаярыу ярамай".

## Тыйылғанға теймәү

Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә тыйылғанға теймәү күренештәре күҙәллана. "Алтын ҡауырһын" әкиәтендә егет ялтлап ятҡан алтын ҡауырһынды алайым тиһә, аты телгә килеп: "Эй, егет, был алтын ҡауырһынға күҙең ҡыҙмаһын, алма, бәләһе бик күп булыр", - ти. Төлкө лә: "Теймә ул ҡауырһынға. Алһаң, күп яфа сигерһең!" - тип иҫкәртә. Шуға ҡарамаҫтан, егет алтын ҡауырһынды алып, ҡуйынына тыға. Ысынлап та, тыңламауҙың, был ҡауырһынды алыуҙың бәләһе күп була. Егеткә, ҙур ҡайғыларға төшөп, ыҙа, яфа сигеп, бошоноп, һыҡтап, күрмәгәнде күреп, бәләләре башына етә яҙып, саҡ үлемдән ҡотолоп, алтын ҡауырһындың ҡошон, һыуҙың һылыу ҡыҙын, дингеҙ төбөнән уның алтын балдағын, мепел йәрөй торған һылыу айғырын алып килергә, ҡайнап торған һөткә, унан һыуға сумып, иҫән ҡалырға тура килә.

"Алтындуға батыр" әкиәтендә Буҙ аты Алтындуғаға: "Ошо ҡая ташҡа мен. Унда бер һәйбәт өй булыр, ул өйҙә ҡыҙҙар уйнап ултырыр, алтын-көмөштәр тулып ятыр. Һин ул өйгә инмә, ҡыҙҙарға, алтын-көмөшкә теймә, юҡһа, һәләк булырһың. Унда икенсе бер насар ғына өй булыр, һин шунынына ин. Ишек төбөндә сөйҙә элеүле торған ҡылысты ал да төш, ул һинең йәнең", - ти. Алтындуға тыйыуҙы боҙмай. Ағалары иһә: "Юлда бер урында бик матур емеш баҡсаһы булыр. Ул баҡса янында туктамағыҙ, емешенә теймәгеҙ, юҡһа, һәләк булырһығыҙ", - тигән тыйыуҙы тыңламай һәм шул арҡала улар өсөн Алтындуға батырға дейеүҙәр менән алышырға, үлеп терелергә насип була.

Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.
(Дауамы бар).

УЙЛЫҒА - УЙ



# МИЛЛӘТЕҢ ИСЕМЕҢДӘ ҺӘМ...

## йөҙөңдә сағыламы?

(Башы 5-се биттә).

## Ҡәрҙәштәр бер-береһенә ылыға

Быларҙы тәфсирләп яҙыуымдың ғилләһе шул: беҙҙең быуынға тиклем беҙ үҙ ҡәрҙәштәребеҙҙе исем-шәрифтәренән еңел таныныҡ. Сит ерҙә йөрөгәндә лә үҙебеҙгә хас, таныш исем ишетһәк, ниндәйҙер яҡын тойғолар уянды, был ят мөхиттә лә беҙ яңғыҙ түгел һәм, кәрәк булһа, ышаныр кешебеҙ бар икәнен тойоу, яттар араһында ла ҡаушап ҡалмаҫҡа ярҙам итте. Мәҫәлән, Ырымбур өлкәһендә армияла хеҙмәт иткән саҡта мосолман халыҡтарының балалары - үзбәк, ҡырғыҙ, татар, төркмән, ҡаҙаҡ һалдаттары - миңә ылыҡтылар, мосолман офицеры янында хеҙмәт итергә тырыштылар. Мин уларҙан баш тартмаһын өсөн, үҙ-ара ярышып, хеҙмәт бурыстарын еренә еткереп атҡарҙылар. Үҙ халыҡтарының вәкиле булмаһам да, мосолман мосолманды ҡыйырһытмаҫ, йәберләтмәҫ, яҡшы мөнәсәбәттә булыр, тип ышандылар. Мин дә уларҙы үҙ туғандарым кеүек күреп, яҡланым, һаҡланым, кәрәк булһа, ярҙам иттем.

Армиянан һуң Стәрлетамаҡта заводҡа эш башлағас, бүлек етәксеһе хеҙмәткәрҙәр менән таныштыра башланы. "Гел урыҫтар икән", тип борсолоброк торғанда, Насибов Фәхретдин тигән исемде ишетеп, йөрәгем йылынып китте. Артҡы рәттә ултырғандар араһынан әҙләп табып ҡараһам, башҡорт, татарға оҡшамаған кеүек, ләкин барыбер үҙендеке - мосолман! Исем-шәрифтәре шулай тип таныта. Тәүге тәнәфестә үк уның янына барып, үҙемсә һаулыҡ һорашҡым. Ул үҙенсә яуап бирҙе. Әзербайжан егете икән. Ул бер йылдан тыуған иленә ҡайтып китте, ләкин шул арала яҡшылап танышып, дуҫлашып, бер-беребеҙгә терәк булдыҡ. Мин уға ныҡыраҡ терәк һәм кәрәк булғанмындыр, сөнки беҙ таныштаҡ, ул үҙен был сит ерҙә, яттар араһында ҡыйыуыраҡ, ышаныслыраҡ һиҙә башлауын әйтте. Ышаныслы, итәғәтле егет ине, ләкин уны ҡаланыҡылар үҙ күреп яҡынлатманылар. Ул мәлдәрҙә әле күптәр үҙҙәрен мосолман итеп һиҙеү, таныу түгел, уйларға ла оялалар ине. Бер йыл арауығында мин Фәхретдинде башҡортсаға, ул мине әзербайжанса әҙ-мәҙ һупаларға өйрәтте. Ул миңә "ағай" тип өндәшә алыуына ҡыуанһа, мин уны үҙҙәренсә "мәшәди" (дуҫ) тип шатландырҙым. Был миҫалдарым менән мин хәҙер беҙ балаларыбыҙҙы бер-береһен таныуҙан, танып белеүҙән, белеп, үҙ мосолманына арҡалана, ышана алыуҙан, бер-береһенең туғанлыҡ, берҙәмлеген тойоп йәшәүҙән мәхрүм итәбеҙ, тип әйтмәксемен.

## Ят исемдәр менән...

Үкенесле, ләкин йәмғиәтебеҙҙә урынлашҡан ялған ҡараш, хатта һаһалма "кағыҙә" буйынса, ҡайһы бер ата-әсәләр аңлаһалар ҙа, заманса кеше булып күренергә тырышыпмы, балаларына халҡыбыҙға бөтөнләй ят, мәғәнәһеҙ исемдәр ҡушалар. Улар кемде алдарға тырышалар ҙыр - үҙҙәренме, йәмғиәттеме? Был вайымһыҙлыҡтан шул ят исемдәр менән йәшәргә мәжбүр булған балалар күберәк зыян күрәләр, билләһи... Бәлки, бөгөн уларға бер-береһен таныу кәрәкмәйҙер? Бәлки, башҡа сәбәптәр барҙыр? Мәҫәлән, ҡыҙҙарға заманса исем ҡушыуҙың бер ниндәй ҙә зыяны юҡ, сөнки уларҙың исемдәре шәжәрәләрҙә дауам итмәй, тип яҙып, әлегерәк мин дә яңылышҡанмын. "Матур" исемле ҡыҙҙарға яраҡлаштырырға тырышыптыр һәм "иҫке" исемдәрен йәштәр, барыбер, үҙҙәренсәгә әйләндерәләр, тигән һылтау менән дә ҡайһы бер ата-әсәләр улдарына "заманса" исем ҡушалар. Шул арҡала башҡорт исемдәре ҡушаматтарға әйләнә бара. Замандың һаһалма модаһына ярайбыҙ тип, "Шарик"тарға әйләнеп бөтмәһәк ярай ҙа ул...

"Тәүбә ҡылмаған кешеләр - залимдар. Бер халыҡ икенсеһен мәсхәрә итмәһен. Үҙ-үҙегеҙҙе хурламағыҙ. Ҡушамат исем аташмағыҙ", - тиелә Ҡөрьән-Кәримдең "Иртә" сүрәһе 6-10-сы аятында. Үкенесле, ләкин бөгөн берәүҙәр балаларына исем урынына ҡушамат тағалар кеүек.

Тағы ла бер күренешкә иғтибар итеү мөһим. Шәжәрә "ағас"тарында хәҙерге ят исемле "япраҡ"тар үҙҙәренең урынһыҙ булыуҙары менән, шыршылағы пластмасса уйынсыҡтар кеүек, айырылып торалар, ләкин һаһалма һәм төкөрөк менән генә йәбештерелгән кеүек булыуҙарына күрә, ваҡыт үтеү менән һулып бөтөүгә дусар ителгәндәр. Ошондай һаҡһыҙлыҡ һәм вайымһыҙлыҡ арҡаһында күпме тоҡом "ағас"ы ҡороно икән? Бер кем дә әйтә алмаҫ, сөнки уларҙың тоҡомо ла юҡ, ҡыҙыҡһыныусылары ла юҡ. Тоҡом ҡаны аша берләшкән япраҡтар ғына шәжәрә ағасын үҫтереүгә һәләтле һәм уларҙан яңы ботаҡтар бөрөләнә... Исемдәрен юғалтҡан халыҡ тыуған телендә лә һөйләшмәһә, милләт юҡ, тигән һүҙ.

## Хоҙай үҙе милләт итеп яралтҡан

Донъяла, тарихта, йәшәйештә үҙ миссияһы, үҙ тәғәйене булмаһа, Бөйөк Аң әҙәмдәрҙе бер төрлө орлоҡтан яралтып, төрлө милләттәргә бүлмәҫ ине. Тәбиғәттә бер нәмә лә бушҡа ғына һәм мәғәнәһеҙ ҡоролмай. Ағастарҙың, үләндәрҙең орлоҡтарынан үҙ мөхиттәрендә тик үҙ төрөндәге үҫентеләр үҫеп сыға, сөнки тәбиғәттә уларҙың һәр береһенең үҙ тәғәйенләнеше бар. Әлбиттә, үҫентене ят ерҙә лә яһалма шарттар тыуҙырып үҫтереп була, ләкин ул үҙенә генә хас үҙенсәнлеген тәбиғи дауам итә алмай. Әҙәм балаһы ғына бер камил йән булып тыуа ла, үҫеү, йәшәү дәүерендә яһалма рәүештә үҙенең ысынбарлығын юғалта. Сөнки тыумыштан ят исем ҡушып, ят телдә һөйләштереп, ят мөхиткә яраҡлаштырып, уны үҙенсәлегенән яҙҙырып, үҙ асылында үҫергә мөмкинлек тә, ирек тә бирмәйҙәр. Бала кем булып тыуыуын да, кем булып йәшәргә тейешлеген дә белмәй яфалана. Үҙенең милләтен танымаған йә белмәгән кеше йәшәйештә ниндәй ғөрөф-ғәҙәттәрҙе үҙләштерергә, ниндәй рухи ҡануниәткә таянырға, ниндәй йолаларҙы тоторға тейеш? Бер ниндәй ҙә таянысһыҙ, рухиәтенән, милли мәҙәниәтенән айырылған кешенең күңеле ярлы, яҙмышы аяныслы булалыр...

"Теле ярлыланған халыҡтың рухиәте менән бер рәттән, йәшәү даирәһе лә ҡыҫырыҡлана", тип әйткән аҡыл эйәһе М.В. Ломоносов. Бөгөн ер йөҙөндә күпселек милләттәрҙең ерле халыҡ араһында диаспора булып йәшәүе беҙгә мәғлүм. Улар ҙа ваҡытында иң тәүҙә исемдәрен, шунан телдәрен, һунынан илдәрен дә юғалтҡандарҙыр. Тел юғалһа, ил тарҡала, ил булмаһа, халыҡ та юҡ, быға бәхәсһеҙ дәлилдәр, тарихи миҫалдар бихисап. Бөгөнгө көндә 6 меңдән ашыу телдә һөйләшкән 5 меңдән ашыу милләттең 380-һенең генә һаны 1 миллиондан күберәк. Йыл һайын тиҫтәләгән телдәр юҡҡа сыға, милләттәр һаны кәмей. Донъяла башҡорттар 1 миллион ярымдан күберәк, ләкин үҙ телендә һөйләшә, яҙа белгәндәре ярты миллиондан да әҙ булыу сәбәпле, ЮНЕСКО һәм БМО тарафынан башҡорт теле юғалыуға дусар телдәр иҫәбенә теркәлгән. Үкенесле, әммә факт! Кешеләр, ваҡытлыса замана алдаҡтыҫтары артынан ҡыуып, яңылышыуҙарын күрмәмешкә, белмәмешкә һалыша, ә ваҡыт үҙенекен эшләй, һәм ул аяуһыҙ...

## Асылың барыбер һағындыра…

Ҡыҙыҡ, милләте менән таныштырыу хәжәте тыуһа, үҙенең йөҙөн, үҙенсәлеген күрһәтеү өсөн бөтә халыҡтар ҙа милли кейемдәрен кейәләр, аш-һыуҙарын әҙерләйҙәр, халыҡ йырҙарын йырлайҙар, боронғо йәшәү рәүешен сағылдыралар. Тимәк, һәр халыҡ фәҡәт шул үҙ асылында өмөтлө һәм бәхетле йәшәгән дәүерҙе һағынып иҫкә ала, тигән һығымтаға килергә була. Алама осорҙо кем һағынып иҫкә алһын? Хәҙерге, теле, исеме, мәҙәниәте уртаҡлаштырылып, бер кәртәгә ҡыуылған быуынды, йәшәү рәүеше бер ҡалыпҡа һалынған йөҙһөҙ дәүерҙе киләсәк быуын нисек тәҫмөрләр икән? Әлбиттә, замандың һаһалма "кағыҙә"ләрен инҡар итеп, үҙ юлдарында үҙенсәнлеген һаҡлап, үҙҙәренең кем икәнен иҫтәрендә тотоп йәшәгән халыҡтар бар: японлар, ҡытайҙар, һиндтәр, ҡайһы бер ғәрәп халҡы һәм цивилизация менән аралашмаған ҡәбиләләр... "Берәү тоғро юлдан барһа, үҙе өсөн бара, берәү аҙаһа, үҙенә зарарға аҙаша, һис бер йөк күтәреүсе икенсенең йөгөн күтәрмәҫ" (Әл-Исра", 15-се аят)

Йәшәү мәғәнәһе ваҡытлыса һәм һаһалма алдаҡтыҫтарҙа түгел, ә донъяның рухи ҡиммәттәрен үҙләштереп, үҙенсәнлегенде һаҡлауҙа икәнен иҫебеҙҙә тотһаҡ ине...

*Ерҙән Ҡуҡҡа юл һалһам да,*
*Тел булмаһа, ни файҙа?*
*Тере телле гөл булһам да,*
*Ишетерҙәр бит Айҙа!*
*Тауҙарҙан бейек булһам да,*
*Телһеҙҙе ҙур итмәҫтәр.*
*Тере телле сүп булһам да,*
*Тапап үтеп китмәҫтәр.*
*Борон башҡорттарҙың телен*
*Бысаҡ менән киҫкәндәр.*
*Буйһонмаһа, маңлайына*
*Оло тамға өткәндәр.*
*Бөгөн баҫалҡының телен*
*Ҡағыҙ менән "киҫәләр".*
*Шуға башҡорт балаһына*
*Яһалма тел үҫәләр…*

Урал МОСТАФИН,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге ағзаһы

✓ *Суфыйсылыҡта, бигерәк тә унның ҡамлау алымдарына, йәмғиәттең булыуы мотлаҡ. Ҡамлау кешеләргә үҙендә ышаныс көсөн тыуҙырыу өсөн кәрәк. Тиккә генә кешеләр һәм йәмғиәт Зәйнулла ишанға тартылмаған.*



АРҘАҠЛЫЛАРЫБЫҘ

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ РУХИ ШАҺЫ...

## Зәйнулла ишан тураһында бер кәлимә

Суфыйсылыҡты Уралға Зәйнулла ишандың оло ҡарт аталары Тупый, Ураҙғәли, Яныш, Ятабей, Манғут, Һеркә Урта Азия яҡтарынан карауансылар аша Ефәк юлы менән килтергән булһа кәрәк. Сөнки уларҙан байтаҡҡа һуңыраҡ тыуған Аҙнасура ишан, Уау Мөхәммәт Вәхит уны ентекле белмәҫ ине. Күрәһең, ул ерле халыҡ араһында электән ярайһы уҡ киң таралған була. Әммә суфыйсылыҡ киң йәмәғәтселеккә бик күптәнән таныш булһа ла, беҙгә, хәҙерге кешеләргә, Зәйнулла ишандың тормошон өйрәнгәндә тағы ла нығыраҡ асыла бара.

Суфыйсылыҡтың сабырлыҡҡа, түҙемлелеккә өндәгән вәғәздәре ҡәтғи холоҡло яу кешеләрен, мәҫәлән, башбирмәҫ башҡортто кәрәкле урында күп ҡырылыуҙан да һаҡлаған. Рух тойғоһо тәғлимәте зиһене менән эске ауаздашлыҡ табып, теләгенә ярашлы хис уятҡан. Суфыйсылыҡҡа шаманлыҡ ҡамлау ҙа хас. Традицион Исламда Ҡөрьән Кәримде үҙ алдына ғына, йәки өндәшмәй генә уҡыу - төп алым. Мәҫәлән, көндәлек башҡарылған биш намаҙ. Намаҙ уҡыған кеше ҡиблаға ҡарап тороп, алдына намаҙлыҡ йәйеп, сүрә аяттарын ҡысҡырмай ғына үҙ алдына эстән һөйләй. Ул яңғыҙы. Намаҙ уҡыған кешенең алдында башҡа кеше торорға ла тейеш түгел. Мулланың вәғәз һөйләүе ҙур дини байрамдарҙа, аят мәжлестәрендә тыңлана. Дөйөм алғанда, намаҙ уҡыу - үҙ алдыңа ғына Аллаһы Тәғәләгә инаныу. Унда йәмғиәт талап ителмәй.

Суфыйсылыҡта, бигерәк тә унның ҡамлау алымдарына, йәмғиәттең булыуы мотлаҡ. Ҡамлау кешеләргә үҙендә ышаныс көсөн тыуҙырыу өсөн кәрәк. Тиккә генә кешеләр һәм йәмғиәт Зәйнулла ишанға тартылмаған. Уның мөриттәре үҙҙәрен иркен һәм азат тойған.

Традицион, ғәҙәти Ислам әһелдәре Зәйнулла ишанды аңламаған. Уны һәр төрлө мөртәтлек, сихыр, сифатһыҙ ҡамлау алымдары ҡулланып, халыҡты батшаға ҡаршы ҡоторта, тип, төрмәгә, ә унан һөргөнгә ебәреүгә өлгәшәләр. Уларҙың был ялыуҙары империализм һәм шовинизм дегетенә ҡойонған батша ялсылары өсөн бик тә уңай сәбәп була.

Суфый тәриҡәтенең төп сифаты, үрҙә әйткәнемсә, шәхси кисерештәрҙе йыйып үткәреү. Кисерештең эсенә инеү. Һүҙ, тойғо кеше балаһын хәрәкәткә килтерә. Кисереш үҙенән-үҙе хәрәкәт талап итә. Ә хәрәкәт - кеше тәбиғәтенә ярашлы. Юҡҡа ғына халыҡ "Хәрәкәттә - бә-



рәкәт" тимәйҙәр. Суфыйсылыҡ түҙемлек, сабырлыҡ, йыуашлыҡ менән бер ҡатарҙан, кешене кешелекле, тоғро һәм дөрөҫ, таҙа күңелле булырға өйрәтә. Ул һәр ваҡыт кире яҡты тәнҡитләй. Уға фани тормошҡа ҡәнәғәт булыу хас, әммә уға баһа биреүҙе өнәмәй. Кешеләргә рәхәтлек тыуҙырыуға, йылы мөнәсәбәт ҡылыуға баһа биреүҙе хуп күрә.

Шулай ҙа суфыйсылыҡты Ислам тәғлимәте фәйләсуфтары тыуҙырған һәм ул, нигеҙҙә, дүрт йүнәлештә - Нәҡшбәндиә, Хәлидиә, Нәсәвиә һәм Ҡәҙриә исемле йүнәлештә һәр береһе үҙ аллы юл алған. Һәр береһен дини мәғрифәтселектә генә түгел, донъяуи алымдар һәм үҙ тәғлимәте өлкәһендә остаз булырлыҡ шәхестәр етәкләгән. Әммә тәбиғәт, тереклек донъяһын бер төрлө итеп яратмаған кеүек, унның остаздарының да, уларға эйәргән йәмғиәттең дә рухи кимәле, тормош, йәшәү шарттары төрлөсә. Бәхәстәр ҙә, тәкә булып төкөшеүҙәр ҙә әҙ булмай. Остазға эйәреп, йәмғиәттәре лә үҙ-ара айпалышып, гонаһҡа керә. Әммә уларға дөйөм һыҙат - мәғрифәтселек һәм мәҙәниәттәренең дөйөм һыҙаттары хас. Йәмғиәт үҫешенең артта ҡалыуы менән килешмәүсәнлек, кеше зиһененең камиллығы, сикһеҙлеге, әхлаҡ алымдарын йылдам үҫтереү, төрлө сифатта рухи һәм фани азатлыҡ эҙләү - суфыйҙарҙың эске ҡануны ғына түгел, ә булмышы. Сөнки дөйөм Ислам ҡануниәтенә генә эйәреп, азатлыҡ һәм Аллаһы Тәғәлә менән берҙәмлек эҙләһәләр, улар рухы, улар һыны, булмыштары ла яһалма булыр ине.

Тәриҡәттәгеләр шәхси хужалыҡты ойоштороу алымында ла азатлыҡты өҫтөн күргәндәр. Матди байлыҡты, ҡулланыу әйберҙәрен, аҙыҡ-түлекте үҙҙәре етештереүгә, дөйөм хеҙмәт, дөйөм хужалыҡҡа төп урын биреү ҡаралған. Быны Зәйнулла ишандың хужалығы, дөрөҫөрәге, Рәсүлиә мәҙрәсәһе хужалығы миҫалында асыҡ күрергә була. Әгәр ҙә Рәсүлиә мәҙрәсәһендә дөйөм хужалыҡ алымы ҡулланылмаһа, унның бинаһын, ике йөҙҙән артыҡ шәкертте, егермеләгән хәлфәне, ғаиләләрен, уҡыу, уҡытыу әсбаптары һатып алыу, ойоштороу эштәрен хәйер-саҙаҡа килеменә генә аҫрап, ғәмәлгә ашырып булмаҫ ине. Беҙ быны хәҙерге заман кешеләренең хәтирәләренә лә таянып, Зәйнулла ишанға тасауыф ғилемен, Нәҡшбәндиә тәриҡәтен өҫтәмә өйрәтеүсе остаҙы, Сарҙаҡлы ауылының шәйехе Ғәбделхәлим хәҙрәт тураһында һөйләнгәндәрҙән дә беләбеҙ. Ул да мәҙрәсә тотҡан, унның да мәҙрәсәһенең төп нигеҙе булып тәриҡәт ғилеме, шулай уҡ дөйөм хужалыҡ алымы торған.

Суфыйсылыҡта, дөйөм хеҙмәттән тыш, тормош һабаҡтарын өйрәтеү ҡомары, өгөт-нәсихәт йоғонтоһо көслө була. Һәм был алымдар Зәйнулла ишандың вәғәздәренә бер юлы хатта меңәрләгән кешеләрҙе йәлеп иткән. Башҡорт илендә колонизация сәйәсәте көсәйеүе халыҡ күңеленә азатлыҡ орлоғон әленән-әле һала тора. Азатлыҡ фекере киңерәк тамыр йәйһен өсөн дини, фәлсәфәүи йәки тормош ҡануниәтенән башҡа, фәнни белем дә талап ителә. Үҙ халҡындың тарихыңынан тыш, тәбиғәттең үҫеш ҡанундарын, ер хәритәһен өйрәнеү, есемдәрҙең сифатын һәм төҙөлөшөн белеү кәрәклеге зарур була. Уны ғилемгә ынтылыусы шәкерттәрҙең дә рухиәте талап итә. Шуға ла Зәйнулла Рәсүлев мәҙрәсәлә төп ислам тәғлимәте, унның сатамаҡайы булған суфыйсылыҡ тәриҡәтенән тыш, йәҙитсә уҡыу, фән нигеҙҙәрен уҡытыуҙы ла индерә. Был эштә уға Ҡаһирәлә Әл-Әзһәр университетын тамамлап ҡайтҡан улы, буласаҡ Башҡортостан мөфтөйө Абдрахман ныҡ ярҙам итә. Маҡсаты фәнни йәҙитселек, дөйөм ғилемдән тыш, мосолман төрки халыҡтарының тәбиғи тормошсанлығын, рухын үҫтереү бурысы була. Шәйех Зәйнулла бин Хәбибулла Нәҡшбәнди тәрән рухи әхлаҡле кеше булараҡ, "ғүмер осоро мосолманын" эҙләгән. Йәштәр күңеленә азатлыҡ, ғилем орлоҡтары һалған.

Башҡорттар борон-борондан, үҙҙәре милләт булып ойошҡанға тиклем үк, меңәр йыллыҡ төпкөлөндә тәбиғәт менән рухи туғанлыҡты тойоп йәшәгән. Зәйнулла ишан да, башҡа башҡорттар кеүек үк, тәбиғәт балаһы була. Боронғо төркиҙәр кеүек, өс таған таймаҫ, хәҡиҡәтенә ышанып йәшәй. Улар, боронғо төркиҙәр, Аллаһы Тәғәлә ҡолдарына юл өйрәтеү өсөн күҙгә күренмәй торған бәләкәй бәйғәмбәрҙәрен өс мөһабәт тау аша ергә төшөрөр булған, тип иҫәпләгәндәр. Ул бәйғәмбәрҙәр кешеләрҙең фани донъяла ҡулланылырға тейешле бөтә хазиналарын да һаҡлаусы һәм яҡлаусы булып күңелдәрендә һынланған. Төркиҙәрҙең күңел хазинаһын дөйөмләштереүсе ул тауҙар өсәү: Тәнйәндә - Ҡайлас, Алтайҙа - Тәңрехан, Уралда - Ирәмәл.

Зәйнулла ишан үҙ тыуған ауылынан 40-45 саҡырым ерҙә ятҡан Ирәмәл һәм унның армыттары менән рухи бәйләнештә йәшәгән. Тауҙарға сәфәргә сығыр алдынан, тау эйәһенә арнап, ҡорбан салдырған. Әммә унның тәғәйенләнешен бар ғәләмгә фаш итмәгән. Шулар тураһындап хәтерләп һөйләр ине Әүеш, Әүлиә тауы буйындағы Иҫке Байрамғол ауылында йәшәп, күптән инде баҡыйлыҡҡа күскән, атайымдың бер туған оло апаһы Сабира әбейем Сәйфетдинова-Ильясова. Ғөмүмән, Зәйнулла ишандың тауҙар менән бәйләнеше үҙе бер тарих, үҙе бер сер... Тура килһә, ул турала ла, бәлки, киләсәктә бәйән итербеҙ.

Зәйнулла ишан бигерәк тә яҙ миҙгелен һағынып көткән. Ер-һыу кибеп, япраҡ йәбешкәкләүенән туҡтағас, килгән кешеләрҙән ул: "Уй шырлығында, ҡарағас түбә арҡаһындағы сауҡалыҡта кәкүк саҡырамы?" - тип һораған. "Саҡыра", тиһәләр, "Әләйһә, иртәнән һуңға иртәнге намаҙҙан һуң аттарҙы егегеҙ, ала юрғаны эйәрләп бәйгә алығыҙ", тип бойорған.

Ғөмүмән, суфыйсылыҡ тәриҡәте һәр кемгә еңел бирелмәгән. Ни тиһәң дә, уға айырым бер һәләттең юлдаш булыуы шарттыр. Һәр кем уға өлгәшә лә алмаған. Шуғалыр ҙа, бәлки, күп рух һәм хеҙмәт талап иткән тәриҡәтте үҙ итеүсе лә күп үк булмай. Халыҡтағы "Соҡоп ҡарға булмаҫһың, уҡып, суфый булмаҫһың", тигән мәҡәлде ул өлкәләге өмөтһөҙ шәкерттәргә әйтер булғандарҙыр, тип уйланыла. Йәнәһе, тәғлимәтте камил итеп өйрәнә алмаҫһың, уны үтәүсе генә булһаң да сауап алырһың. Суфыйҙар -эскерһеҙҙәр. Үҙ рухына мөкиббән инанып йәшәүселәр. Улар Исламдың рухи үҙәгендә тороусылар. Аҡыл менән зиһен бер түгел, зиһен төптәрәк ятһа ла, аҡылдың өҫтөндә ултыра, тип өйрәткән ишан. Һәм, ысынлап та, аҡыл зиһенден бер өлөшө кеүек. Аҡыл анды тыуҙырыусы. Һәр кешене тәбиғи аҡылы үҙ юлынан алып йөрөтә. Аҡылға мохтажыраҡ булһаң, зиһен тауы үҙенә мендермәй. Шыуаһың да кире төшәһең.

**Спартак ИЛЬЯСОВ.**
**(Дауамы. Башы 29-сы һанда).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттарҙа ҡош аулауға ҙур иғтибар бирелгән. Бигерәк тә документтарҙа ҡыр өйрәктәрен һәм ҡыр ҡаҙҙарын махсус тотоу урындары булғанлығы теркәлгән. Йылғаға ҡуйылған ау ярҙамында һыу ҡоштарын аулау яҙғыһын башланған. Бының өсөн махсус ярынты һалыу кәрәк булған. Ау ҡоролмаһы ике урман күле араһында йәки күлдең йылға менән тоташҡан урынында, ҡоштарҙың яратҡан төйәгендә урынлаштырылған. Ҡулайламаны ҡуйыр алдынан һунарсы ҡоштарҙың бер күлдән икенсеһенә күсеү юлын өйрәнгән. Ау ҡыҫҡа булған һәм һыу сығанағының береһенә яҡын булған "алғы торба" һәм оҙон, урман эсенә инеп киткән "артҡы торба"нан торған. Унның киңлеге 16-20 метр тәшкил иткән, оҙонлоғо, топографик шарттарға бәйле, төрлө оҙонлоҡта булған (һүрәт).



Ау ҡороу өсөн ағастарҙы ҡырҡҡас, урынды ҡыуаҡлыҡтарҙан, лапынан таҙартҡандар һәм был майҙан быуындан-быуынға ҡош аулау урыны булараҡ тапшырыла барған. Урман ҡырҡылғас, ҡоштар бер сығанаҡтан икенсеһенә барыу өсөн урман өҫтөнән түгел, ә түбәндән осҡан һәм һунарсының ауына барып эләккән. Ау ваҡ ҡына (4-5 сантиметрлы) ячейкаларҙан торған. Дөйөм ҙурлығы 14х19 метр булған. Ул оҙон ҡаҙыҡтар ярҙамында тарттырып ҡуйылған (һүрәт). Һунарсы эңер ваҡытында махсус урынға урынлашҡан һәм ҡоштар ауға килеп еткәс кенә уны тартып төшөргән. Был шөғөл бик килемле тип һаналған. Күҙәтеүҙәргә ярашлы, яҙғыһын шундай ысул менән 100-200 өйрәк тотҡандар.

Ҡайһы бер урындарҙа башҡорттар ау һәм сатыр ярҙамында сел, ҡор, һирәк кенә булһа ла ҡаҙҙарҙы һәм өйрәктәрҙе аулаған. Билдәле булыуынса, уҡтан бары тик һыу өҫтөндә булған ҡоштарға ғына атҡандар.

Ҡорға һунарға башҡорттар һыбай йөрөгән һәм ҡарасҡы файҙаланған. Был ысул ҡара көҙҙә, ҡорҙар бер урынға тупланғас, башҡарылған. Күҙгә ташланып торған урындағы ҙур ағасҡа бер нисә ҡор ҡарасҡыһы урынлаштырылған, ә ағас аҫтында һунарсы ултырған. Бер йәки ике һунарсы һыбай килеш ағастарҙа ултырған ҡоштарҙы ҡарасҡы ултырған ағасҡа ҡыуалаған. Бындай һунар ҡышын ҡар ятҡас та башҡарылған. Был осраҡта аттар махсус ҡор санаһына егелгән (һүрәт). Санала үтеп барыусы һунарсыны ҡоштар үҙҙәренә яҡынлатҡан, ә һунарсы махсус ҡор ағасына ҡорал ҡуйып, ҡоштарға атҡан.



**(Дауамы бар).**

*✓ Малайҙарға ир өлгөһө юҡ, улар һәр саҡта ла ҡатын-ҡыҙҙар ҡушҡанға буйһоноп, уларға яраҡлашып үҫә. Шунан һуң беҙ аптырайбыҙ: ниңә малайҙарыбыҙ ҡыйыуһыҙ, хатта ҡурҡаҡ, әүҙемлектәре тойолмай, лидер була алмайҙар, тип.*

# ИР ЯҠШЫҺЫ -

## йәки Ир-егетлек

**АРЫҪЛАНОВ Рәжәп Миҙхәт улы - МХО ветераны, Ауырғазы районының Нуғаҙаҡ ауылында тыуып үҫкән уҙаман. Урман хужалығы техникумында һәм Башҡорт дәүләт аграр университетында урмансылыҡ эше буйынса белем ала. Хәрби хеҙмәттәре өсөн 16 миҙал, шул иҫәптән Жуков миҙалы менән бүләкләнгән.**

**Хөрмәтле Рәжәп Миҙхәт улы! "Киске Өфө" гәзите редакцияһы һеҙгә лә, уҡыусыларыбыҙға ла ҡыҙыҡлы булған бер тема буйынса әңгәмәләшеп алырға тәҡдим итә. Ул да булһа - йәмғиәтебеҙҙәге ир-ат заты мәсьәләһе. Боронғо ир-егеттәр ниндәйерәк булған да бөгөнгөләре нисек булырға тейеш. Башта әңгәмәбеҙҙең төп темаһынан бер аҙ ситкәрәк китеп, үҙенсәлекле, хатта сетерекле бер һорауҙы асыҡлап китәйек әле. Кешелекте уның иң боронғо, тәү замандарынан бирле ир-аттарҙан һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Ир заттарының ҡатындар менән ҡауышыуынан, бергәләшеп ғаилә ҡороуынан, тормош көтөүенән башлана кешелек. Был - тәбиғәт ҡануны, шулай булмаһа, әлеге фани донъябыҙ ҙа булмаҫ ине. Бөгөн һүҙ көслө заттар - ир-аттарға арналасаҡ, сөнки ҡатын-ҡыҙҙар проблемалары - бөтөнләйгә икенсе мәсьәлә. Һеҙ, Рәжәп Миҙхәт улы, рәссам булһағыҙ, тәү бабабыҙ Әҙәмде нисегерәк һүрәтләр инегеҙ?**

- Минеңсә, ул шул архаик замандарҙа тәбиғәт ҡосағында йәшәй алырлыҡ итеп яратылғандыр: көслө, киң яурынлы, ҡабарып торған мускуллы, баһадир кәүҙәле - буйы 2 метрға тиклем булған, ҡурҡыу белмәҫ батыр итеп күҙаллайым мин уны. Ҡыҫҡаса әйткәндә, Әҙәм тәү бабабыҙҙы ых та итмәй донъя көтөрлөк "мужик" ҡиәфәтендә һүрәтләр инем.

**Дини тәғлимәткә ярашлы, Әҙәм ер туҙанынан (Библияла: "из праха земного"), йә иһә балсыҡ һәм һаҫыҡ һыу ҡатнашмаһынан (Ҡөрьән-Кәримдә) яратылған, уға йән өрөлгән. Тимәк, тәү кешенең тәне ерҙәге химик элементтарҙан һәм биохимик шыйыҡсанан хасил ителгән. Йыһандағы бар нәмәне булдырыусы Аллаһы Тәғәләгә (русса: Всевышний, Господь, Бог) үҙе яралтҡан ижад емеше - тәү Әҙәм - бик нык оҡшаған һәм ул нурҙан ғына яратылған фәрештәләренә лә Әҙәмде хөрмәт итергә бойорған. Шулай уҡ ул иңы, һоҡланғыс йән эйәһенә иптәшкә тәүге ҡатын-ҡыҙ затын - Һауаны (йәһүдсә: Ева) Әҙәмдең ҡабырғаһынан яһап биргән. Донъя палеоантропологтарының, биологтарҙың, археологтарҙың яҙмаларына ярашлы, рәссамдар тәү кешеләрҙе приматтарға, йәғни маймылдарға оҡшата биреп төшөрә: бөтә тәнен йөн баҫҡан, оҙон ҡуллы, тар маңлайлы, алға табан бөкөрәйеберәк йөрөгән, ҡарарға ҡурҡыныс әҙәми зат һыны беҙгә шундай итеп күрһәтә килделәр. Йыһан Илаһы шундай иләмһеҙ итеп һүрәтләнгән Әҙәмгә нисек итеп һоҡланып баҡһын инде?**

- Әгәр Әҙәм тәү бабабыҙҙың тәне тотошлай йөн менән ҡапланған булһа, ул хайуани заттарҙан әллә ни айырылмаҫ ине. Аллаһы Тәғәлә уны Ер шарындағы айырым, яңы төр йән эйәһе рәүешендә хасил иткән, уның шул уҡ маймылдар менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы юҡ. Уйлауымса, әҙәми заттар, хайуандарҙан айырмалы, махсус рәүештә яланғас, шыма тәнле итеп хасил ителгән, шулай булмаһа, уларҙың кешеләргә генә - ир-атҡа һәм ҡатын-ҡыҙға хас булған нәфислеге, һөйкөмлөлөгө, матурлығы ла булмаҫ ине.

**Тимәк, тәү әҙәмиҙәр хәҙерге кешеләрҙән йөҙҙәре, һын-ҡиәфәттәре яғынан әллә ни айырылып тормағандыр, тип әйтеп буламы?**

- Күпмелер айырма булыуы мөмкин, сөнки ул дәүерҙәрҙән иң кәмендә бер нисә тиҫтә мең йыл ваҡыт үткән. Эволюция процестары кешене формалаштырған, тиҙәр бит. Төрлө эпохаларҙа кешенең тән торошонон, буй-һынының үҙгәрә биреүе мәғлүм. Унан һуң, боронғо кешеләргә ҡул көсө бик кәрәк булған: торлаҡ төҙөү, ейер ризығын табыу, һунарға йөрөү, ер һөрөү, йыртҡыстарҙан һаҡланыу һ.б. ҙур физик көс булыуын талап итә. Уйлап ҡараһаң, боронғолар кеүек көслө ир-ат хәҙер бик һирәк осрай. Хәҙерге егеттәр йәштән уҡ тик автомобилдә генә йөрөй, һәр ҡайҙа тиерлек техника ҡуллана, физкультура-спорт менән дә барыһы ла мауыҡмай: шулай булғас, замандаштарыбыҙ физик яҡтан элеккеләрҙән күпкә ҡайтышыраҡ. Шулай ҙа тәү кешеләр хәҙергеләренә оҡшаш булғанлығына ла ышанып була.

**Барыбер, эволюция тәғлимәтен бар яҡтан да дөрөҫ тип әйтеп булмайҙыр ул. Уға ярашлы, боронғо кешеләрҙең маңлайҙары шундай тар, уларҙың ҡаш дуғаһынан бик аҙға ғына күтәрелеп торған, тип иҫәпләнә.**

- Был фекер менән килешеп булмай. Маңлай яҫы булғас, мейенең алғы өлөшө лә бик бәләкәй була бит. Мейенең ҙурлығы уның эшмәкәрлеген билдәләй. Боронғоларҙың мейеһе хайуандарҙыҡынан айырылып тормаһа, прогресс та булмаҫ ине.

**Шуға өҫтәп, хәҙерге нейрофизиология фәне мейе күҙәнәктәренең дөйөм һаны тыумыштан уҡ бер төрлө ҡала килеүен, уларҙың яңылары барлыҡҡа килмәүен раҫлай. Яңы тыуған баланың нейрондары триллионға етә, уның мейеһенең масштабы күҙәнәктәрҙе тоташтырыусы аксон һәм дендриттар иҫәбенә генә арта бара.**

- Улай булғас, боронғо кешеләр мейеһенең хәҙергеләрҙекенән айырылмауы хаҡындағы фекерҙең хаҡ булыуына ла ышанып була. Беҙгә мәктәптә аңлы, зиһенле кешенең - Homo sapiens-тың маймылдарҙан барлыҡҡа килеүе хаҡында ла тылҡыйҙар ине. Шуға ышанһаң, ни эшләп хәҙерге маймылдар эволюция йоғонтоһона эләкмәгән, улар ун мең йыл әүәл ниндәй булған, хәҙер ҙә шундайҙар бит, тигән һорау тыуа.

**Әгәр серәкәйҙәр Ер шарында мезозой эраһының юра осоронда, йәғни бынан 200 млн йыл элек барлыҡҡа килһә, дөйөм алғанда, улар һаман шул көйө ҡала бирә. Әлбиттә, уларҙың төрҙәре күп. Әммә уларҙың йәшәүе, үрсеүе бер үк биологик ҡанундарға ярашлы бара. Мәҫәлән, ата енесле серәкәй йәнлектәр һәм кешеләрҙең ҡанын һура алмай. Шулай икән, Илаһтың, йәғни Абсолют Тәбиғи Рухтың барса тереклекте бар итә алыуына нисек ышанмайһың инде?**

- Эйе, алда әйткәнемсә, ир затына ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында йәшәй һәм үрсей алырлыҡ сифаттар баштан уҡ бирелгән. Боронғо риүәйәттәрҙә ҡасандыр дәү кәүҙәле, хатта ки гигант буйлы, үтә көслө кешеләр йәшәүе, уларҙың ғүмер оҙайлығының бер нисә йөҙ йылға етеүе хаҡында мәғлүмәттәр бар. Әлбиттә, быны уйлап сығарылған, мифологик ҡараш итеп тә ҡабул итергә була. Шулай ҙа, ата-бабаларыбыҙ әйткәнсә, әкиәт төбөндә хәҡиҡәт ятыуы ла бар бит.

**Белеүебеҙсә, һәр тере йән эйәһенең уға ғына хас ағзалары бар. Хайуандарҙың алғы һаны ла бар, тик ҡулдары юҡ. Маймылдарҙың алғы һандары - аяҡ та, "ҡул" да: улар ниндәйҙер предметтарҙы аҙмы-күпме тотоп, үҙҙәренә кәрәксә файҙалана белә. Әммә тик кеше ҡулы ғына күп функциялы итеп яралтылған. Быны боронғо ир затының ҡулы беҙҙекенән бер нисек тә айырылмайҙыр ул?**

- Ир кешенең, әгәр ҙә бар яҡтан теүәл, оригиналь, махсус уйлап сығарылғандай "яратылған" ҡулдары булмаһа, һәр төрлө эшкә - һунар итергә, эш ҡоралдары яһарға, ғаиләһен дошмандарынан һаҡларға, ҡырағай йәнлектәрҙе йөртлаштырырға - ауыр хеҙмәткә яраҡлы булмаҫ ине. Уның бармаҡтары ла бик гармониялы: улар ярҙамында төрлө ҙурлыҡтағы предметтар менән эш итергә була, ә усына йомарлана икән - шулай уҡ бик кәрәкле "ҡорал"ға - йоҙроҡҡа әүерелә. Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте киң - әҙәм балаларының ҡулдары менән йәнлектәрҙең алғы аяҡтары араһындағы айырма ер менән күк араһындағы кеүек, кешеләрсә йәшәй алыу шарты булған, кешене хеҙмәткә яраҡлы итеүсе ҡулдарҙың эволюция барышында үҙенән-үҙе ошондай ағзаға әйләнеүенә ышанырлыҡ түгел. Бына бер сағыштырыу: 1812 - 1814 йылдарҙағы Ватан һуғышы осоронда яугир башҡорттарҙы Европа рәссамдары үҙҙәренең картиналарында һүрәтләп ҡалдырған. Бынан 200 йыл әүәл йәшәгән башҡорттарҙың йөҙ-ҡиәфәте беҙҙекенән һис айырылмай. Мең йыл, йә иһә 4 мең йыл элегерәк көн иткән ата-бабаларыбыҙ ҙа беҙҙән әллә ни нык айырылып тормағандыр. Тимәк, иң боронғо дәүерҙәрҙә лә ирҙәр ир булып яратылған: улар көслө, ғәйрәтле, ҡурҡыу белмәүсән, ҡыйыу һәм һуғышсан, эш һәм һуғыш ҡоралдарын етештерә һәм ҡуллана белеүсе заттар булә.

**Генетик яҡтан ҡарағанда, ир кеше тәненең, барса ағзаларының төҙөлөшө, структураһы, үҙенсәлектәре һәм үҫеше XY тип аталған енес хромосомаһы менән билдәләнә, ҡатын-ҡыҙлыҡ хромосомаһы - XX. Әммә яңы тыуған сабый балалар - малаймы, ҡыҙмы - бер-береһенән бик аҙ айырыла. Малайҙарҙа ир-егет сифаттарының, ҡыҙ балаларҙа ҡатын-ҡыҙға ғына хас һыҙаттарҙың социаль мөхиттә формалашыуы - аксиома. Балаларҙы, үҫмерҙәрҙе тәрбиәләү системаһын һәр бер эпохаға хас йәмғиәт ҡанундары - йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр, йәшәйеш ҡағиҙәләре һәм талаптары билдәләй. Малайҙарҙы - ирҙәрсә, ҡыҙҙарҙы - ҡатын-ҡыҙҙарса тәрбиәләп үҫтереүҙән ситкә тайпылыуҙар булмай. Әммә XX быуат аҙағында психологтар, социологтар әүәлерәк йәшәйешебеҙгә хас булмаған бер проблема хаҡында яҙа башланы. Бәҡтиһән, ираттарҙың холҡонда тик ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас булған сифаттар арта бара икән. Әллә ир-егеттәребеҙ "ҡатынлаша" барамы икән?**

- Үҙемдең дә ошо турала уйланғаным бар. Әүәлерәк йәмғиәттә ғаилә ҡиммәттәре тигән төшөнсә бар ине. Ғаилә - йәмғиәт ячейкаһы, йәғни уның тәү күҙәнәге, тип мәктәп йылдарында уҡ өйрәттеләр беҙҙе. Уның ныҡлы нигеҙе булырға тейеш. Әлбиттә, ул ваҡыттарҙа ла төрлө ғаиләләр булды, ир менән ҡатын араһында аңлашмаусанлыҡтар, низағтар булыуы мөмкин. Әммә эш айырылышыуға барып етмәһен өсөн йәштәрҙе нисек булһа яраштырырға тырыштылар. Ғаилә булғас, балалар ҙа була, уларға атай ҙа, әсәй ҙә кәрәк. Советтар Союзы тарҡала башлағас, күп кенә ғаиләләр ауыр хәлдә ҡалды, уларға йәмғиәт, дәүләт иғтибары нык кәмене. Бер саҡ статистикала шундай һандар пәйҙә булды: илдә элегерәк теркәлгән һәр икенсе ғаилә тарҡала икән. Ир менән ҡатын айырылыша, балалар инәләре ҡарамағында ҡала. Атай тәрбиәһе юҡҡа сыға. Ә малайҙарға ир абруйы кәрәк: атай, ағай, йә булмаһа, ҡартатай. Әсә кеше, нисек кенә тырышһа лә, малайын ирҙәрсә тәрбиәләй алмаясаҡ. Бына нисек килеп сыға: өйҙә - әсәй, балалар баҡсаһында - тәрбиәсе апайҙар, мәктәптә - ҡатын-ҡыҙ уҡытыусылар. Хатта вуҙҙарҙа ла ҡатын-ҡыҙҙар күберәк бөгөн. Малайҙарға ир өлгөһө юҡ, улар һәр саҡта ла ҡатын-ҡыҙҙар ҡушҡанға буйһоноп, уларға яраҡлашып үҫә. Шунан һуң беҙ аптырайбыҙ: ниңә малайҙарыбыҙ ҡыйыуһыҙ, хатта ҡурҡаҡ, әүҙемлектәре тойолмай, класта, төркөмдә лидер була алмайҙар, тип.

**Унан һуң, тулы булмаған ғаиләләрҙә үҫмер малайҙар ирҙәр эшенә лә өйрәнә алмай бит инде...**

- Эйе, әммә ҡалала, тулы ғаиләлә үҫкән малайҙар ҙа йыш ҡына ирҙәр башҡара торған эшкә өйрәнмәй. Ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар эшенә бүленеш ауыл мөхитенә күберәк хас. Ҡала йәшәгән ғаиләлә тик ирҙәр генә башҡара торған эштәр юҡ тиерлек, әгәр фатирға ремонт талап ителмәһә. Ир кеше эшенән ҡайта ла, диванға ятып, телевизор ҡарай. Ҡатыны ашарға әҙерләй, өйөн йыйыштыра, һауыт-һабаһын йыуа һ.б. Шулай булғас, ғаиләлә үҫкән малай ирҙәр эшен күрмәй ҙә, өйрәнә лә алмай. Йәнә бына нимә мөһим. Хәҙерге ғаиләлә ҡатын кеше инициативаны үҙ ҡулында тота, өйҙә нимә эшләргә, нимә һатып алырға, ҡайҙа ял итергә барырға һ.б. Балалар атаһының эшен күрмәй, ә әсәләре уларға өлгө булып тора. Малайҙар һәр ҡайҙа ла әүҙем, инициативалы, яуаплы, башҡаларҙы яҡларға әҙер булып үҫһен тиһәк, атайҙар, ирҙәр тәрбиәһе кәрәк.

**Ирҙәренең "йүнһеҙерәк" булыуында, улдарының холҡо ҡыҙҙарҙыҡына оҡшашлығында ҡатындар үҙҙәре ғәйепле булып сыға түгелме?**

- Ғәйепле, тиһәң, артығыраҡ булыр. Әммә шулай ҙа була: ирҙәренән ҡәнәғәт булмаған ҡатындар уларға: "Будь настоящим мужиком!" - тиҙәр. Ә ирҙең нисек итеп ысын ир була алыуын улар ҡайҙан белһен? Минеңсә, улдарын ысын ир-егет итеп тик ир кеше генә тәрбиәләй ала.

**Шулай ҙа ҡатын-ҡыҙҙар ни өсөн хәләлдәренән ысын ир булыуҙы, үҙҙәрен ирҙәрсә дөрөҫ тотоуҙы талап итә? Быға ниндәйҙер бер ерлек барҙыр бит? Яуаплылыҡ, үҙ һүҙендә һүҙ итеү, башҡаларҙы үҙеңдең артыңдан эйәртә алыу, өҫтөнлөклө позиция биләү, баш булыу -**

***✓ Нәҫел-нәсәбен, шәжәрәһен, халҡының тарихын, уның батырҙарын белгән ир-егеттәрҙә ватансылыҡ тойғоһо көслө була. Ғаиләлә, мәктәптә тыуған еребеҙ, халҡыбыҙ менән бәйле төрлө саралар һәр даим уҙғарылып тороуы мөһим.***

# ИЛ ҠОТО, асылы хаҡында

**быҙдай сифаттар үҙенән-үҙе генә формалашмай ҙа баһа?**

- Беҙ әңгәмәбеҙ башында кешеләрҙе хайуандар менән сағыштырып ҡарап, фекер йөрөткәйнек. Бына парлы хайуандарҙы алып ҡарайыҡ. Мәҫәлән, бүреләрҙе. Ата бүре үҙ "ғаиләһе" хаҡында даими хәстәрлек күрә: ашатырға ризыҡ таба, инә бүрене һәм балаларын һаҡлай, үҫә биргәс, йәш бүреләрҙе һунар итергә өйрәтә. Шунһыҙ бүреләр үрсей алмаҫ ине. Ирҙәр ҙә ошондай ата бүреләр кеүек булырға тейеш: мал табыусы ла, ғаиләһен яҡлаусы-һаҡлаусы ла, балаларын эшкә өйрәтеүсе лә. Минеңсә, күпселек осраҡтарҙа ғаилә тормошонда ир кеше баш булырға, үҙенең иң яҡын кешеләре иҫән-һау, имен-аман йәшәһен өсөн төп яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алырға тейеш. Әлбиттә, ҡайһы бер эштәрҙә ҡатынындың һүҙен (сит-ят ҡатын-ҡыҙҙарҙың түгел инде) тоторға ла кәрәк, сөнки ул һине, балаларыңды ҡараусы, ашатыусы, ғаилә усағын һүндермәй йәшәтеүсе зат. Минеңсә, ғаиләлә малайҙар өсөн иң элгәре атай, ҡыҙҙар өсөн әсәй яуаплы, быҙдай бүленеш тәбиғи хәл. Бына, миҫал килтерәм. Улың абынып йығылып, тубығын һыҙыртып ҡайтып, илай икән, ти. Әсәһе ни эшләй? Улын йәлләй, йыуата, иркәләй башлай, ә малай тағы ла ныҡырыҡ мыжый. Ә атай кеше: "Кит инде, улым, һин ҙурһың бит инде, егет кеше шуға ғына илап тормай ул. Һин һалдат булырһың, ә һалдаттар бер ҡасан да иламай ул. Һин дә түҙ, батыр булырһың", - ти улына. Бында урыҫтарҙың бер әйтемен дә өҫтәп ҡуйырға була: "Терпи казак, атаманом будешь!" - тигәнде.

**Элек-электән малайҙарҙы үҙен егеттәрсә тота, күрһәтә белергә, башҡалар араһында, йәмғиәттә өҫтөнлөклө позиция биләргә, баш кеше - лидер булырға өйрәткәндәр...**

- 1917 йылғы революциянан һуң, Советтар Союзы осоронда ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар тигеҙ хоҡуҡлы, тип иғлан ителә. Ул саҡта шулай кәрәк булғандыр. Кем ғаиләлә баш кеше - бер кем дә баш була алмай, сөнки ир менән ҡатын тигеҙ хоҡуҡлы. Ул замандарҙан йөҙ йыл ваҡыт үтеп китте. Хәҙер, XXI быуатта, ғаиләлә кем беренсе, кем баш? Ҡатын-ҡыҙ, әлбиттә. Йәмғиәттә лә улар өҫтөнлөк итә. Бына урта мәктәпте генә алып ҡарайыҡ. Унда уҡыусыларҙан кем беренсе планда тора, кем өҫтөнлөк итә? Яҡшы уҡыусы, тәртипле, һис бер дисциплина боҙмай торған ҡыҙҙар. Ә малайҙарға ҡарата тыйыу, әрләү кеүек саралар йышыраҡ ҡулланыла. Ғөмүмән, малайҙар даими баҫым аҫтында тәрбиәләнә, сөнки улар һәр осраҡта ла ололарҙы тыңлап бармай, үҙ һүҙлерәк һәм шуғыраҡтар. Шунан улар нисек итеп инициативалы һәм әүҙем булып үҫһен инде? Йәнә, мәктәптә малайҙарға ла, ҡыҙҙарға ла бер үк тәрбиә алымдары ҡулланыла. Класс етәксеһе малайҙар өсөн айырым тәрбиә сараларын ҡулланып бармай, сөнки үҙе ҡатын-ҡыҙ затынан.

**Һис бер сер түгел: малайҙар бер-береһе менән ярышырға, өҫтөнөрәк булырға ярата, шуға күрә әләгешеп, көрәшеп, конфликтҡа инеп, хатта ки йоҙроҡ ҡулланып алырға әүәҫтәр. Уларҙы нисек ипкә килтерәләр?**

- Әлбиттә, уларҙың ошондай ҡылыҡтарын һәр даим тыйып, баҫтырып, тәрбиәүи "яза" сараларын ҡулланып эш итә педагогтар. Һөҙөмтәлә ошондай мөхиттә тәрбиәләнгән егет кеше ниндәйҙер бер көтөлмәгән ситуацияла ирлек көсөн ҡуллана алмаясаҡ, мәҫәлән, хулигандарҙың кемделер туҡмағанын күреү менән ситкәрәк ҡасып китеү яғын ҡараясаҡ. Шуға ла бит ир ҡорона еткәндәр араһында ла "әсәй малайы" булып ҡалыусылар күп. Ата-әсә ғаиләһендә - әсәһе, мәктәптә - уҡытыусыһы, үҙ ғаиләһендә ҡатыны ауыҙына ғына ҡарап, улар ҡушҡанды ғына үтәй торған ирҙәр ошондай мөхиттә хасил була.




***Махсус операцияла ҡатнашыусы ир-атты көслө рухлы шәхестәр тип атарға ныҡлы ерлек бар. Һуғышта бер-береңә ярҙам итеү, терәк булыу бик тә кәрәк. Киҫкен, хәтәр шарттарҙа һин бер иптәшеңде ҡотҡараһың икән, икенсе хеҙмәттәшең һине ҡотҡарасаҡ. Үтә хәүефле мәлдәрҙә бер кем дә ярҙамға килергә әҙер булмаһа, һуғышта тере ҡалыу мөмкин булмаҫ ине. "Ахмад" отрядына бер йәш кенә егет яңынан килде. Уға ни барыһы 19 йәш. Ул элегерәк БТР-ҙа барған саҡта ауыр яраланған, тән тиреһенең 60 проценты янған була. Әммә ул һауығыу менән иптәштәре янына кире килде. Бына ошо миҫал да ир-егеттәребеҙҙең рухы көслө булыуына дәлил.***

Совет осоронда егеттәр әрме хеҙмәтенә барырға ашҡынып торҙо. Хәҙер, киреһенсә - күп кенә егеттәребеҙ ошо бурысты үтәүҙән нисек итеп булһа ла ситтә ҡалырға тырыша...

Йәшерәк саҡта ҡыҙҙар менән нисек итеп танышып китеү мәлдәрен иҫкә алайым әле. Йыш ҡына улар һиңә бер һорау бирә: "Армияла булдыңмы?" Әрме хеҙмәтендә булмаһаң, һөйләшеп тә тормайҙар. Армия егетлекте талап итә, унда булмағандарҙы етлекмәгән, йә иһә сирле тип, өнәмәнеләр ул саҡтарҙа.

**Әрме хеҙмәте егеттәрҙән рух көсөн талап итә: унда ауырлыҡтар етерлек, шулар аша үтеп сыға алыу фарыз.**

- Беҙ ике йыл буйына әрме йөгөн тарта инек, хәҙер - бер генә йыл. Был бик аҙ, ысын һалдаттарса сыныҡыу алыр өсөн күберәк ваҡыт кәрәк. Армияға барғас, ирҙәр, егеттәр коллективына эләгәһең. Унда башҡалар менән нисек аралашырға, үҙеңде нисек тоторға өйрәнәһең. Был үҙе бер тормош мәктәбе ине йәш егеттәргә. Советтар Союзы тарҡалғас, армияның ҡәҙере бөттө, абруйы ла юҡҡа сыҡты, бының үҙ сәбәптәре бар. Шуға күрә армиянан ҡасып ҡалырға теләүселәр күбәйҙе, был әлегә тиклем бөтөп етмәгән. Унан һуң, әсәләрҙең, ҡатын-ҡыҙҙарҙың талабын үтәп, армияла "теплица шарттарын" булдырырға тырыштылар. Ҡайнағамдың улы армиянан ҡайтҡайны, уның әйтеүенсә, унда иҙән дә, кер ҙә йыумайҙар, ашханала ла дежур итеү юҡ хәҙер.

**Һеҙ, Рәжәп Миҙхәт улы, Совет Армияһында хеҙмәт итеүҙән башҡа, Махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан һалдат-ветеран. Ошо хаҡта ла һөйләп китһәгеҙ ине.**

- Эйе, миңә лә ошо хәтәр алыштарҙа ҡатнашырға тура килде. Чечендарҙың "Ахмад" исемле махсус тәғәйенләнешле отрядында хеҙмәт иттем, ике тапҡыр яраландым. Хәрби частың базаһы Грозныйҙа, шуға күрә мине хәрби табибтар комиссияһын үтер өсөн шунда ебәрҙеләр. Бер ай самаһы шунда ҡаралдым, табибтар хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙ булыуым тураһында һығымта бирҙе.

**Башҡорттарға борон-борондан яугирлыҡ, һуғышсанлыҡ, алыштарҙа үҙ-үҙен аямай ҡатнашыу, яраланыуҙан да, үлемдән дә ҡурҡмау хас булған. Һуғыш шарттарында арҡадашлыҡ, иптәшлек, бер-береңде ҡурсалау бик мөһим. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының 294-се полкында 3-сө эскадрон политругы булған кесе лейтенант Мирғәсим Ҡәйүмовтың тиңһеҙ батырлығы хаҡында күптәр белмәй. Ул, дошман һис көтмәгән бер мәлдә, алға ынтылып, яуҙаштарына үлем сәскән немец дзоты амбразураһын күкрәге менән ҡаплай. Башҡорт азаматының иҫ киткес батырлығы - яуҙаштары ғүмере хаҡына үҙен ҡорбан иткән көн -1942 йылдың 29 сентябре була. МХО-лағы һалдаттар ошондай сифаттарға эйәме?**

- Махсус операцияла ҡатнашыусы ир-атты көслө рухлы шәхестәр тип атарға ныҡлы ерлек бар. Һуғышта бер-береңә ярҙам итеү, терәк булыу бик тә кәрәк. Киҫкен, хәтәр шарттарҙа һин бер иптәшеңде ҡотҡараһың икән, икенсе хеҙмәттәшең һине ҡотҡарасаҡ. Үтә хәүефле мәлдәрҙә бер кем дә ярҙамға килергә әҙер булмаһа, һуғышта тере ҡалыу мөмкин булмаҫ ине. Һуғыш һуғыш инде, унда ниндәй генә хәлдәр булмай. Әйткәнемсә, "Ахмад" отрядында контракт ҡыҫҡа - 4 айлыҡ. Мин унда булғанда отрядҡа бер йәш кенә егет яңынан килде. Уға ни барыһы 19 йәш, торғаны бер малай инде. Ул элегерәк БТР-ҙа барған саҡта ауыр яраланған, тән тиреһенең 60 проценты янған була. Әммә ул һауығыу менән иптәштәре янына кире килде. Бына ошо миҫал да ир-егеттәребеҙҙең рухы көслө булыуына дәлил.

Отрядҡа килгән көндә унда мунса булғанға аптырағайным, мунсаһыһы ла бар ине. Һуғыш зонаһы бит, бында ниңә мунса кәрәк икән, тип тә уйлап ҡуйҙым. Шунан беҙҙе хәрби задание үтәргә алғы һыҙыҡҡа ебәрҙеләр, башҡа бер төркөм килеп алыштырғансы, байтаҡ ҡына ваҡыт урманда, окоптарҙа һәм блиндаждарҙа ятырға тура килә. Һыу - эсерлек кенә, ҡайҙа инде йыуыныу. Базаға кире ҡайтыуға беҙҙе эҫе итеп яғылған мунса көтә ине. Шунда ғына аңланым тәүҙә нисек яңылышҡанымды.

Һуғыш - хәтәр хеҙмәт, унда төрлө аяныслы хәлдәр ҙә була. Беҙҙе хәрби бәрелеш зонаһына 5-әр һалдаттан торған бәләкәй төркөмдәргә бүлеп индерәләр. Бер саҡ мине төркөм етәксеһе итеп ҡуйҙылар, хәрби заданиены үтәргә ике төркөм барҙы. Күп тә үтмәне, алда барған төркөмдөң бер һалдаты яраланды. Командир миңә ошо яраланған һалдат урынына үҙемдең төркөмөмдән 1 яугирҙы ебәрергә бойорҙо. 40 йәштәр самаһындағы яугирға алдағы төркөмдө ҡыуып етергә ҡуштым. Ул - Дағстандан. Ҡуҙғалыр алдынан был миңә: "Отец, зачем меня отправляешь, я хочу быть в твоей группе", - ти. "Отец" - минең позывной инде. Бер аҙҙан рация аша яңы бойороҡ алдыҡ, билдәләнгән урынға тиҙерәк барып етергә. Алдан киткән төркөмдәгеләр хаҡында "они все 200-е" тинеләр. Миңә эҫеле-һыуыҡлы булып китте, башымдан әлеге Дағстан кешеһе сыҡмай. Беҙ бара торған урынға яҡынлашыу менән рациянан "Откат!" тигән бойороҡ алдыҡ. Артҡа табан йүгерәбеҙ, ә бер нисә минуттан беҙ әле генә булған ерҙә кассеталы бомбалар шартлай башланы, унан беребеҙ ҙә тере сыға алмаҫ инек. Шунда яраландым, госпиталгә оҙаттылар. Теге үҙем ебәргән һалдаттың үлеме хаҡында уйлап, асырғанып йөрөйөм, үҙемде ғәйепле кеүек тоям. Ике көндән госпиталгә Дағстан яугирын алып килделәр: ул һәләк булмаған, яраланған ғына. Шунан ғына йөрәгем урынына ултырҙы, тыныслана бирҙем.

**Ир-егеттәребеҙҙә патриотизм, илгә, тыуған ергә һөйөү тәрбиәләү хәҙерге шарттарҙа өҫтөнлөклө маҡсат итеп ҡаралырға тейештер...**

- Эйе, нәҫел-нәсәбен, шәжәрәһен, халҡының тарихын, уның батырҙарын белгән ир-егеттәрҙә ватансылыҡ тойғоһо көслө була. Ғаиләлә, мәктәптә тыуған еребеҙ, тыуған илебеҙ, халҡыбыҙ менән бәйле төрлө саралар, аңлатыу эштәре һәр даим уҙғарылып тороуы мөһим. Мин үҙем дә мәктәптәрҙә, башҡа уҡыу йорттарында ойошторолған осрашыуҙарҙа ихлас ҡатнашам, әңгәмәбеҙҙә телгә алынған һорауҙарға асыҡлыҡ индерергә тырышам. Бигерәк тә дуҫлыҡ, берҙәмлек, коллективизм темаларына иғтибарҙы арттырырға кәрәк, тип уйлайым. Ир-егетлек тойғоһоноң, тормошоңда егетлек, ирлек талап ителгән сараларҙа ҡатнашыуҙың ни тиклем әһәмиәтле булыуын үҙем белгән, күргән-кисергәндәргә таянып аңлатам. Йәштәребеҙҙе беҙҙән ҡайтыш, тип әйтә алмайым. Улар - яңы заман, яңы технологиялар дәүере йәштәре, әммә ата-бабаларыбыҙ йәшәгән ваҡыттар тураһында ла мәғлүмәтле булһалар, Ватаныбыҙ ҡаһармандарының хәтеренә тап төшөрмәҫтәр тигән өмөттә ҡалайыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ир - Ер шарында ерҙән яралтылған зат. Уны тыуған ере, тыуған иле - Ватаны ир итә. Ирмен тигән ир - ғаиләһенең дә, иленең дә ҡото ул. Ватаныбыҙға яңы ҡот ҡайтарып йәшәргә яҙһын, хөрмәтле ир-аттар!**

*✔ Ләкин "ней" күптән Нәжми ҡырында ине инде. Бөттө баш, һуғышыр, үҙ туҡһанын туҡһан итергә тотонор инде хәҙер, тип хафаланды ағай кеше. Күрше хаҡын да уйлап тормаҫ. Тик...*



* * *

Һарайҙың нигеҙенең иҙмәһе кибеүен дә көтөп торманы, Нәжми шлаклы керамзит блоктар килтертте. Уныһы бигерәк ҡыҙыҡ нәмәстәкәй тағы. Кирбес һымаҡ дөбөр-шатыр бушатып ҡына китмәй шоферҙар, ә берәмләп, ҡатын-ҡыҙҙы наҙлағандай ғына, ҡул менән бушатырға кәрәк икән. Был сағында маңҡалары ла кипмәгән ике малайың менән (береһенә ун дүрт йәш, икенсеһенә - ун бер) ул эште атҡарып ҡара! Етмәһә, шофер ҡабаландыра.

- Йә-йә, миңә сәғәтләп түләйҙәр, клиенттар баштан ашҡан, - тип фәстереп ебәрә.

Ана шул саҡта Нәжми, урам буйлап йөрөп, мужиктарҙы йыйҙы. Әлбиттә, күршеһен дә ситтә ҡалдырманы, боронғолар юҡҡа ғына "күрше хаҡы - тәңре хаҡы" тимәгән бит.

Эшкә бик атлығып тормаһа ла, теләп барҙы Мотаһар күршеләренә. Тир түгеп алыуҙан да бигерәк, ҡыҙыҡһыныуы еңде: нисегерәк була икән был блок тигәндәре, ҡайҙан алған, ҡасан, нисек, ни хаҡҡа килтерәләр?..

Нисауа ғына икән ул, юҡҡа ошоноң менән төҙәмәйҙәрҙер: бик ауыр ҙа түгел, ҡалаҫ һымаҡ үҙе йылы ғына. Нәжми әйтеүенсә, ошо блоктан аҙбар төҙәһәң, малҡайҙар һөттө ҡышҡы һалҡындарҙа ла үләндең самай һутлы сағындағы һымаҡ бирә, имеш. Килтертеүе генә ҡиммәткәрәк төшә. Ни хәл итәһең, бензин хаҡы шулай булғас. Әлегерәк рәхәт ине ул: канистр тотоп, теләһә ҡайһы шофергә бар - бер "аҡ башҡа" тултыра ла бирә. Етмәһә, тағы берҙе өҫтәһәң, йәһәннәмгә лә барып, кирбес кенә түгел, батша һарайына тиклем төбө-тамыры менән ташырға риза булырҙар ине. Хәҙер ярты тураһында ауыҙыңды ғына асып ҡара, минең машина "полуторка" түгел, спиртҡа эшләмәй, тип кенә ебәрәсәктәр.

Мотаһар үҙенә кәрәгәнең бөтәһен дә белеп бөттө. Ләкин уны был шлаклы (тимәк, күмер, уның уйынса, ябай таш күмер көлө) блоктың ныҡлығы ҡыҙыҡһындырҙы. Ошо тынғылыҡ бирмәнеме, межаға килтереп һалынған аҙбарҙың хужаһынан үҙенсә үс алыу теләге көслөрәк инеме - шап бер блок ергә!

Ярылды...

Тынлыҡ. Башҡа ирҙәрҙең үҙ-ара көлөшә-көлөшә ниҙер һөйләнеүенән, "давай-давай" тип бер-береһен ҡабаландырыуынан тыш, әлбиттә. Тынлыҡ. Ике күрше араһындағы был тынлыҡ ниңәлер бушлыҡты хәтерләтте. Ҡараштар осрашты. "Яңылыш", - ти ине тәүгеһенеке. Әммә шул уҡ ваҡытта уның артында ҡәнәғәтлек тә йәшерелгәйне. "Сволочь!" тигән осҡон атылды хужа кешенең күҙҙәренән. Шундуҡ уныһы: "Ярар инде, бер блок өсөн..." - менән алышынды. Әллә ниндәй, аңлатып булмаҫлыҡ шомло тынлыҡ ине ул. Быны тик ике күрше генә тойҙо. Уныһы ла һауаны йәшен һыҙығы телеп үткән ваҡыттағы һымаҡ ҡына булды. Тик был мәл икеһе араһында оҙаҡҡа һуҙылғандай тойолдо.

- Һе-һе, аптырама, күрше, - тип йылмайҙы Нәжми. - Тәҙрә араһына ла китә ул, башҡа ергә лә. Мейес сығарғанда бит мейессегә ярты кирбес өлгөртөп булмай. Шуның һымаҡ инде ул һарай һалыу ҙа...

Рәхәт булып китте Мотаһарға. Әллә ике аралағы әлеге бушлыҡ бөтөнләй булманымы? Бер-береһенә телгеләгән ҡараштар осрашманымы?

Күршеһенең уңайһыҙланыбыраҡ торғанын күрепме, дәртләндерергә тырышыпмы, Нәжми алда әйткән һүҙҙәренә былай тип тә өҫтәне:

- Һәй, күрше, үҙең дә һарай һалырһың, шунда ярты-йорто блоктарҙың кәрәген күрерһең әле...

Дөббө-өрр... Ззы-ың... Йәшен һуҡтымы ни Мотаһарҙы - күршеһе ана нимәгә ишаралаайй... "Һин дә һарай төҙөрһөң әле, мин дә ярғыларын блоктарыңды", - ти бит ул... "Йооҡ! Блоктарҙы бушатҡанда Нәжмигә әйтергә кәрәкмәй, лутсы арғы ос Илфатҡа өндәшермен, бер ярты артығыраҡ китһә китһен, зато блоктар ярылмаҫ".

Был уйҙар ҙа бик тиҙ йөрөнө мейе һырҙары буйлап.

- Э-э, - тип һуҙҙы Мотаһар - шулай инде, ватыһы ла, ҡотоғо ла кәрәк.

"Вертлюга" тип йөрөтөлгән оҙон арбалы машина күҙҙән юғалғас, мәғәрисләп, буласаҡ һарайҙы йыуҙырҙы Нәжми. Хужа үҙе ҡунаҡтарын һыйлаһы, үҙе пландарын - ҡалай мал аҫраясағын, ҡош-ҡорт тотасағын асып һала, һыҙмаларын килтереп сығарып, бинаның эске өлөшө нисек булыры тураһында һөйләй. Бөтәһе лә - блок бушатырға килгән биш ир, шул иҫәптән Мотаһар ҙа - йөҙҙәренә бик етди ҡиәфәт сығарып, тыңлап ултырған, тел шартлатҡан, баш сайҡаған була. Ләкин Нәжмиҙә береһенең дә эше юҡ - һәр кемдә үҙ ҡайғыһы: берәүҙәр, был тиҙерәк ҡойһон да һыпыртыр инек, тип уйлаһа, икенселәре, ҡомһоҙ, тағы бер ярты сығарырмы икән, ти. Ә Мотаһарҙа башҡа ҡайғы: нисек тә арттырып ебәрергә ине был хыялый маҡтансыҡтан, тигән үсме, сәмме ҡалҡып сыҡты. Ошо уй күңелендә бөрөләнде лә, минут, юҡ, секунд һайын тынғылыҡ бирмәй башланы.

Рәлис УРАҘҒОЛОВ

# КҮРШЕ ХАҠЫ

Хикәйә



* * *

Был төндә лә йорт-ҡура эйәләре һүҙгә килешмәйенсә булдыра алманы.

- Һинең хужа аңламағас аңламай икән, ә? - тип "бөйөрө"-нә таянды Мотаһар йәшәгән өйҙөкө.

- Һинеке аңламай ул. Минең биләмә ошонда ине, - тип яуаплай Нәжметдиндәр яғыныҡы.

Һүҙ әйтештеләр ҙә, һәр ҡайһыһы үҙ биләмәһенең именлеген тикшерергә - һыйырҙарҙың быуаҙ ваҡыты яҡшы үтәме, көтөүҙә күп тығынып, ауырымайҙармы, кәзә-һарыҡҡа ҡош-ҡорт теймәгәнме, тауыҡтар теүәлме, өй эсендәгеләр тыныс йоҡлаймы, бик күп, бик күп инде уларҙың эштәре - йүгерҙеләр. Шулай төн эсендә әллә нисәмә әйләнергә тейеш улар. Шуныһы, яңы һарай нигеҙенә етеүҙәре була, юл бирешә алмай аҙаплаһалар. Ошонан китә лә инде үҙ-ара талаш, ошо шауҡым әҙәм балаларына ла күсә. Быны өй эйәләре бик яҡшы аңлай. Тик бына кешеләр генә...

* * *

Мотаһарҙың ҡустыһы ҡайтып төштө. Ҡалала йәшәй ул - бик фыртауай егет. Хәйер, егет ҡоронан күптән сыҡҡан инде үҙе: ағай тейешле Мотаһар ҡырҡ икеһен тултырһа, быныһы өс йәшкә кесерәк. Тик өйләнеп, ғаилә ҡорорға ғына форсаты теймәгән. Тәүҙә "өлгөрөрмөн әле" тиеберәк йөрөһә, һуңынан "был заманда" китте, ә аҙаҡ инде "кризис" башланды. Бөтә донъя көрсөгә булдымы был "кризис" тигәне, әллә үҙендә "кризис" барлыҡҡа килдеме - белмәҫһең. Хәйер, уныһы мөһим түгел.

Ана шул ҡустыһы, йылына ике-өс тапҡыр күренеп, аҙналар буйы ҡунаҡ булып китә торған. Китеүе лә күп осраҡта Мотаһарҙың тырышлығы менән була. Ҡыуып ебәрә тиһә, бик уҡ дөрөҫлөккә тура килмәҫ, ләкин "этәреп" ебәрә инде. Шулай итмәҫ ине, йорт тирәһендә берәй эштә ярҙамлашһа, эсмәһә, мыжыҡлығы теңкәгә теймәһә, бигерәк тә еңгәһе ҡырында сөсөләнә башламаһа. Ә Мотаһар ундай ҡылыҡты өнәмәй. Үҙ ҡатыны эргәһендә буталанған өсөн генә түгел, ғөмүмән, кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙҙың ирҙәр алдында ихахай-михахай ҡыланыштарын да, ир-егеттәрҙең кейәүҙәге ҡатын-ҡыҙ ҡырында юхаланыуын да.

Ҡустыһы ҡайтты ла...

- Ба-а, ағай, һин нимә, күршенән баҡсаңа терәтеп үк аҙбар һалдыртаһың? - тип Мотаһарҙың былай ҙа әрнегән яраһына тоҙ һалды. Һалып ҡына ҡалманы, яралағы тоҙҙо ышҡып-ышҡып ҡуйҙы. - Ҡуй, ул бина ярты баҡсаңа ҡояш нуры төшөрмәйәсәк бит!

- Күрше менән һүҙгә килешеп, талашып йөрөп булмай бит инде... - менән сикләнде ағай кеше. - Күрше хаҡы бар...

- Йо-оҡ, мин был эште былай ғына ҡалдырмайым. - Хәниф тамам ҡыҙҙы, ҡырлы стаканын өҫтәлгә дыңҡ иттереп ҡуйҙы, - нисек була инде, понимаешь, талашып йөрөп булмай? Һуң, ағай, шуны аңла, ул бит һинең частное владениеңа посягать иткән! Нәжми күрше хаҡын уйлап торғанмы?

Ҡайһылай анһат ситтән ҡарап ҡына фекер йөрөтөүе, тип уйланы хужа, уныһын ғына Мотаһар ҙа белә инде. Етмәһә, Нәжми бит был яҡ баҡсаға сыҡмаған. Ошо турала ул ҡустыһына ла әйтте.

- Инмәһә һуң, ә пожарный безопасность? - Хәниф, өйҙәгеләрҙе лә көтөп тормайынса, тағы берәүҙе ҡойоп ғорголдатты. - Һинең владениеңдан ике метр ситтә булырға тейеш һарайы!

Хәниф, үҙе завод тирәһендә слесарь ғына булһа ла, бик күпте белә, үҙенсә фекер йөрөтә. Дөрөҫмө ул, түгелме - барыбер уныҡы хаҡ килеп сыға. Шуға аптырай Мотаһар: мәктәптә "өслө"гә саҡ һөйрәлеп йөрөй ине, "дүртле"гә генә уҡыған ағаһынан барыһын да яҡшыраҡ белә. Донъя өйрәтә шул, сит-яттағы тормош мәктәбе, Мотаһарса әйтһәк, "зимагурлыҡ" көслө.

Әмәлгә ҡалғандай, әлеге нигеҙ ҡырында Нәжми булаша башланы: шлаклы блоктарҙы рәткә килтерәме, нигеҙ өҫтөнә ҡыҙыл кирбестән "нулевка" сығарырға уйлаймы - уныһы уның эше. Тик тәҙрәнән ҡарап тороусыларға ғына ул соксонған, йомран уртын тултырып өңөнә иген ташығандай, әллә нәмәләр ташыған һымаҡ күренде.

- Ба-а... Ана үҙе, собственный персоны, - тине лә Хәниф, әллә ни арала һалынғанын түңкәреп, закускаһын ҡабып, тышҡа атылды.

Мотаһар тик:

- Ней, ней, - тигән һүҙҙәр, әллә айырым ауаздар ғына сығарып ҡалды. Был уның ҡустыһын туҡтатырға, көтөбөрәк торорға, кәңәшләшеп, уртаҡ фекергә килергә саҡырыуы ине. - Не-ей!

Ләкин "ней" күптән Нәжми ҡырында ине инде. Бөттө баш, һуғышыр, үҙ туҡһанын туҡһан итергә тотонор инде хәҙер, тип хафаланды ағай кеше. Күрше хаҡын да уйлап тормаҫ.

Тик... Күтәрмәһенә сығып баҫҡан Мотаһар, ауыҙын асып, өнһөҙ ҡалды. Өйҙәре яғынан, шешә башына кейҙерелгән стаканын ҡыңғырау урынына зеңгерләтә-зеңгерләтә, тешһеҙ ауыҙын йырып, Нәжми сығып килә. Хәниф, ҡосағын йәйеп, күршеһенең буласаҡ һарай нигеҙен үлсәп йөрөй. Албырғап ҡалған ағаһын күреп:

- Ағай, кил әйҙә, мировой төҙөйбөҙ, - тине лә үҙе ҡабат нигеҙгә табан ҡоласын йәйҙе. - Күрше, шәп була бит был. "Нулевка"һын үҙем һалып бирермен.

- Хаҡын һөйлә һин уның, хаҡы-ын, - тип һуҙҙы Нәжми. - Мин әллә ҡайҙан оҫталар йыйғансы, бәлки, хаҡына килешһәк, стенаһын да өйөп алырбыҙ, ә?

- Нинә булмаҫҡа, була ул! Как раз отпускы башланып ҡына тора.

"Бына һинә "пожарный безопасность", "частное владение", - тип һуҙҙы эстән генә Мотаһар. - Етмәһә, быныһы ай буйы миндә ятыр инде..."

- Ағай, нишләп тораһың унда, әйҙә, кил, мировой төҙөйбөҙ. Бына, уйлап торам-торам да, ағай, если һиңә лә ошондай уҡ һарай отгрохнуть, ә-ә?.. - тип, Хәниф тағы Мотаһарҙың яраһына тоҙ һалды. - Нимәһе бар уның, үҙем һалып бирәм, тик материал ғына тап!

Шулай итеп, нигеҙ өҫтөндә "мировой" төҙөнөләр. Йәғни кешесә әйткәндә, килештеләр. Эйе, янғын хәүефһеҙлеге лә, шәхси биләмә мәсьәләһе лә бик тиҙ хәл ителде: өс стакандың яртыһына ҡойолған иблис һыуы һәр береһенең яурындарында ултырған икешәр фәрештәне килештерҙе лә ҡуйҙы. Береһе әҙәм балаһының яҡшылығын, икенсеһе насар эштәрен яҙып барыр өсөн ҡулдарына ҡәләм алғайнылар, был осраҡта дәфтәрҙәрен ябып, күҙҙәрен йомоп торҙолар.

Шулай ҙа, "мировой" төҙөлһә лә, Мотаһарҙың күңелендә оло ҡара бушлыҡ ҡалды. Яйлап ул бер төйөргә уҡмашты, йоҙроҡ һымаҡ ташҡа әйләнде - күкрәк тәңгәлендә ҡатып ҡалды. Уны иретеү өсөн, айһай, күп ваҡыт кәрәк ине. Был "таш" бит бер "мировой"ҙан ғына онтала торған нәмә түгел. Унда хужаһының көсһөҙлөгө лә, ғәрлеге лә уҡмашҡан, етмәһә, ҡайҙандыр үс алыу теләге ҡалҡып сығып, йәбеште. Юҡ, былай ғына онталмаҫ шул, онталмаҫ.

**(Дауамы бар).**

ЗАУЫҠ

# БАРЫБЫҘ ҘА БЕР КӨТӨҮҘӘН БИТ БЕҘ -

## һыйырҙарҙан артыҡ түгелбеҙ...

**Шағир, Башҡортостан Республикаһының Яҙыусылар берлеге ағзаһы, Сибай ҡалаһының Р. Өмөтбаев исемендәге премияһы лауреаты, "Юлдаш йыры-2011" республика йыр бәйгеһе лауреаты Фәнис СИРБАЕВ Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында тыуған. Бала сағы, мәктәп йылдары Шүлкә ауылында үтә. Сибай сәнғәт колледжының вокал бүлеген, БДУ-ның Сибай институты филология факультетын тамамлай. З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә "Шаңдау", "Нур усағы", "Әҙәби нағыш" китаптарында "Юлға сығам", "Март бураны", "Өмөтөм усаҡтары" исемле шиғырҙар шәлкемдәре баҫылды. 2021 йылда "Дауыл" тип аталған айырым китабы донъя күрҙе. Ижад емештәре 2022 йылда "Ирәндек гәүһәрҙәре-2" китабына, шулай уҡ Бәләбәй ҡалаһында сыҡҡан "Йәйғор" альманахының 3 йыйынтығына, Сибай Яҙыусылар ойошмаһы сығарған альманахҡа, 30 автордан торған "Кеше", "Бәрәкәт асҡысы" исемле йыйынтыҡтарға ингән.**



### Яға

Һауаланма, бөйөклөк бит,
Бер Аллаһтың сифаты.
Мин-мин тимә, һин бары тик,
Аллаһтың бер ижады.

Һәләтең дә, тоҫ- башың да -
Ваҡытлыса аманат.
Аллаһ һине күтәрмәләп,
Иманыңды һынамаҡ.

Көрәш бит ул беҙҙең ғүмер -
Нәфсең менән үҙеңдең.
Һәр хәл-торош хикмәт бит ул,
Әйтмә: еңдем... Еңелдем...

Еңелеүең - булыр еңеү,
Еңеүҙәрең - еңелеү...
Әҙләмә, һин, һыу түгелһең,
Барыр юлдың еңелен.

Һауаланма, мин-минләнмә,
Бәйғәмбәр үҙе әйткән:
"Бойҙай ҙурлыҡ ғорурлыҡты
Йөрәгендә йөрөткән,
Инә алмаҫ ожмахтарға..."
(Уға юл бикле икән).

Көрәш бит ул был донъялар -
Һәр минуты, секунды;
Нәфсең менән яғалашыу,
Ана, берәү уҡынды...

Тамсы ғына бер уй һалһам,
Ошо шиғырым менән.
Бер гонаһым, бәлки, кәмер,
Улар шығырым, беләм.

Һауаланма, ыуаланма,
Әҙәмдән көтмә баһа.
Һәм онотма: нәфсе... Көрәш...
Йыртыла, тимә яға!

### Әлдә

Йә дошман да түгелһең һин,
Түгелһең бит дуҫым да.
Һиңә һүҙҙәр, күҙҙәр ҙә йәл,
Һуҙған асыҡ усым да.

Һин тереме, түгелме ул?
Кешенеке - ҡиәфәт.
Һин бит - әртис, тормош - кәнсирт!
Уйнап йәшәү - (э)рәхәт...

Ҡыҙыуыраҡ башланыммы?
Ярамай, һин дә - бәндә.
Урыҫ әйтә: "Не суди...", тей,
Фәрештә түгел мин дә.

Һин дә яҙмыш ҡушҡанынса,
Һөйрәйһендер тәрендә.
Ғайса- беҙҙең дә бәйғәмбәр,
Аңлаһаң һүҙҙәремдә.

Юлдашһың һин: бер быуатта,
Бер заманда атлайбыҙ.
Һәр кем үҙенсә хаҡлы шул -
Ҡылыҡтарҙы аҡлайбыҙ.

Үҙем башлаған фекерҙе,
Үҙем онтаным әллә?..
Хикмәт барҙыр. Аллаһ - бөйөк!
Осраштырған, тим, әлдә.

### Бизмәндәр

Башҡасараҡ унда бизмәндәр...
Бармы икән белгән, һиҙгәндәр.
Мин уҡыным, эйе, ҡайҙалыр,
Кем шатланыр, кемдер ҡайғырыр.

Ҡиәмәттең гәҙел бизмәне...
Кемдер әйтер: ә мин белмәнем...
Мөһим түгел эштең дәүмәле,
Уйламағыҙ: эшем дәү әле.

Насар түгел, беләм, бик шәп ул:
Юл һалдырыу, тәҙәү мәсеттәр,
Әммә, тәрлә беҙҙең кәсептәр...
Ҙур етәксе аҡса күсерҙе,
Ҡыуаланы банкка күсерҙе.
Бухгалтерҙар, күсер, оҫталар
Был ҙур эштә күпкә оталар...

Тырышлыҡты, һалған көсөңдө
Үлсәй икән унда бизмәндәр.
Аҡса ташлап, һалған мәсеттән
Ауырыраҡ тарта бер баҫма -
Башҡа ярға еңел юл аҫһа;
Оҫта уны үҙе тәҙәһә,
Хәләл тире шунда түгелһә.

Башҡасараҡ унда бизмәндәр -
Һалынған көс унда үлсәнә...
Һөкланмағыҙ доға ҡылғанда,
Уҡымышлы мулла эшенә.
Кемгәләр бит еңел бирелә,
Серле ғилем еңел тирелә.

Һөкланығыҙ ысын күңелдән,
Сит-ят телдә ҡат-ҡат төртөлгән,
Олоғайғас белем эстәгән,
Ярай, элек... Бөгөн эсмәгән,
Ҙур тырышлыҡ һалған муллаға...
Маңлай тире унын мул аға...

Башҡасараҡ икән бизмәндәр
Ҡиәмәттә, барҙыр һиҙгәндәр.
Ашыҡмағыҙ эшләп һығымта
Кеше хеҙмәтенә, шиғырға...
Аллаһ ҡына ҡуйыр баһаһын,
Тик ул белә юлдың аҙағын.

### Нух

Ике йәшәр булһам, тиһегеҙ ҙә,
Йырлайһығыҙ: "Ғүмер бер генә",
Нисегерәк булыр ине икән,
Ике ғүмер, әгәр, бирелһә.

Хаталарһыҙ ғына, сәғәт һымаҡ,
(Сәғәте лә ҡай саҡ бутала),
Дөрөҫ кенә йәшәр инекмелер,
Ике ғүмер... Ике уртала.

Танымамыш булып үҙ бисеңде,
Үҙ иреңде булып күрмәмеш.
Яңы тойғоларға асып йөрәк,
Тормошоңда эҙләп үҙгәреш,
Яңы хаталарға өр-яңынан
Батыр инекмелер яңыса.

Барыһы ла өр-яңынан башлап,
Яңы йәрҙәр менән танышһа...
Кем белһен дә, бәлки, ысынлап та,
Киләбеҙҙәр ҡабат-ҡабаттан.
Тик, хәтерҙәр генә юйылалыр,
Ҡуйылалыр беҙгә ҡабат аң...

Әйткәндәй, йән һәм дә аңдар беҙҙең,
Аңлатамы бер үк нәмәне...
Шашмайыҡтар... Теге Нухты әйтәм,
Башламаны микән кәмәне.

### Арытты

Барыбыҙ ҙа бер көтөүҙән бит беҙ -
Бер сыбыҡтан шарт-шорт ҡыуылған.
Бер кисеүҙән һыуҙар эсәбеҙ бит,
Тояҡтар ҙа шунда йыуылған.

Барыбыҙ ҙа бер көтөүҙән бит беҙ -
Һыйырҙарҙан артыҡ түгелбеҙ.
Һөҙөшәбеҙ көн дә, төкөшәбеҙ,
Булыр тиепмелер күңелһеҙ.

Барыбыҙ ҙа бер көтөүҙән бит беҙ -
Көнө буйы ризыҡ эҙләйбеҙ.
Тик йоҡларға ғына ҡайтабыҙ ҙа,
Ғүмер үткәнен дә һиҙмәйбеҙ...

Әллә бармы беҙҙең арабыҙҙа,
Маңлайҙары ҡашҡа тәкәләр?
Көтөүсенең яҡын таныштары,
Яҡшы һарайлылар, текәләр?

Әллә бармы беҙҙең арабыҙҙа,
Туҡлыҡлыраҡ ерҙә утлаған?
Кисен ҡайтҡас, ауыҙ итеүселәр,
Көтөүсенән ҡалған бутҡанан?

Барҙыр арабыҙҙа төрлөләре:
Ҡашҡалары барҙыр, текәләр...
Ә шулай ҙа, төкөшмәйек әле,
Юлдарыбыҙ бер көн текәлер

Бер үк ергә, бер үк көнгә, эйе,
Тауҙарҙан да бары саң ҡалыр.
Ярҙам итмәҫ бутка, миҙалдар ҙа,
Ғәмәлдәрең ҡалыр, аң ҡалыр...

Барыбыҙ ҙа бер көтөүҙән бит беҙ.
Халыҡмы беҙ, әллә нарыҡмы?
Дөрөҫ түгел ҡанун-кәртәләрҙә
Һөҙөшөүҙәр, эйе, арытты.

*Фәнис СИРБАЕВ.*

### Тормош

Төнгө ҡала. Кемдер газға баҫа,
Кемдер баҫа ҡапыл тормозға.
Эттәр өрә, ҡыҙҙар көлә һымаҡ,
Ҡолаҡ күнгән ошо тормошҡа.

Шаулап тора. Әйтерһең дә, баҙар,
Беҙ килгәнбеҙ ниҙер алырға.
Тиндәр урынына көндәр тотоп,
Бер аҙ һатыулашып ҡалырға.

Йыһан өсөн беҙҙең "шау-шыу"ыбыҙ,
Бер шоу ғына - сәғәт ярымлыҡ.
Ер ғүмере - сәғәт ярым булһа,
Беҙҙекеме? Хайран ҡалырлыҡ.

Ваҡыты ла шыйғаҡ, ҡара йылан,
Ҡайһы осон нисек тоторға.
Аңы етмәй һаман кешеләрҙең,
Туҡтатырға уны, оторға...

Төнгө ҡала уйға һала мине,
Тормош инә асыҡ балкондан.
Ябып ҡуйһам, ситтә ҡалырмындай,
Ер шарынан, юлдаш халҡымдан.

### Һай! Был донъя!

Нимәлер хәтерҙә һымаҡ,
Әллә төштә күрҙемме.
Ниҙер һүрҙем? Әллә инде,
Киреһенсә, үрҙемме?

Ашыҡ-бошоҡ, йүгермәләп,
Көн-төндәр алышынды.
Тай менеп юлға сыҡҡайным,
Һөйрәйем алашамды.

Кемгәләр сәскә өҙгәйнем,
Өлгөрмәнем бирергә.
Ҡат-ҡат йылдар юлдарымда-
Ҡайтып булмай кирегә...

Нимәлер хәтерҙә һымаҡ,
Әллә күрҙемме төштә.
Тыуҙым да, уҡырға барҙым:
Кисә - бер, бөгөн - өстә.

Йоҡонан торһам - һалдатмын,
Кис ятһам, янда - бисә.
Таңға, улым өйләнәм, ти,
Мин бит өйләндем кисә...

Ҡапҡа шаҡылдата кемдер,
Әллә почтальон? Нишә?
Олатай, ти, пенсияңды
Индералманым кисә...

Нисек кисә? Кисә бит мин,
Тәүге эшкә төшкәйнем...
Һай! Был донъя! Тиҙлегең шәп,
Өндә күргән төштәйһең.

### Мин кем

Бәлки, тимен, мин уйынсыҡ,
Марсиандың бармағында;
Тулап торған бер балыҡмын,
Сикһеҙ йыһан ҡармағында.

Бәлки, Дарвин маймылылыр -
Ваҡыт яйлап кеше иткән;
Әллә, иң ҙур шартлауҙан һуң,
Йыбырлаған кеше микән...

Барыһы ла буш һүҙ һымаҡ,
Ҡолаҡҡа ла ятмаҫ хәбәр.
Иң аңлыһы беҙ тиһәк тә,
Улай түгел һымаҡ хәлдәр.

Барыһы ла бикле, сикле,
Күкрәктәрҙә ҡаҡмайыҡ беҙ.
Хәлдән килә татыу йәшәү -
Еребеҙҙе һаҡлайыҡ беҙ.

Ер-йортобоҙ, асарбаҡтар
Түгеллекте аңлайыҡ та,
Маймыл булып ҡыланмайыҡ,
Бер Аллаһты данлайыҡ та.

Мин кем, тигән ҙур һорауға,
Тик бер генә яуап ҡала:
Әҙәм, Һауа дауамы беҙ-
Ун миллиард гәзиз бала.

✔ *Әгәр, онотоп, повестка тураһында белдереүҙе уҡымаһаң, 7 көндән һуң ул тапшырылған, тип иҫәпләнә. Бынан һуң хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыға телефон аша шылтыратып, бәйләнешкә инергә тырышасаҡтар.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КҮРӘШЛЕК

■ Күрәшлек менән яфаланыусы балалар йылдан-йыл күбәйә, етмәһә, был тайпылыш бала үҫкән һайын аҙа бара. Махсус ортокератологик линзалар ярҙамында был сирҙе бала бәләкәй саҡта дауалап була, һәр хәлдә, күҙ мөгөҙсәһенең артабан формаһы үҙгәреүен туҡтатырға мөмкин. Ҡытай ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 6 йәштән 16 йәшкә тиклем 435 бала ҡатнашҡан. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ике йыл дауамында был махсус линзаларҙы йөрөткән балаларҙың хәле күпкә яҡшыраҡ. Шуға ла офтальмолог менән кәңәшләшеп, күрәшлекте бала саҡта дауалау уңышлыраҡ буласаҡ, ти улар.

■ Ҡайһы бер сит ил ғалимдары, киҙеүгә ҡаршы яһалған вакцинаның пациенттарҙың бары тик 3 процентына ғына ярҙам итә, тип белдерә. Киҙеүҙең вирусы йылдан-йыл үҙгәреп тора һәм медиктар яңы штамдан һаҡлаусы вакцина эшләп өлгөрмәй. Киҙеү бигерәк тә өлкән йәштәгеләр һәм балалар өсөн ҡурҡыныс. Шуға ла иммунитетты иң ябай ысулдар менән булһа ла нығытыу вакцинаға ҡарағанда файҙалыраҡ буласаҡ.

■ Англияла киҙеүгә ҡаршы шарф уйлап тапҡандар. Был шарфтар һауала осоп йөрөгән бактерияларҙан, шулай уҡ химик берләшмәләрҙән һаҡлай. Бының өсөн шарф менән йөҙҙөң аҫҡы өлөшөн һәм муйынды ҡапларға кәрәк. Туҡымаға махсус фильтр ҡуйылған, уны өс ай һайын алыштырып торорға кәрәк. Медицина шарфының дизайн авторы Алекса Нигро. Идея иһә Эндрю Кессперу менән Ари Клэристенфельдуныҡы. Бер тапҡыр метрола китеп барғанда сәскереүсе һәм йүткереүсе пассажирҙарҙан һаҡланып, йөҙҙәрен ҡаплап барған кешеләрҙе күргәндән һуң, улар махсус шарф уйлап таба ла инде.

■ Эмоциональ кисерештәр кешенең психикаһына ғына түгел, ә физик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһай. Аныҡыраҡ әйткәндә, улар бөйөргә таш ултырыуға булышлыҡ итә. Ғалимдар билдәләүенсә, һейҙек ташы ауырыуы менән ауырыған сирлеләр һау бөйөрлөләргә ҡарағанда көнкүреш конфликттарына, эштәге көнелһеҙлектәргә, аҡса етмәүгә өс тапҡырға йышыраҡ зарлана икән. Әйткәндәй, быға тиклем ни өсөн бөйөрҙәрҙә таш барлыҡҡа килеүен фән аңлата алмай ине. Шуға ла был асыш ауырыуҙы артабан өйрәнергә ярҙам итәсәк. Статистика буйынса, халыҡтың 10 процентының бөйөрҙәрендә таш бар. Уларҙың күптәре был турала белмәй ҙә. Гәҙәттә, таш урынынан ҡубып, хәрәкәт итә, йәиһә бөйөрҙән сыға башлаһас ҡына ауыртыу барлыҡҡа килә. Ир-егеттәрҙә был сир йышыраҡ осрай.

■ Бөтөн донъя сәләмәтлекте һаҡлау ойошмаһы иң зарарлы медицина ҡоролмалары исемлеген төҙөгән. Унда терегөмөшлө ябай градусниктар ҙа ингән. Табиптар фекеренсә, уларҙы күптән хәүефһеҙерәк ҡоролма менән алыштырырға кәрәк. 2018 йылдан медицина ҡоролмаларында терегөмөш ҡулланыу тыйыла, 2030 йылға тиклем уны бөтөн донъяла тыйыу планлаштырыла.

АҢЛАТАБЫҘ!

# ИР-ЕГЕТТӘР...

## борсоуға ҡалдымы?

**Башҡортостан халҡы Дәүләт хеҙмәттәренән (Госуслуги) улар тураһында мәғлүмәттәрҙе хәрби иҫәптең берҙәм реестрына индереү тураһында белдереүҙәр ала. Был хәбәрҙәр нимә аңлата һәм уларға нисек яуап бирергә? Адвокат Роман ПЕТРОВ асыҡлыҡ индерә.**



➔ **Был ниндәй реестр?**

Ағымдағы йылдан Рәсәйҙә хәрби иҫәптең электрон реестры эшләй башлай. Был хәрби бурысы булғандар тураһында мәғлүмәтте автоматик рәүештә йыйған, уларҙы иҫәпкә ҡуйған һәм граждандар тураһында мәғлүмәттәрҙе актуаллләштергән мәғлүмәт базаһы. Хәрби бурысы булған рәсәйлеләрҙең был электрон базаһына бары тик Рәсәй Федерацияһы Оборона министрлығының ғына инеү мөмкинлеге бар. Әгәр резервтағыларҙы ашығыс рәүештә Хәрби комиссариатҡа саҡырырға кәрәк булһа (был мотлаҡ мобилизация түгел, резервтағыларҙы даими рәүештә йыйындарға һәм медицина тикшереүҙәренә йыйлар), был заманса технологиялар ярҙамында - Дәүләт хеҙмәттәре (Госуслуги) аша башҡарыласаҡ.

➔ **Дәүләт хеҙмәттәре аша бындай белдереү килһә, уны хәрби хеҙмәткә саҡырыу ҡағыҙы (повестка) итеп иҫәпләргә буламы?**

Юҡ, был хәрби хеҙмәткә саҡырыу ҡағыҙы түгел! Бындай белдереү электрон хәрби бурысы булғандар тураһында ғы яҙма рәүештә һаҡланған мәғлүмәттең хәҙер электрон форматта ла буласаҡ икәнен, улар тураһындағы мәғлүмәттең Хәрби комиссариаттар базаһына күсерелеүен генә аңлата.

➔ **Әгәр шундай белдереү килһә, нимә эшләргә?**

Бер ни ҙә эшләргә кәрәкмәй. Был хәрби хеҙмәткә саҡырыу түгел. Ул бары тик мәғлүмәти сығанаҡ һәм граждандарға ниндәйҙер саралар эшләргә кәрәк тигән һүҙ түгел. Әйткәндәй, һыптанмалар аша инеп, үҙегеҙ хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе тикшерә алаһығыҙ.

➔ **Бындай хәбәрҙе повестканан нисек айырырға?**

Электрон повестка ҡағыҙ повестка кеүек үк, унда өҫтәмә рәүештә документтың дөрөҫлөгән раҫлаусы цифрлы ҡултамға бар.

Электрон повесткала хәрби хеҙмәткә саҡырылыусының исеме һәм фамилияһы, йәшәү урыны, военкоматҡа килеү датаһы һәм ваҡыты, саҡырыу сәбәбе, хәрби комиссариаттың адресы күрһәтелә.

Электрон повесткалар Дәүләт хеҙмәттәренә килә. Уны ҡарау өсөн Дәүләт хеҙмәттәренә килгән хәбәрҙәргә инеп, Хәрби комиссариаттан булған хатты табыу кәрәк. Шулай уҡ повестканы "реестр повесткалары.рф" сервисында табырға мөмкин. Бының өсөн Дәүләт хеҙмәттәре аша авторизацияланыу мөһим.

➔ **Әгәр повестканы иғтибарһыҙ ҡалдырһаң, нимә була?**

Әгәр, онотоп, повестка тураһында белдереүҙе уҡымаһаң, 7 көндән һуң ул тапшырылған, тип иҫәпләнә. Бынан һуң хәрби хеҙмәткә саҡырылыусыға Дәүләт хеҙмәттәрендә күрһәтелгән телефон аша шылтыратып, бәйләнешкә инергә тырышасаҡтар, шулай уҡ уның теркәлеү урыны буйынса Хәрби комиссариат хеҙмәткәре киләсәк. Әгәр кешене шылтыратып та, өйөнә барып та тапмаһалар йәки уның махсус рәүештә Хәрби комиссариатҡа барыуҙан ҡасып йөрөүен асыҡлаһалар, административ хоҡуҡ боҙоу тураһында протокол төҙөйәр. Гражданин бынан һуң да ни өсөн Хәрби комиссариатҡа килмәүенең сәбәбен аңлатмаһа (ә улар ысынлап та төрлө булырға мөмкин: ауырып киткән, командировкала булған, сит илдә йәки башҡа төбәктә ял иткән - былар барыһы ла иҫәпкә алыныусы сәбәптәр), әгәр ҙә етди сәбәптәр булмауын асыҡлаһалар, суд штраф һәм сикләүҙәр тураһында ҡарар ҡабул итәсәк: ҡасҡындар автомобилде теркәү, мөлкәт менән килешеүҙәр төҙөү, кредиттар алыу, шәхси эшҡыуарлыҡ һәм бизнес алып барыу хоҡуғын юғалта һәм башҡалар.

**Шуны ла белеү мөһим: суд ҡарары Хәрби комиссариатҡа килеү бурысын юҡҡа сығармай!**

**Станислав ШАХОВ әҙерләнә.**

БАҠСА

# ҒАЛИМДАР КӘҢӘШЕ



**Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институты белгестәре уңышты йыйып алғандан һуң тупраҡты органик (тиреҫ) һәм минераль ашламаларһыҙ яңыртыу тураһында кәңәштәр бирә.**

Быны улар йәшел ашлама тип йөрөтөлгән сидерат үҫемлектәр ярҙамында эшләргә тәҡдим итә. Улар - ужым арышы, бойҙайы, һолоһо, гәрсис, тиле шалҡан (сурепка), рапс, борсаҡ, әсе борсаҡ (люпин), ноҡот борсағы (фасоль), туҡранбаш (клевер) үҫемлектәре. "Уларҙы уңышты йыйып алғандан һуң сәсәләр. Үҫемлектәрҙең үҫеп, ҡыуаҡланып өлгөрөүе мөһим. Уларҙы сәскә атҡанға тиклем киҫеп, тутәлдә ҡаҙмай ғына тупраҡҡа индерәләр, тип аңлата ғалимдар.

Билдәләнеүенсә, ҡуҙаҡлы культуралар тупраҡты азот менән байыта, гәрсис үҫемлектәрҙең фитофтороз, ризоктониоз менән ауыуырыуын кәмета, ҡаты ҡортты ҡурҡыта. Ауырыу тыуҙырыусыларҙы шулай уҡ майлы шалҡан юҡ итә. Сидераттарҙы яҙғыһын да, ҡышҡылыҡҡа ла сәсергә мөмкин, әммә уны "ял итәсәк" тупәлдәрҙә эшләү яҡшыраҡ була, тиҙәр тәжрибәле баҡсасылар. Емешле ағастар һәм ҡыуаҡтар аҫтында ярлы, ауыр һәм әсе тупраҡтарҙа ҡарабойҙай үҫтереү зарур.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# АЙЫУ КӨПШӘҺЕ



**Дарыуҙар әҙерләү өсөн айыу көпшәһенең (дягиль) тамырҙары, япраҡтары, орлоҡтары ҡулланыла. Уны нервы системаһы ҡаҡшағанда, хроник һәм көслө невралгия, ревматизм, подагра, люмбаго, көслө һәм хроник ларингит, ҡурылдай, ҡурылдай астмаһы, хроник гастрит, оҙайлы колит булғанда ҡабул итәләр. Айыу көпшәһе сәйе интоксикация ваҡытында ҡандан ағыуҙы сығара. Был үләндең киптерелгән сәскәһенең бер тажын көн һайын иртәнсәк порошок кеүек иҙеп, бер аҙ күләмдә йөҙөм шарабы менән ҡабул итеү өйәнәктән (эпилепсия) һаҡлай.**

***Панкреатит.*** Стаканда 10 г айыу көпшәһенең киптерелгән үләнен бешереп алырға. 2 сәғәт төнәтергә. Һарҡытырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр 50 мл ҡабул итергә.

***Төрлә ерҙә тупланған яман шеш.*** Бер стакан ҡайнар һыуға 3 ҡалаҡ айыу үләне тамыры алып 30 минут еңелсә генә ҡайнатып алырға, 10 минут төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 2-3 тапҡыр ашағандан һуң эсе көйөнсә ярты стакан ҡабул итергә.

***Өйәнәк (эпилепсия), нервылар ҡаҡшауы.*** Бер стакан ҡайнар һыуҙа 3 ҡалаҡ үлән тамырын төнәтергә (ҡайнап торған һыу быуында 30 минут тотоу тағы ла яҡшыраҡ, ә тиҙерәк әҙерләнһен өсөн еңелсә 4-5 минут ҡайнатып алырға мөмкин). Көнөнә 2-3 тапҡыр ашағандан һуң яртышар стакан ҡабул итергә.

***Ревматизм, подагра, мускулдар ауыртыуы.*** Шундай уҡ төнәтмә яһарға һәм ашағандан һуң эсергә.

***Бөйөрҙәр, бәүел ҡыуығы ауыртыуы, эс ҡатыу һәм күбеү.*** Үлән тамырын порошок итеп иҙергә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 0,5 г һыу менән ҡабул итергә.

Айыу көпшәһе препараттары ҡан ойоуын күтәрә, шуға күрә уларҙы инфарктан һуң тромбоз ваҡытында тәғәйенләргә ярамай. Шулай уҡ был үләнде гиперацид гастрит булғанда ҡулланыу тыйыла.

**Рим ӘХМӘДОВ яҙмаларынан.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# КҮРӘҘӘСЕГӘ ЫШАНМА,

## башыңа бәлә алма!



**Һуңғы йылдарҙа халыҡтың ышаныусанлығынан, берҡатлылығынан файҙаланып, сирҙәрҙе дауалайбыҙ, яҙмыштарҙы ҡуҙаллайбыҙ, тип, күрәҙә һәм сихыр менән шөғөлләнеүсе һәм шул юл менән мал йыйыусы ялғансылар күбәйҙе. Был шөғөл Ислам диненә, мосолмандарға ғына түгел, бөтә халыҡҡа ҙур зыян килтерә. Сөнки сихыр һәм күрәҙәлек - Аллаһҡа һәм Уның Бәйғәмбәренә ышанмау, Уларға итәғәт итмәү, тигән һүҙ.**

Әлбиттә, Исламда төрлө халыҡ дауалары менән дә дауаланыу рөхсәт ителгән. Ләкин мосолман кешеһе тейешле белеме, тәжрибәһе булған, шәриғәт рөхсәт иткән саралар ҡулланған ысын халыҡ табиптарына ғына мөрәжәғәт итергә тейеш. Аллаһы Тәғәлә ауырыуҙарҙы бар иткән һәм уларға ярашлы дауаларҙы ла яратҡан. Ысын халыҡ табиптары был турала хәбәрҙар, ә мал йыйыу өсөн генә был эшкә тотонған наҙан кешеләр был хаҡта белмәй. Шуны беләйек: Аллаһ Үҙе хәрәм ҡылған ялған дауалар, күрәҙәлек итеү ҡолдарына шифа бирмәй. Шуға күрә беҙ хәләл менән хәрәмде айыра белергә тейешбеҙ.

Динебеҙ буйынса, күрәҙәселәр, сихырсылар һүҙенә, улар еткергән мәғлүмәткә ышанырға ярамай. Сөнки улар ен-шайтандар менән эш итә, был турала хәҙистәрҙә етерлек һәм аныҡ әйтелгән. Ләкин кемдәрҙер күрәҙәселәрҙе, сихырсыларҙы "Уларға шундай талант бирелгән!" тип маҡтап бөтә алмай. Иң оло гонаһтар, яңылышлыҡтар ҡыҙыҡтырғыс һәм мауыҡтырғыс тойола. Әммә былар Аллаһ Сүбхәнә үә Тәғәлә тарафынан тыйылған.

Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт салаллаһу ғәләйһис-сәләм әйткән: "Күрәҙәсегә барып, унан ни ҙә булһа һораған кешенең 40 көн доғаһы (намаҙы) ҡабул булмаҫ". Шулай уҡ: "Күрәҙәсе һәм күрәҙәсегә мөрәжәғәт итеүсе - беҙҙең арабан түгел. Күрәҙәсегә барып, уның һүҙҙәренә ышанған кеше Мөхәммәт Бәйғәмбәр (с.ғ.с) өммәтенә ингәндәргә (Ислам диненә) ышанмаусы була",- тигән.

Сихыр - хәрәм ҡылынған һәм көфөрлөккә илтә торған эштәрҙең береһе. Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьәндә әйткән: "...һәм улар Сөләймән батшалығында шайтандар уҡыған нәмәгә эйәрҙеләр. Сөләймән кафырҙарҙан түгел ине, ә Бабилда Һарут менән Марут тип аталған ике фәрештәгә төшөрөлгән нәмәне һәм сихырҙы кешеләргә өйрәтеп, шайтандар иманһыҙ булды. Әммә был икәү: "Беҙ фетнә-һынау ғына, иманһыҙ була күрмә!" - тип алдан әйтмәйенсә тороп, бер кемде лә өйрәтмәне. Улар шул ике фәрештәнән ирҙе һәм ҡатынды нисек айырырға икәнлеген өйрәнделәр. Әммә улар Аллаһын рөхсәтенән башҡа быны менән берәүгә лә зарар килтермәнеләр. Улар, үҙҙәренә зарар килтереп, файҙа бирмәй торған нәмәгә өйрәнделәр, һәм улар быны һатып алған кешенең киләсәк тормошта өлөшө булмауын беләләр ине. Үҙ йәндәре бәрәбәренә һатып алған нәмәләре насар булды. Әгәр улар быны белһә ине!" ("Әл-Бәҡара" сүрәһе, 102-се аят).

Аллаһы Тәғәлә Үҙенең Бәйғәмбәре аша ҡолдарына сихыр зәхмәтенән нисек арынырға, дауаланырға өйрәткән. Сихырҙан һаҡланыуҙың иң көслө сараһы - доға һәм Аллаһҡа зекер әйтеү, "Аятел Көрси", "Ихлас," "Фәләҡ" һәм "Нәс" сүрәләрен уҡыу. Хаҡ мосолман булған кеше үҙен ауырыу йә насар итеп тойһа, иң тәүҙә күрәҙәсегә һәм бағымсыға йүгермәҫ, ә Аллаһтан шифа һорап доға ҡылыр, табиптан диагнозын белешеп, Бәйғәмбәребеҙ өйрәткәнсә дауаланырға тырышыр. Мөхәммәт (с.ғ.с) үҙенең өммәтенә күбеһенсә үләндәр, емештәр менән дауаланырға кәңәш иткән һәм дауаның сығанағы итеп Ҡөрьән һәм балды билдәләгән. Аяҡ аҫтында үҫеп ултырған һәр үләндә төрлө ауырыуҙарға шифа бар. Был әллә ҡасан уҡ иҫбат ителгән. Әммә кешеләр дауаланыуҙың еңел ысулын эҙләпме, әллә үҙ-үҙенә ышанмау арҡаһындамы, үҙенең һаулығын, хатта булмышын сихырсы-күрәҙәселәр иркенә тапшыра.

Сихырҙы дауалау өсөн шәриғәт тарафынан рөхсәт ителгән дауалар бар. Бәйғәмбәребеҙ салаллаһу ғәләйһис-сәләмгә боҙом ҡылынған ваҡытта Аллаһы Тәғәлә уны был яуызлыҡтан ҡотҡарған. Бары тик сихырсы эшләгән боҙомдо табып, уны юҡҡа сығарғандар. Шуның менән Аллаһ Үҙенең Бәйғәмбәренә шифа биргән. Ғәҙәттә, сихырсылар ептән төйөндәр яһап йәки ҡағыҙҙарҙы бер-береһенә беркетеп, шуға өрәләр һәм һуғалар. Әгәр был әйберҙәрҙе табып юҡ итһән, Аллаһ ихтыяры менән сихыр зәхмәте лә бөтә.

Әгәр ауырыу үҙ аҡылында булһа, ҡайһы ваҡыт уның үҙенән Ҡөрьән уҡытып та дауалайҙар. Ә ҡайһы саҡта кемдер берәүҙең доға уҡып, ауырыуҙың күкрәгенә йәки башҡа еренә өрөүе генә лә шифа бирә. Был ваҡытта "Фәтиха", Аятел Ҡөрси", "Әғраф", "Юныс" һәм "Тәһа" сүрәләренең мәғлүм аяттарын, "Кәфирун" һәм Ҡөрьәндең һуңғы 3 аятын уҡырға кәрәк. "Ихлас", "Фәләҡ", "Нәс" сүрәләре өсәр тапҡыр уҡыла. Һәм Аллаһҡа дауаланыуға өмөт менән доға ҡылырға кәрәк. Дауалаусы - Аллаһ Үҙе. Ул һәр нәмәгә ҡөҙрәтле. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйткән: "Дауаһын барлыҡҡа килтермәйсә, Аллаһы Тәғәлә бер сирҙе лә барлыҡҡа килтермәгән. Белеүселәр - был хаҡта белә, белмәгәндәр - белмәй".

**Мөхәмәтйәр НӘЖМЕТДИН.**
**"Сихыр һәм күрәҙәселек"**
**китабынан.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Ҡала ҡарлуғасы**
**(Черный стриж)**



Ҡала ҡарлуғасы менән ҡарлуғас кеүектәр төркөмөнә ҡарай. Был төркөмгә ҡарлуғастарҙан тыш, тропиктарҙа йәшәгән һәм сәскә һуты менән туҡланған колибриҙар ҙа инә.

Ҡала ҡарлуғасының ҡанаты оҙон, тар, ураҡҡа оҡшап, бөгөлөп тора. Төҫө ҡарағусҡыл күк, боғағы ғына аҡ. Осоп барған бөжәктәрҙе тотоп ашау өсөн ҡулайлашҡан суҡышы ҡыҫҡа, әммә ул бик киң асыла. Аяҡтары ҡыҫҡа, шуға ла ул ерҙән атлап һәм осоп китә алмай. Тәпәйе йөнтәҫ, 4 бармағы ла алға ҡарай, ҡала ҡарлуғасы улар менән таш ҡаяларҙа, стеналарҙа йәбешеп тора. Тиҙ оса, тауышланып бара, "стрррииииии" тип ҡабат-ҡабат ҡысҡыра.

Европаның тундра һәм төньяҡ тайғаһынан башҡа бөтөн ерендә лә бар. Шулай уҡ Азияның ҙур өлөшөндә осрай. Ҡариҙел йылғаһының ҡаялы ярҙарында йәшәй. Көньяҡ Уралда инә Ағиҙел һәм башҡа йылғаларҙың бейек ярҙарында, тауҙарҙа оя ҡора. Һаны ягынан күп түгел. Ә бына күрше Ырымбурҙа ҡала ҡарлуғасы ғәҙәти ҡош иҫәпләнә.

Колониялар менән дә, яңғыҙ парҙар менән дә йәшәй. Ҡайһы саҡта сыйырсыҡ ояларын да "өй" итеп ала. Ояһына ҡаурыйҙар, йөн түшәй, уларҙы һауала йыя. Ошо материалды төкөрөгө менән йәбештерә. Йоҡоһо ла осоп китеп барышлай. Оҙонсараҡ формалағы 2-3 йомортҡаһын ата ҡош менән инә ҡош сиратлап 18-27 көн баҫа. Бәпкәләр башта яланғас була. Тәүге аҙнала ҡоштар уларҙы йылыла ғына тота, сиратлап ризыҡ - осоп йөрөгән бөжәктәрҙе ташый. Һалҡын көндәр булып, бөжәктәр осмай икән, ҡала ҡарлуғасы ояһынан да сыҡмай ултыра. Йә иһә йылыраҡ урындарға, йөҙәр саҡрымдарға осоп китә һәм унда бер нисә көн булып, кире ҡайта. Был ваҡытта ояларағы бәпкәләр өшөүҙән ҡыбырламай ҙа ята, әммә көндәр кире йылынып, атаинәһе ҡайтыу менән кире "терелә". Күмәкләп йәшәйҙәр, көнө буйы һауала осоп йөрөйҙәр. Йылы яҡҡа иртә - июлдең икенсе яртыһында уҡ оса. Беҙ Өфөлә уларҙы иң һуңғы күргәнебеҙ августа ине. Ҡайһы бер йылдарҙа сентябрҙә ҡуҙғалғандары ла була.

Африканың көньяғында ҡышлай. Яҙын былтырғы ояһына ҡайтырға тырыша. Йәш ҡоштар ҙа үҙҙәре үҫкән оя тирәләй урынлаша. Тәпәйенә балдаҡ кейҙерелгән иң ҡарт ҡала ҡарлуғасына 21 йәш ине.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

# ЯЛҒАН ХАТТАР КИЛӘ



**Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, электрон почта аша йәки мессенджерҙа: "Һеҙ юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙҙоғоҙ. Ҡарар менән танышығыҙ һәм 01.08 тиклем штраф түләгеҙ", тигән хат ебәрәләр. Хатҡа PDF форматындағы файл беркетелгән. Документта кешенең ысын исеме, автомобиль номеры йәки башҡа шәхси мәғлүмәттәр күрһәтелергә мөмкин. Былар барыһы ла ысынбарлыҡ тойғоһо тыуҙыра ла инде.**

Хатта "хәҙер түләргә" тигән төймәһе лә бар, ул сит интернет-сәхифәгә алып бара. Һылтанма буйынса күсһәң, ул төрлө варианттар килтереп сығара. Мәҫәлән, ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡулланыусы дәүләт йәки банк онлайн-сервистары интерфейсын визуаль күсергән ялған сайтҡа эләгә. Бында унан банк картаһы мәғлүмәттәрен һорайҙар: номер, ғәмәлдә булыу ваҡыты, CVV-код, ә ҡайһы берҙә СМС-тан раҫлау кодтары.

Башҡа осраҡтарҙа һылтанма автоматик рәүештә зарарлы ресурсҡа алып бара. Бындай программалар паролдәрҙе эләктереп ала, банк ҡушымталарына, мессенджерҙарға инә һәм хатта камера һәм микрофон ҡуллана ала. Ведомствола билдәләүҙәренсә, штраф тураһында белдереүҙәр рәсми каналдар, атап әйткәндә, "Дәүләт хеҙмәттәре" аша ғына килә.

**Дарья СУББОТИНА.**

# ТАЛПАН ҺАМАН ХӘҮЕФЛЕ



**Башҡортостанда талпандан зыян күреүселәр һаны арта. Күҙәтеү ведомствоһы мәғлүмәттәре буйынса, 7 августҡа ҡарата медицина ойошмаларына талпан ҡаҙалыу буйынса 9 285 кеше мөрәжәғәт иткән, уларҙың 3291-е-бала.**

Туристарға урманға барғанда кейем аҫтына талпан инеүен ҡыйынлаштырыу һәм уларҙы тиҙ тикшереүҙе еңеләйтеү өсөн махсус кейенергә кәңәш ителә. Был - асыҡ төҫлө, еңле, ябыҡ яғалы кейем. Салбар балағын ойоҡҡа, итеккә тығығыҙ, башығыҙҙы ла ҡапларға онотмағыҙ.

Ғәҙәттә, талпандың әүҙемлеге яҙғы-йәйге осорға, айырыуса май-июнь айҙарына тура килә. Йәйҙең икенсе яртыһында кәмеһә лә, был хәүеф көҙгә тиклем дауам итеүе ихтимал, тип иҫкәртә табиптар.

Шуны иҫтә тотоу мөһим: үҙегеҙгә йәки балаға бөжәк ҡаҙалған осраҡта, уны инфекцияға тикшереү өсөн травма пунктына йәки поликлиникаға мөрәжәғәт итергә кәрәк. Талпандар энцефалит, Лайм ауырыуы (боррелиоз), туляремия, эрлихиоз һәм башҡа хәүефле ауырыуҙарҙы йөрөтә. Башҡортостанда талпан энцефалиты вирусы менән зарарланған бөжәктәр киң таралған.

**Әлфиә ӘҺЛИУЛЛИНА.**



## 18 АВГУСТА ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.10 "Модный приговор". [0+]
10.00 "Жить здорово!" [16+]
10.50, 11.25, 1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 "Время героев". [16+]
13.00, 14.15 Информационный канал. [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чистые руки". [16+]
22.45 Т/с "Доктор Преображенский". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.02 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Профилактика на канале с 07.00 до 14.00.
14.00 Новости недели (на рус.яз). [12+]
14.45 Специальный репортаж. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Асыш. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Башҡорттар. [6+]
16.30, 21.30 Новости /на рус. яз.
16.45 Интервью. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз)./. [12+]
17.45 Профессионалы. [12+]
18.00, 2.30 Защитники Отечества. [12+]
18.30, 22.30 Новости /на баш. яз.
19.00, 4.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 О чем молчат Памятники. [12+]
20.45 Д/ф Светлана Мушкина. Свет теплого дома. [12+]
22.00 Тайм-аут. [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Т/с "Умник". [16+]
0.45 Спектакль "Лебедушка моя". [12+]
3.00 Бәхет иле. [12+]
5.00 Новости (на баш. яз)./. [12+]
5.30 Территория счастья. [12+]**

## 19 АВГУСТА ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чистые руки". [16+]
22.45 Т/с "Доктор Преображенский". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.02 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]
11.00 "Из жизни доктора". [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости /на рус.Яз.
11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00 Тайм-аут. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости /на баш.Яз.
14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00, 22.00, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз)./. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
19.00, 4.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Д/ф "Ибраевской школе - 100 лет: Воспоминания и достижения". [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Т/с "Умник". [16+]
0.45 Спектакль "Моя звезда". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз)./. [12+]**

## 20 АВГУСТА СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чистые руки". [16+]
22.45 Т/с "Доктор Преображенский". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.02 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]
11.00, 2.30 "Дорога к храму". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости /на рус.Яз.
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00 Дознание. [16+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости /на баш.Яз.
14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 "Экологично". [6+]
15.30 "Атайсал". [6+]
16.00 Автограф. [12+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.30, 6.30 Новости (на рус. яз)./. [12+]
17.45 Доступный Башкортостан. [12+]
18.00 Д/ф "Технологично". [12+]
19.00, 4.00 Телецентр.
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 Защитники Отечества. [12+]
21.00 "Асыш". [6+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Т/с "Умник". [16+]
0.45 "Суд матери". [12+]
5.00 Новости (на баш. яз)./. [12+]**

## 21 АВГУСТА ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.00 Т/с "Ищейка-7". [16+]
20.00 "Большая игра". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Чистые руки". [16+]
22.45 Т/с "Доктор Преображенский". [16+]
23.45 "Большая игра" с Дмитрием Саймсом. [16+]
1.00, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 1.40, 3.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Т/с "Спасская". [16+]
23.35 Т/с "Анна Медиум". [16+]
4.02 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]
11.00 Д/с "Большой скачок". [12+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости /на рус. яз.
11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз). [12+]
12.15 Профессионалы. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости /на баш. яз.
14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 Гора новостей.
15.15 Сулпылар. [6+]
15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Патриот РФ. [12+]
16.15 Дознание. [16+]
17.00 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
17.45 Криминальный спектр. [16+]
18.00 "Йома". [6+]
19.00, 4.00 Телецентр.
19.45 "Мама". [12+]
20.00 Сәңгелдәк. [6+]
20.15 Квадратные метры. [12+]
20.30 "Музыка ветра". [12+]
21.00 Формула здоровья. [12+]
22.00, 2.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 "Ете егет". [12+]
23.45 Т/с "Умник". [16+]
0.45 Спектакль "Семь девушек". [12+]
2.15 Письма солдатам. [12+]
5.00 Новости (на баш. яз)./. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз)./. [12+]**

## 22 АВГУСТА ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 17.00 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" [16+]
16.05 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Т/с "Ищейка-7". [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Что? Где? Когда?" [16+]
22.55 Т/с Премьера. "Шерлок и дочь". [16+]
0.40 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Тайны следствия". [16+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 Торжественное открытие Международного конкурса молодых исполнителей "Новая волна-2025".
23.55 Х/ф "Розы и шипы". [16+]
3.20 Х/ф "Крепкий брак". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".
10.00 Т/с "Не плачь по мне, Аргентина". [16+]
11.00 "Йома". [6+]
11.30, 16.30, 21.30 Новости /на рус. яз.
11.45, 16.45 Интервью. [12+]
12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз). [12+]
12.15 Криминальный спектр. [12+]
12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]
13.30, 18.30, 22.30 Новости /на баш. яз.
14.00, 3.00 Бәхет иле. [12+]
15.00 "Асыш". [6+]
15.15 Тирмәкәй. [6+]
15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]
16.00 Хазина. [6+]
17.00 Республика LIVE #дома. [12+]
17.45 Квадратные метры. [12+]
18.00 Башҡорттар. [12+]
19.00 III Фестиваль классической музыки "Романтика осени".
22.00 Своих не бросаем. [12+]
22.15 Письма солдатам. [12+]
23.00 Дневник "Дни армейской культуры". [12+]
23.15 "Ете егет". [12+]
0.00 Т/с "Умник". [16+]
1.00 Д/ф К 85-летию со дня рождения режиссера, заслуженного деятеля искусств РФ и БАССР Михаила Рабиновича. М. Горький "Луна и листопад". Спектакль ГАРДТ РБ. [12+]
4.00 Телецентр.
5.00 Новости (на баш. яз)./. [12+]
6.30 Новости (на рус. яз)./. [12+]**

## 23 АВГУСТА СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Безбилетный пассажир удачи". К 95-летию со дня рождения Георгия Данелии". [16+]
11.05 "Играем свадьбу!" [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Поехали! [12+]
13.05 Т/с "Убойная сила-5". [16+]
17.05 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "Ээхх, Разгуляй!" [16+]
21.00 "Время".
21.35 "Сегодня вечером". [16+]
23.30 Х/ф "Горизонт в огне". [18+]
1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.30, 20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.50 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
17.15 "Эра мечтателей". Торжественная церемония, посвящённая 80-летию атомной промышленности.
21.00 Х/ф "Столичная штучка". [12+]
0.35 Х/ф "Боль чужой потери". [12+]
4.26 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз)./. [12+]
7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
8.15 "Легенды Урала". [12+]
8.30 Хазина. [6+]
9.00, 23.15 Дневник "Дни армейской культуры". [12+]
9.15 "Ҡурай даны". [12+]
9.30, 6.30 Новости (на рус. яз)./. [12+]
9.45 Своих не бросаем. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.30 Әкиәтсе. [6+]
10.45 Зерно. [6+]
11.15 "Ат уйнатып". [6+]
12.00 "Елкән". [6+]
12.30, 23.30, 4.00 "Ете егет". [12+]
13.30 Башҡорттар. [12+]
14.00 Дарю песню. [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 Х/ф "Короткие волны". [16+]
18.30 Новости /на баш.Яз.
19.00 III Фестиваль классической музыки "Романтика осени".
21.30 Новости /на рус. яз.
22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]
22.30 Новости недели /на баш. яз.
0.15 Караоке по-башкирски. [12+]
0.45 Т/с "Умник". [16+]
1.30 "Матери ждут сыновей". [12+]
3.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]
4.45 Новости недели (на баш. яз). [12+]
5.30 "Простые истории: жить, работать, любить". [12+]**

## 24 АВГУСТА ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10, 0.00 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
6.40 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.30 "Золотая коллекция Союзмультфильма". [0+]
9.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.15 "Жизнь своих". [12+]
11.05 "Повара на колесах". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Премьера. "Они выбрали - Родину". [16+]
12.55 "Видели видео?" [0+]
14.20 Д/ф "Безбилетный пассажир удачи". Полная версия. К 95-летию со дня рождения Георгия Данелии". [16+]
15.25 Х/ф "Кин-дза-дза!" [12+]
18.00 Вечерние новости.
19.00 "Две звезды". Лучшее. [12+]
21.00 "Время".
23.00 Т/с "Триггер". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.25, 1.35 Х/ф "Осторожно! Вход разрешён". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.17 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]
7.30 Новости (на баш. яз)./. [12+]
7.45 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]
8.15 Доступный Башкортостан. [12+]
8.30 Күстәнәс. [12+]
9.00, 22.45 Дневник "Дни армейской культуры". [12+]
9.15 "Мама". [12+]
9.30 Новости /на рус.Яз.
9.45, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]
10.45 Тирмәкәй. [6+]
11.00 Городок АЮЯ. [6+]
11.15 "Беседка". [6+]
11.30 "Сулпылар". [6+]
12.00 "Атайсал. Беҙҙекеләр! Знай наших!" [6+]
12.30 Новости недели /на баш. яз.
13.15 "Занимательная биология". [12+]
13.45 Формула здоровья. [12+]
14.00 "Музыка ветра". [12+]
14.30 Дорога к храму. [6+]
15.00 Честно говоря. [12+]
15.45 Спектакль "Семь девушек". [12+]
17.15 Х/ф "Император". [16+]
19.00 III Фестиваль классической музыки "Романтика осени".
21.30 Новости недели /на русс. яз.
22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]
23.00 Концерт Искандара Газизова. [12+]
1.00 Т/с "Умник". [16+]
2.30 Д/ф К 85-летию со дня рождения режиссера, заслуженного деятеля искусств РФ и БАССР Михаила Рабиновича. М. Горький "Луна и листопад". Спектакль ГАРДТ РБ. [12+]
4.45 Башкирские каникулы. [12+]
6.00 Новости недели (на рус.яз.)/. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1447 һижри йыл.*

| Август (Сәфәр - Рәбиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 18 (24) дүшәмбе | 3:30 | 5:57 | 13:30 | 18:21 | 20:42 | 23:08 |
| 19 (25) шишәмбе | 3:34 | 5:59 | 13:30 | 18:20 | 20:39 | 23:04 |
| 20 (26) шаршамбы | 3:38 | 6:01 | 13:30 | 18:18 | 20:37 | 23:00 |
| 21 (27) кесе йома | 3:41 | 6:03 | 13:30 | 18:16 | 20:35 | 22:55 |
| 22 (28) йома | 3:45 | 6:05 | 13:30 | 18:15 | 20:32 | 22:51 |
| 23 (29) шәмбе | 3:48 | 6:06 | 13:30 | 18:13 | 20:30 | 22:47 |
| 24 (1) йәкшәмбе | 3:52 | 6:08 | 13:30 | 18:11 | 20:28 | 22:43 |

*БР Мосолмандары диниә назараты сайтынан алынды.*

✔ ***Бәлиғ булмағандар йыш ҡына мутлашыусылар ҡорбаны була, уларҙың банк карталары урланған аҡсаны аҡсаға әйләндереү өсөн ҡулланыла. Ата-әсәләр контроле аҫтында бындай хәлдәргә юл ҡуймаҫҡа мөмкин.***



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ШИФАЛЫ ҮЛӘНДӘР









- Ярыш башланған урын
- Боронғо Рус алпауыты
- Бер һуҡталағы емеш суғы
- "Йомортка (...)ҡа өйрәтмәй"
- Оҙон һабаҡлы, ал сәскәле урман үләне (2)
- "(...)-төпсөн"
- Алһыу сәскәле, болонда, һаҙлыҡлы ерҙә үҫә (3)
- Хуш еҫле ялан үләне
- Урыҫса "дурнишник обыкновенный" атамалы ағыулы үлән
- Аҡ, өйкөм сәскәле дарыу үләне
- Апрелдә һары сәскә атҡан (...) инә үләне
- "(...) йәйеп, ҡатыға ултырта"
- Мөмкинлек (рус.)
- Уны ҡырҡколас, ҡарабаш та тиҙәр (4)
- Мәжүсиләрҙең "Хоҙайы"
- "(...) маллы булһын, ат яллы булһын"
- Орлоғо дауалауҙа ҡулланылған хуш еҫле үлән (1)
- "Йоҡлаған ҡалыр, (...) донъяны алыр"
- Кемгә? - уға, кемдән? - (...)
- Йәйге аш өйө
- "(...) тиле атын маҡтар, үтә тиле ҡатынын маҡтар"
- Ҡулға кергән мал, трофей
- Дүрт яғын диңгеҙ уратҡан урын
- Ҡырымдағы Кизләүҙең хәҙерге атамаһы
- (...) көпшәһе - тын юлдарын дауалай
- "(...) балаһы хур булмай"
- Киҫәк-киҫәк йәбешеп, бергә ойошҡан
- Ҡара ҡанатлы, аҡ түшле, оҙон аяҡлы ҡош
- "(...)ға ҡаршы йөҙөү ауыр"
- Оскат ағасының икенсе атамаһы
- Аҡһыл йәшел ҡабыҡлы ағас
- Ир-егет исеме
- "(...) иткән тау ярыр"
- Утын яра торған ҡалын балта
- "Улға ҡараған - (...)ға ҡараған"
- ⌘
- Балалар уйыны
- Тын алыу ағзаһы
- Ярамаған нәмә ашап, тәнгә сыҡҡан ҡыҙыл сабыртҡы
- Әсе тәмле, ҡырҡыу еҫле ҡый үләне

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**31-се һандағы сканворд яуаптары.**
**Горизонталь буйынса:** Чечен. Хакас. Алтай. Бүрәт. Артыш. Антракт. Башҡорт. Ампер. Абазин. Онтаҡ. Үрт. Сиҙәм. Ыңйы. Вепс. Урман. Тырма. Ыҙма. Ҡурмас. Шашки. Уйынсыҡ. Толстой.
**Вертикаль буйынса:** Белорет. Бишмәт. Ер. Ойоҡ. Ваҡ. Хәнә. Удмурт. Татар. Чукча. Үлсәм. Ананас. Тырыз. Тыныс. Ары. Нанай. Ҡуй. Ата. Сыуаш. Мари. Еҙнә. Шар. Манси.

ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ!

# БӘЛӘ АЯҠ АҪТЫНДА..

• Стәрлетамаҡта балаларҙың тәҙрәнән ҡолап төшөүе хаҡында БР Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты хәбәр итә. "112" хеҙмәтенә Дуҫлыҡ урамында бер йәшлек баланың тәҙрәнән ҡолап төшөүе тураһында мәғлүмәт килә. Малай әлеге ваҡытта дауаханала. Һуңыраҡ Хоҙайбирҙин урамында дүрт йәшлек малай тәҙрәнән ҡолап төшөүе хаҡында хәбәр килә. Уны ла ашығыс рәүештә дауаханаға оҙатҡандар. Әле Һаулыҡ һаҡлау министрлығы ошо хәбәрҙе еткерҙе: тәүге осраҡта йәш ярымлыҡ бала 3-сө ҡаттан ҡолап төшкән булған. Уның хәле яҡшырған, реанимация бүлегенән дейөм палатаға күсергәндәр. Икенсе пациент - 4 йәшлек малай ауыр хәлдә. Уның ғүмере өсөн табиптар көрәшә. Әйткәндәй, быйыл йыл башынан тәҙрәнән 23 бала ҡолап төшкән, 3 сабый һәләк булған, 20-һе ауыр йәрәхәттәр менән ҡотолған.

• Әбйәлил районының Магнитогорск - Аэропорт юлында 55 йәшлек ҡатын идара иткән "Мазда 3" автомобиле ҡаршы килгән "Лада Приора" автомобиленә бәрелгән. Икенсе автомобиль руленда Сиҙәбе өлкәһенән 35 йәшлек ир булған. Бәрелеш һөҙөмтәһендә "Мазда" юлдан ситкә ауҙарылған. Уның водителе, ике пассажиры (ҡатынҡыҙҙар) ваҡиға урынында уҡ йән биргән. Шулай уҡ "Лада Приора" автомобиле водителенең 30 йәшлек тормош иптәше һәләк булған. Ә инде водителдең үҙен һәм уның өс балаһын - 2 һәм 12 йәшлек ҡыҙҙарын, 9 йәшлек малайын дауаханаға алып киткәндәр.Республиканың дәүләт автоинспекцияһынан хәбәр итеүҙәренсә, балаларҙың ғүмерен хәүефһеҙлек креслолары һаҡлап алып ҡалған. Хөрмәтле водителдәр, ошондай бәхетһеҙ хәлдәргә осрамаҫ өсөн юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен теүәл үтәгеҙ, ҡаршы һыҙатҡа сыҡмағыҙ, тиҙлек режимын боҙмағыҙ.

• Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитетынан хәбәр итеүҙәренсә, ошо көндәрҙә шул уҡ Әбйәлил районында Яҡтыкүлдә гидроцикл менән идара иткән ир кәмәгә бәрелгән. Кәмәлә пассажирҙар булмаған. Ваҡиға һөҙөмтәһендә гидроцикл водителе, 1990 йылғы Өфө егете һәләк була. Хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәрҙәре фажиғәнең сәбәптәрен һәм шарттарын асыҡлай.

ХОҠУҠ ҺАҒЫ



# АВГУСТА...

## ниндәй закондар үҙ көсөнә инде?

### Мутлашыусыларға ҡаршы көрәш

Банктар үҫмерҙәргә ата-әсәләрҙең ризалығы менән генә иҫәп асырға тейеш. Бәлиғ булмағандар йыш ҡына мутлашыусылар ҡорбаны була, уларҙың банк карталары урланған аҡсаны аҡсаға әйләндереү өсөн ҡулланыла. Ата-әсәләр контроле аҫтында бындай хәлдәргә юл ҡуймаҫҡа мөмкин. Элемтә операторына ғариза яҙып, смс-хәбәрҙәрҙән баш тартырға була. Ҡарар граждандарҙы телефон һәм интернет аша мутлашыусыларҙан яҡларға, шулай уҡ спамға ҡаршы көрәшергә мөмкинлек бирә.

### Тарихи хәтерҙе һаҡлау

Илебеҙҙе һәм уның мәнфәғәттәрен яҡлағанда һәләк булғандарҙың иҫтәлеген мәңгеләштергән хәрби ҡәберлектәрҙе һәм башҡа объекттарҙы мәсхәрәләгән өсөн енәйәт яуаплылығы индерелде. Был Рәсәй территорияһында һәм сит илдәрҙә урынлашҡан мемориалдарға ҡағыла. Быны өсөн 5 йылға тиклем иркенән мәхрүм ителеү янай.

### Яугирҙарға өҫтәмә ярҙам

Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы хәрби хеҙмәткәрҙәр өсөн Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләренең ғәмәлдә булыу ваҡыты оҙайтыла.

МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың яҡындары юридик әһәмиәткә эйә факттарҙы асыҡлау өсөн судҡа мөрәжәғәт иткәндә дәүләт пошлинаһын түләүҙән азат ителде (закон 23 июлдә көсөнә инде). Был уларға кәрәкле документтарҙы рәсмиләштереү процедураһын еңеләйтә.

### Маркировкаламайынса һатма!

Алкоголь, тәмәке йәки никотинлы продукцияны һатыу маҡсатында Рәсәй ҡануниәтендә ҡаралған мәғлүмәтте маркировкаламайынса етештереү, һатып алыу, һаҡлау, ташыу өсөн енәйәт яуаплылығы билдәләнә. Шулай уҡ бындай продукцияны маркировкалау өсөн ялған идентификация саралары әҙерләү һәм һатыу өсөн яуаплылыҡ индерелә.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# АВТОМОБИЛЬ ЙӨРӨТӨҮСЕЛӘРГӘ



**Рәсәйҙә 1 сентябрҙән автомобиль хужалары өсөн яңы ҡағиҙәләр эш башлаясаҡ.**

Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған документтарға ярашлы, автомобиль хужаларының документтар әҙерләүгә сығымдары артасаҡ. Транспорт сараһы паспортын алыу элекке 800 һум урынына 1200 һум тәшкил итәсәк. ПТС документына үҙгәреш индереү элекке 350 һум урынына 525 һум буласаҡ. Транспорт сараһын теркәү тураһындағы ҡағыҙ рәүешендәге танытма 1500 һумға тиклем ҡиммәтләнә, ә заманса пластик варианты 4500 һум торасаҡ.

Водитель танытмалары хаҡы шулай уҡ ҡиммәтләнә. Пластик нигеҙҙәгеһе - 4000 һум, ә яңы быуын документтары - 6000 һум. Халыҡ-ара водитель танытмаһы хаҡы 1600 һумдан 3200 һумға тиклем артасаҡ. Хәүефле йөк ташыуға рөхсәт алыуға танытманы рәсмиләштереү өсөн 1500 һум урынына 2250 һум түләргә тура киләсәк.

АФАРИН!

# БЕҘҘЕКЕЛӘР ЕҢЕЛЕҮ БЕЛМӘЙ!

**Башҡортостан шашкасылары Өфөлә үткән Рәсәй чемпионатында яҡшы һөҙөмтә күрһәтте.**




Башҡортостан шашкасылары 18 мөмкинлектән 10 награда, шул иҫәптән дүрт алтын, өс көмөш һәм шул уҡ һанда бронза миҙал яуланы. Ирегеттәр турнирында призлы пьедесталды Башҡортостан шашкасылары Айнур Шәйбәков, Александр Георгиев һәм Марсель Шәрәфетдинов яуланы. Ҡатын-ҡыҙҙар араһында ете тапҡыр донъя чемпионы Тамара Танһыҡҡужина еңеүсе булды. Уның турнирҙың туғыҙынсы партияһында еңеүе былтырғы Рәсәй чемпионы Сандаара Апросимованы мәрәйҙәр буйынса ҡыуып етеп, өҫтәмә критерийҙар буйынса уны уҙып китергә мөмкинлек бирҙе. Легендар спортсы ошо классик программала туғыҙынсы тапҡыр Рәсәй чемпионы титулын яуланы.

Ярыштың һуңғы көнөндә Башҡортостандан 10 тапҡыр донъя чемпионы Александр Георгиев һәм Яҡутстандан рус шашкаһы буйынса донъя һәм Европа чемпионы Тунаара Федорова "алтын" яуланы. "Көмөш" миҙалға блицта һәм рапидта дүрт тапҡыр донъя чемпионы, алты тапҡыр Рәсәй чемпионы Айгөл Иҙрисова (Башҡортостан) һәм ике тапҡыр Европа чемпионаты призеры, биш тапҡыр Рәсәй чемпионы Андрей Калмаков (Тверь өлкәһе) лайыҡ булды. "Бронза"ны Илья Дериглазов (Удмурт Республикаһы) һәм 2024 йылда Рәсәйҙең абсолют чемпионы, рус шашкаһы буйынса донъя һәм Европа чемпионы Сандаара Апросимова (Яҡутстан) яуланы.

Ярышта илдең 14 төбәгенән 72 спортсы, шул иҫәптән 12 гроссмейстер һәм 18 спорт мастеры ҡатнашты. Улар Башҡортостандың баш ҡалаһына Мәскәүҙән һәм Санкт-Петербургтан, Красноярск крайынан, Донецк Халыҡ Республикаһынан, Удмуртиянан, Яҡутстандан, шулай уҡ Брянск, Кемерово, Мәскәү, Нижегородка, Свердловск, Тверь һәм Түбән өлкәләренән килде. Турнир һөҙөмтәләре буйынса 2025 йылдың ноябрендә үтәсәк донъя һәм Европа чемпионатына Рәсәй йыйылма командаһы ойошторолдо.

ОЛАТАЙ-ӨЛӘСӘЙ ЛӨҒӘТЕ

# ЯБЫҒЫП, ЭЛМӘЙЕП БӨТКӘН...

**Өләсәй-олатайҙар һөйләшендә был һүҙҙәр һаман яңғырай әле. Уларҙы үҙ лөғәтебеҙҙә ҡулланһаҡ, телмәребеҙ ҙә матур яңғырар, башҡорт теленең ниндәй бай икәне тураһындағы хәҡиҡәтте лә нығытырбыҙ.**

- **"Ҡара" эшкә бер ҙә барымы юҡ** - әрһеҙ, ауыр эшкә барымы юҡ, мәғәнәһендә.
- **"Ҡара" шутҡа шәпмен** - телдән иҫәпләүгә шәпмен.
- **"Ҡара"кешеләргә, беҙгә, бара ул** - ябай, наҙаныраҡ кешеләргә бара ул.
- **"Ҡара" эшселәргә почёт юҡ** - ябай, ауыр эш эшләгән кешеләргә хөрмәт юҡ.
- **"Ҡара" ҡайғы кисерҙе** - ауыр, көс етмәҫлек ҡайғы кисерҙе.
- **Әле беҙҙә "ҡара"осор** - әле беҙҙә насар ваҡыт.
- **"Ҡара" һыу менән булышма** - иҫерткес эсемлек менән булышма.
- **Кеше алдында минең битемә "ҡара" яҡты** - кеше алдында мине хур итте.
- **"Ҡаратырыш" кеше** - үҙенекен һүҙ итә торған кеше.
- **Мөҙҙәте еткәс** - ваҡыты еткәс.
- **Киҙеү, һалыу** - йогошло ауырыу.
- **Килбәтһеҙ** - йәмһеҙ һын-торош.
- **Айышына төшөү** - ысынына ышаныу, аңын-тоҡон белеү.
- **Элмәйгән** - ябыҡҡан, бөлгән.
- **Шыраҡай** - асыҡ.
- **Көләпәрә** - капюшон.
- **Әүәле** - борон заман.
- **Шомоҡа** - шым кеше.
- **Шәйләнеңме?** - Төшөндөңмө, иғтибар иттеңме?
- **Ыйыҡ йыйыу** - бушҡа шыңшып илау, бәлә-каза тартыу.
- **Бишмыйыҡ** - бала-сағаны ҡурҡытыу һүҙе.
- **Бәлйерәгән** - бөлгән, кәрәге ҡалмаған.
- **Нәҫ баҫыу** - үтә ныҡ ялҡаулыҡ баҫыу.
- **Шырмый** - аҫтыртын шаян.
- **Баҙыҡ** - асыҡ төҫ.
- **Ындырһыҙ** - һөмһөҙ, йәмһеҙ.
- **Ығыш** - яй.
- **Ҡыпан кеше** - остоҡ кеше.
- **Ҡыпыштан** - бер нәмәнән дә ҡоро ҡалмау.
- **Бешәлкәһеҙ** - эшкинмәгән, барымы юҡ.
- **Киҫәмәй** - ҡолағына алмай, әйттең ни әйтмәнең ни.
- **Мишәү** - йыуаш, кәсһеҙ.
- **Быйтан** - остоҡланыу, ҡойроҡ болғау.
- **Мәтәйес** - бәләкәс, фетнә.
- **Ҡойолдороҡ** - унда-бында нәмәһен ҡалдырып, ташлап китеүсе кеше.
- **Һәптән** - хәйерсе, буш йөрөүсе.
- **Оторо** - кире.
- **Күрнәсә** -матур итеп эшләп ҡуйған урын.
- **Әстәкәт** - туймаҫ, ҡомһоҙ.
- **Ҡуналтаҡ** - яланаяҡ аяҡ кейеме кейеү.
- **Әскернә** - эсендә боҙоҡлоҡ йөрөтөүсе, мәскәй.
- **Ҡашығаяҡ** - наүыт-һаба.
- **Көтөрләү** - көнсөллөгә килеү.
- **Ымыйым** - йәшертен һүҙ, ҡылыҡ.
- **Йүрмә** - килем.
- **Хөсөтлөк** - боҙоҡлоҡҡа өндәү.
- **Мәхшәр** - ығы-зығы.
- **Ҡәҫтәрләү** - тәртипләп, тәрбиәләп.
- **Нотоҡ** - вәғәз, нәсихәт.
- **Көсәп** -теләп, ынтылып.
- **Түрбаш** - өйҙәң түре.
- **Ҡыян** - хәйләкәр.
- **Күшерелеү** - ялҡау, яй.
- **Ҡыуғын** - төркөм мал-тыуарҙы алып китеү.
- **Арманһыҙ** - арыу, хәлһеҙләнеү.
- **Кинәйә** - төрттөрөп аңлатыу.
- **Хаслыҡ ҡылыу** - боҙоҡлоҡ, насарлыҡ эшләү.
- **Көпө** - эсенә мамыҡ һырлап тегелгән ҡышҡы боронғо кейем.
- **Исрафлау** - тәләфләү, әрәм итеү.

**Илсиә ҠАСИМОВА-ЯНЫБАЕВА.**
**Әбйәлил районы Хәмит ауылы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮҘЕҢДӘН АСЫРАҠҠА...

## һәм дә яланғасыраҡҡа сер бирмә

Төлкөгә баш булғансы, арыҫланға ҡойроҡ бул.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Артыҡ ныҡ күңел асыуҙар - боҙоҡлоҡ, һәм уны тәнҡитләргә кәрәк.

**(Аристотель).**

Беренсе үлемдән һуң башҡаһы юҡ.

**(Томас Дилан).**

Энтузиазмдан мәхрүм кешеләр өсөн йәшәү - ул ғазап ҡына.

**(Морис Баррес).**

Ахмаҡлыҡтар менән көрәшә торғас, иң ғәҙел һәм етди кешеләр ҙә тупаҫҡа әйләнә.

**(Фридрих Ницше).**

Әгәр ҙә белемең юҡ икән, исмаһам, мейеңдә эшләт.

**(Сөләймән).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Үҙ-үҙен эҙләгән кешеләрҙә осратҡанығыҙ бармы? Кемдер таба үҙен, кемдер ғүмер буйы эҙләй. Бына шундай үҙ-үҙен эҙләгән бер кеше Буддаға килә. Будда унан:"Һин нимә эҙләйһең?" - тип һорай. "Мин үҙ-үҙемде эҙләйем. Ярҙам итсе миңә, зинһар..." - ти кеше. Будда уға: "Әгәр ҙә мин ҡушҡанды эшләргә һүҙ бирһәң, мин һиңә ярҙам итәм..." - ти. Шунда теге кеше илап өбәрә:**

**- Нисек һүҙ бирәйем ти инде мин? Мин - юҡ, шулай булғас, мин һүҙ бирә лә алмайым. Мин иртәгә нимә эшләйәсәгемде лә белмәйем, минең "минем" юҡ, минән бер ниндәй вәғәҙә лә өмөт итә алмайһығыҙ. Тырышып ҡарармын, тип әйтеүҙән башҡа бер ни ҙә әйтә алмайым. Әммә был, мин һүҙемдә торормон, тигәнде аңлатмай, сөнки мин юҡ. Мин вәғәҙә бирә һәм шул вәғәҙәһен үтәй алған нимәләр эҙләйем. Ярҙам ит миңә шул нимәнелер табырға...**

**- Мин һинән ошо һүҙҙәрҙе ишетергә теләгәйнем дә, - ти Будда. - Әгәр ҙә һин минә нимәләр вәғәҙә итһәң, мин һиңә ярҙам итеүҙән баш тартыр инем. Әгәр ҙә һин:"Мин һүҙ бирәм, мин быны эшләйәсәкмен", - тигән булһаң, тимәк, һин ысынлап та үҙ-үҙеңде эҙләүсе түгел. Үҙ-үҙен эҙләүсе кеше үҙендә әле булмаған нәмәне эҙләй. Шулай түгел икән, эҙләнеүҙән ни файҙа! Һин - юҡ, кеше ошоно тоя икән, тимәк, ул хәрәкәттә, ул иждат итә, ул юғарыға ынтыла..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 14.08.2025 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 14.08.2025 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 15.08.2025 й.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2707
Заказ - 1526
1 582218 911006 25032